ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

13-19 май (һабанай)

2017

№ 19 (749)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Балалар һәм ейәндәр... яугир олатайҙар менән бер сафта 4



Һунғария башҡорттары, йәки Европала 500 йыллыҡ тарих ҡалдырған халыҡ тураһында 6-7



Хәбир Ғәлимов ҡыҙы ул! 8



Халыҡ мөғжизәгә һыуһаған, халыҡтың ышанғыһы килә... 9



ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 11-нән 21 майға тиклемге ун көнлөктә 2017 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә арзаныраҡ хаҡтар менән яҙылырға була. Республикабыҙҙың һәр районы-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла ВО665 индекслы "Киске Өфө"гә - 500 һум 56 тингә, В0673 индекслыһына (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) - 530 һум 58 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары - 448 һум 50 тингә яҙыла ала.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## РФ Хөкүмәте Премьер-министры Д. Медведев Дәүләт Думаһы депутаттарына отчетында, илебеҙ иҡтисади күрһәткестәре, хәл тотороҡланды, хатта бер ни тиклем кимәлдә үҫеш тә бар, тип билдәләне билдәләүгә, ә һеҙ был үҙгәрешкә тояһығыҙмы?

*Кадир МӘҒӘФУРОВ, иҡтисад фәндәре докторы, профессор:* Илдәге иҡтисади хәлдең тотороҡланыуы, хатта ки унын "бер ни тиклем кимәлдә үҫеш алыуы" хаҡында һүҙ алып барылғанда, асылда, тел төбөндә телгәнде ысынбарлыҡ итергә маташыу, һандар һәм күрһәткестәр менән уйнау ғәмәле йәшеренгән. Хәтерегеҙҙәлер, 2013 йыл Рәсәй иҡтисады, шул иҫәптән халыҡтың килеме ныҡ түбән тәгәрәне. Ләкин был процесс бит үҙгәрешһеҙ, бер кимәлдә генә тормай. Рәсәй иҡтисадының нимәгә бәйлелеге сер түгел. Нефткә хаҡ түбән икән, үҫеш темпы ла түбән була. Һуңғы ике-өс йыл эсендә бер аҙ ғына үҫеш күҙәтелде икән, был һис кенә лә Рәсәй иҡтисадының ҡаҙанышы тигән һүҙ түгел. Иҡтисадты тотороҡло итеү өсөн етештереүҙе яйға һалырға кәрәк. Ә дәүләттең был йәһәттән аныҡ ҡына эш программаһы юҡ. Бындай билдәһеҙлек инвесторҙар йәлеп итеүгә лә булышлыҡ яһамай. Бөгөн ил сәнәғәтенең етештереү күләме хатта 1990-1991 йылғы кимәлдән дә күпкә ҡалыша. Айырыуса шуныһы йәл: илебеҙҙә станоктар, ҡорамалдар, инструменттар етештереү тармағы тулыһынса юҡҡа сыҡты. Уларға булған ихтыяжды 100 проценты менән сит ил тауарҙары ҡәнәғәтләндерә. Киң ҡулланыу тауарҙары менән иһә беҙҙе Ҡытай тәьмин итеп тора. Инновацион иҡтисад хаҡында телгә алыуы ла оят: илдә йылына 500 кешегә ни бары 1 компьютер етештерелә. Ҡыҫҡаһы, бында әллә ни оптимизмға нигеҙ күренмәй әле, тип әйтер инем. Ҡоро статистика, һандарға ышыҡланып ҡына күрсәткән сығып булһа икән... Халыҡтың тормош-көнкүреше, килем кимәле - бына бөгөн ысынбарлыҡтың реаль көҙгөләнеше. Сит ил санкцияларын, ғәҙәттә, иҡтисад көрсөгө сәбәптәренең береһе тип күрһәтергә маташалар, был дөрөҫ түгел. Сәбәптәр тәрәндәрәк. Төп сәбәп: беҙҙең иҡтисад Рәсәйҙе үҫтереү, халыҡ тормошон яҡшыртыуға ҡоролмаған. Инвестиция артынан ҡыуыу, фәҡәт уға өмөт бағлау, бер яҡтан, хәйер теләнселәүгә лә оҡшап китә. Эске резервтарҙы эшкә егеүҙең бит төрлө юлдары бар. Мәҫәлән, байҙар байығандан байый, халыҡ менән бүлешергә, ил бюджетын арттырыуға өлөш индерергә теләмәй. Әйткәндәй, Рәсәй Хөкүмәтенең һаман булһа физик шәхестәр килеменә прогрессив һалым шкалаһы индереү тәҡдимен кире ҡаға килеүен дә әлеге байҙар һәм олигархтар ҡатламы мәнфәғәтен күҙәтеү тип аңларға кәрәктер. Шул уҡ ваҡытта сит илдәрҙең ҡайһы берҙәрендә килемдән һалым күләме 70-80 процентҡа тиклем тәшкил иткән осраҡтар бар - һәр хәлдә, ғәҙеллек тантана итә. Беҙҙә бит эш абсурдҡа барып етә. Былтырғы йыл йомғаҡтары буйынса, мәҫәлән, ике олигархтың килеме 4-6 млрд долларғаса артҡан. Илебеҙ ер-һыу ресурстарын, сеймалын һәм башҡаһын файҙаланып байығыуҙы ҡатламдың байтаҡ булыуын иҫәпкә алғанда, прогрессив һалым беҙҙең бюджетты ла бермә-бер арттырасаҡ ҡына. Үҙе хәйер теләнселәү хәленә төшкән ябай халыҡтан һалым һауып ятыу, бер һүҙ менән генә әйткәндә, оятһыҙлыҡ ул.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ТУҠТА, МӘЛ!

# ҮЛЕМҺЕҘ ПОЛК




***Ейәндәргә алсаҡ олатайбыҙ,***
***Ҡыҙ-улдарға үрнәк атайбыҙ.***
***Еңеү көнө! Үлемһеҙ полк менән***
***Өфөм урамынан атлайбыҙ.***
***Утлы йылдар, оҙон юлдар үтеп,***
***Мәңгелектең асып шаршауын,***
***Күҙ йәштәре аша күҙәтәбеҙ***
***Был ташҡындың ерҙән атлауын.***
***Ул саҡтағы фотоһүрәттәрҙә***
***Йәп-йәш атай, йәп-йәш олатай.***
***Беҙҙең хәтерҙәрҙән юйылмаҫҡа***
***Киләсәккә ҡарап ул атлай...***
***Минең атай, һинең олатай.***

Әхмәҙин ӘФТӘХ.

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тыңлдырған, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ҺӨЙӨП БАҠҠАНДЫ...

## һөйәләр

***Фәнисә БӘҘРЕТДИНОВА, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге 1-се һанлы башҡорт республика балалар йорто директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре:*** Борон-борондан халҡыбыҙ әсә образын илаһи бер йән итеп күҙаллағандар, йыр, легенда һәм риүәйәттәрҙә уның бөйөклөгөн, мәрхәмәтен, нәзәкәтен һүрәтләгән. Нәфис әҙәбиәттә лә ул йәшәйешкә һулыш өрөүсе донъя тотҡаһы булараҡ урын ала. Ә уның менән айырылышыу иң ауыр ҡайғыларҙың береһе булараҡ тасуирлана. Әсә һәм бала... Берберенән айырылғыһыҙ бер бөтөн төшөнсә. Әсә һөйөүе бар нәмәнән дә көслө. Ул Хоҙай Тәғәлә тарафынан ебәрелгән бөйөк зат. Әгәр ошо йондоҙ һүнә, һүрелә икән, донъя ҡараңғыланып, етемһерәп ҡала.

Нисек кенә үкенесле һәм аяныс булмаһын, бөгөн ошо илаһи образ тәҫһеҙләнә, яҡты һыҙаттары тоноҡлана бара кеүек. Һуңғы йылдарҙа әсәләрҙең балаларына ҡарата енәйәттең арта барыуы хәүеф һәм әрнеү тыуҙыра. Әсәлек хоҡуғынан мәхрүм ителгән, йә булмаһа балаһын йәберләгән ҡатын-ҡыҙ, сүплектә табылған сабый. Быйаса ишетелмәгән һәм аҡылға һыймаҫтай былай күренештәр ғәҙәти хәлгә әйләнеп тә китте, буғай. Ошо ҡаҙанда ҡайнаған кеше булараҡ, сабыйҙарҙың һағышлы ҡараштары менән осрашҡан һайын яңынан-яңы һорауҙарға яуап эҙләйем. Нимә булды беҙгә, әсәйҙәр? Тәбиғәт, Хоҙай тарафынан бирелгән әсәлек инстинкттары емерелеүенең сәбәптәре нимәлә? Тормош ауырлыҡтары алдында баҙап ҡалдыҡмы? Бер заман да һынауҙарһыҙ килмәгән. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың донъялағы төп тәғәйенләнеше нәҫел ҡалдырыу ғына түгел, ә сабыйҙарыбыҙҙы лайыҡлы бағыу икәнен дә онотоп ебәрмәһәк ине.

Шөкөр, ят балаларҙы үҙенекеләй күреп ҡайғыртҡан, наҙлы ҡулдары менән һаҡлаған, яҡлаған әсәләр бар. Уларҙың ҡаһарманлығы арҡаһында һыйыныр урын эҙләп аҙашҡан сабыйҙар яҡты юл таба. Һуңғы биш йыл эсендә генә 100-ҙән ашыу сабыйыбыҙ әсә наҙына төрөндө. Тапҡан әсә түгел, баҡҡан әсә, тиеүҙәре дөрөҫ шул. Ҡан-ҡәрҙәшлек нисек кенә магик көскә эйә булмаһын, ул туғанлыҡ ептәрен нығытыусы берҙән-бер ысул түгел. Тик фиҙаҡәр, сабыр, ныҡышмалылыҡ талап иткән тәрбиәүи процесса ғына әсәлек хисе һәм әсәлек мөхәббәте үҫешә алғанын иҫбат иткән әсәләр ҙә етерлек. Һөйөп баҡҡан кешене лә һөйәләр, шуны иҫтә тотайыҡ. Ҡатын-ҡыҙ донъяға киләсәк бүләк итә. Уның һулышынан тормош йәшәрә, ғүмер усағы мәңге һүнмәй яна. Киләсәгебеҙ алдында сикһеҙ яуаплыбыҙ, балаларҙы рәнйетмәй, милләтебеҙҙең лайыҡлы вәкилдәре итеп тәрбиәләйек!

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# РФ Хөкүмәте Премьер-министры Д. Медведев Дәүләт Думаһы депутаттарына отчетында, илебеҙ иҡтисади күрсәткестәрендә бер ни тиклем, хәл тотороҡланды, хатта бер ни тиклем кимәлдә үҫеш тә бар, тип билдәләне билдәләүгә, ә беҙ был үҙгәреште тояһыҙмы?



(Башы 1-се биттә).

***Сәлимйән ВӘЛИЕВ, РФ мәғариф отличнигы:*** Дөрөҫөн әйткәндә, отчеттарҙа хәлдәрҙе һәр саҡ тип әйтерлек һәүетемсә итеп һүрәтләргә тырышалар. Юғары трибунанан тороп һөйләү, һандар, күрһәткестәр менән эш итеү - бер булһа, бына урындарҙағы ысынбарлыҡтың эсендә инеп күреү - бөтөнләй икенсе нәмә. Бында инде һандар урынына - аныҡ кешеләр яҙмышы, уларҙың тормош шарттары. Беҙҙең Баймаҡ районы Теләс ауылы биләмәһенә күп кенә ауылдар ҡарай. Күреп-белеп йөрөүемсә, халыҡтың йәшәү кимәле бик түбән: кеше эшһеҙлектән йонсой, аҡсалары юҡ. Темәскә килгәндә иһә, беҙҙә ул йәһәттән шөкөр, тип әйтергә була, сөнки эшҡыуарҙар, фермерҙар байтаҡ булғанлыҡтан, ауыл халҡы эш менән ниндәйҙер кимәлдә булһа ла тәьмин ителгән. Барлығы 35 пилорама эшләп тора. Өҫтәүенә, хәҙер беҙҙә кеше таш сығарыу шөғөлөнә керешеп китте. Бына ошонда йәшеренгән дә инде Темәс проблемалары. Минең өй юл ситендәрәк урынлашҡан, бөтәһе лә асыҡ күренә: ситтән килгән ҙур-ҙур йөк машиналары туктауһыҙ үтеп тора. Нимә тейәгәндәр, тиһегеҙме? Темәс урманы менән Урал тау һәм Ирәндектең аҫыл таштарын. Беҙҙә шулай байтаҡтан бирле инде тау йөрәген аҡтарып, уның яҫыяҫы плитә таштарын күпләп ситкә ташыу менән шөғөлләнәләр. Ҡиммәтле йөҙләү материалы булырлыҡ таштарҙы сығарған урында уҡ шыплап төрөп, хатта сит илдәргә лә оҙаталар, тиҙәр. Кем хужа унда, ҡайҙан килгән улар - бер кем белмәй. Арттарынан, исмаһам, ары-бире культивация-фәлән үткәреп, ерҙе тигеҙләп тә китмәйҙәр. Нисек аҡтарылған - шулай ятып ҡала боҙолған еребеҙ, бер ниндәй контроль дә, хужа ла юҡ. Халыҡ сабынлыҡ проблемаһына дусар ителде. Фермерҙар күпләп йылҡы өйөрҙәре аҫырай. Улар йыл әйләнәһенә иректе рәүештә тәбиғәт ҡосағында йөрөп, бөтөн булған сабынлыҡтарҙы тапап, сапсып, ерҙең үләнле ҡатламын юҡҡа сығара. Шуға ауылда күптәр мал-тыуар, айырыуса һыйыр ҙа аҫрамай башланы. Бер һүҙ менән әйткәндә, районыбыҙҙың, республикабыҙҙың иҡтисад үҫешенә булышлыҡ итерлек стратегик сеймал тәләфләнә, сит ҡулдарға оҙатыла, ә үҙебеҙҙә ауыл юлдарының батҡағын йырып үткеһеҙ. Бына шундай хужаһыҙлыҡ, тәбиғәтебеҙгә ҡарата ауһыҙлыҡ, законһыҙлыҡ хөкөм һөрә беҙҙә. Исмаһам, Экология йылында тәбиғәтте һаҡлау хаҡында бер кәлимә һүҙ әйтелһәсе РФ Хөкүмәте отчетында - ләммим...

***Фәризә ИСМӘҒИЛЕВА, хеҙмәт ветераны:*** Мин пенсиямды еткерә алмағанлыҡтан, эшләргә мәжбүрмен һәм тормош хәлемдә бер ниндәй ҙә алға китеш тоймайым. Киреһенсә, элек һатып алырға мөмкинлегем булған аҙыҡ-түлек төрҙәрен һуңғы ваҡыт алмай башланым. Аҡсамды фәҡәт аҙыҡ-түлеккә генә тартып-һуҙып еткерә алам, ҡайһы айҙарҙа уныһы ла мөмкин түгел. Мәҫәлән, үткән ай ванна бүлмәһендәге кран эштән сыҡты. Сантехник, быны ташларға кәрәк, туҙған, яңыны һатып ал, тигәс, иң арзанлыһын һайларға тырышып, 2,5 меңгә алырға тура килде. Шунан да арзанын сантехник эшкә лә һынамай, сифатһыҙ, ти. Уның үҙенә лә түләргә тура килде, бушҡа эшләмәй бирәү ҙә. Ана шундайыраҡ көтөлмәгән сығымдар арҡаһында аҡса ашарға ла етмәй ҡала. Пенсияның ҡап яртыһын торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәте йотоп тора. Уның өсөн түләү ҙә ай һайын арта ла килә. Түләйбеҙ - ни өсөн икәнен белмәйбеҙ. Студент балама кейем-һалым, башҡа кәрәк-яраҡ та алып булмай хатта. Бына ошондай ябай кеше бәсен ебәреүсе, кәмһетелеү шарттарында бер мин генә түгел бит. Күптәрҙең хәле минекенән дә ауырыраҡ икәнен беләм. Әле бына "АиФ" гәзитендә Жириновскийҙың интервьюһын уҡыным. Уның әйтеүенсә, үткән бер йыл эсендә Рәсәйҙә олигархтар финанс хәлдәрен 100 млрд долларға, йәғни ике тапҡырға арттырыуға өлгәшкән. Был йәмғеһе 6 трлн. һум - ил бюджетының яртыһына тиң! Артабан Жириновский, сиктән тыш табышҡа юл ҡуймаҫҡа кәрәк, ти. Быының өсөн сит илдәрҙәге һымаҡ, килемгә һалым күләмен арттырыу кәрәклеге бөтәбеҙгә лә билдәле, тик ил етәкселеге был саранан баш тарта, киреһенсә, һаман да халыҡ кеҫәһен һөрмәй: 1 июндән балаһыҙҙарға һалым мәсьәләһен күтәреп сыктылар - бына һиңә аҙ булһа! Ә бит түләр өсөн кешегә лайыҡлы эш хаҡы, эш урындары кәрәк - быны кем ҡайғыртыр? Ирекһеҙҙән көнөнән эшләп йөрөүсе пенсионерҙарҙың да хатта аҡтыҡҡы тиндәрен тартып алып, законһыҙ рәүештә уларҙың пенсияларын индексациялауҙан баш тарттылар. Ошо түгелме һуң ил етәкселегенең үҙ граждандарын мыҫҡыл итеп, күрәләтә йылдан-йыл бөлгөнлөккә этәреүе?

Тағы шуныһы көлкө лә тойолдо, асыуҙы ла ҡабартты: Хөкүмәт отчетында, ауыҙ тултырып һөйләрлек уңыштар булмағас, ахыры, Д.Медведев һуңғы йылдар ҡаҙанышы итеп илдә уртаса йәш оҙайлығының артыуын миҫал итеп килтерҙе. Ҡыҙыҡ, ә бында Хөкүмәттең ни ҡыҫылышы бар? Һатып алыу мөмкинлеге бермә-бер кәмегәс, халыҡ консервантлы, нитратлы, гены үҙгәртелгән аҙыҡ-түлекте алмай, ашауҙы сикләй, билбауҙы ҡыҫа төшкәндәр, бәлки? Ә бит был урыҫ халҡының "Бәхет булмаҫ ине, бәхетһеҙлек ярҙам итте," тигән тапҡыр һүҙен иҫкә төшөрә түгелме?

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓23-26 майҙа Өфөлә Рәсәй нефть-газ химияһы форумы һәм "Газ. Нефть. Технологиялар-2017" халыҡ-ара күргәҙмәһе ойоштоһола. Унда Рәсәйҙең 40 төбәгенән һәм 20-гә яҡын сит илдән компаниялар ҡатнаша. Ҡатнашыусыларҙың 80 проценты - етештереүсе предприятиелар, тип билдәләне Башҡортостан хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары Фәрхәд Самедов.

✓Рәсәй Президенты полиция генерал-майоры Роман Викторович Деевты Башҡортостан Республикаһы буйынса эске эштәр министры итеп тәғәйенләне. 1 майҙа Владимир Путин тәғәйенләү тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Ошо уҡ документ менән дәүләт башлығы полиция полковнигы Андрей Демидовты республиканың эске эштәр министры урынбаҫары - полиция етәксеһе итеп тәғәйенләне.

✓19 майҙа Өфө "Эшкә - велосипедта" Бөтә Рәсәй акцияһына ҡушыла. Акцияның рәсми сайтында акцияла ҡатнашырға теркәлгәндәр һаны буйынса ҡалалар араһында дүҫтарса ярыш үткәрелә. Статистика тәүлегенә бер тапҡыр яңыртыла. 10-дан ашыу кеше теркәлгән ҡалалар ғына күрһәтелә. Өфө әлегә исемлектә 6-сы урында килә. Ҡатнашыусылар һаны буйынса Мәскәү - беренсе, Калининград - икенсе, Санкт-Петербург өсөнсө урында бара.

✓Сенаторҙар усаҡ яҡҡан өсөн штрафтарҙы миллион һумға тиклем арттырырға тәкдим итә. Парламентарийҙар урман янғындарының күпселеген халыҡтың яуаплыһыҙлығы һәм ғәмһеҙлеге менән бәйләй. Әлеге көндә штрафтарҙың суммаһы бер кемде лә ҡурҡытмай, тип иҫәпләй халыҡ һайланыусылары. Янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙоп, усаҡ яҡҡан өсөн граждандарға өс мең һумға тиклем штраф янай. Әгәр янғын сыҡһа, граждандар - биш мең, вазифалы кешеләр - 50 мең, ойошмалар 500 мең һумдан алып миллион һумғаса түләргә тейеш.

✓Өфөлә юл полицияһы "Каршы һыҙат" операцияһы үткәрә. Ҡаршы һыҙатҡа йәки ҡаршы трамвай юлдарына сыҡҡан өсөн 5 мең һум штраф йәки 4-6 айға водитель таныҡлығын тартып алыу янай. Ҡағиҙәне ҡайтанан боҙған өсөн бер йыл буйы рулгә ултырыуҙы тыйыу йәки биш мең һум штраф ҡаралған. Юл ҡағиҙәһен боҙоу осрағы автоматлаштырылған режимда эшләгән камераға төшөрөлөргә тейеш, тип хәбәр иттеләр Өфөләге автоинспекцияла.

**✓ Ер йөҙөндә йәшәгән мөхитен аяуһыҙ ҡыйратыу, ҡырыуҙа үҙен иң аҡыллы тип иҫәпләгән әҙәмдән дә яуыз йән эйәһе юҡтыр тип уйларлыҡ. Хатта йыртҡыстар ҙа тәбиғәттән үҙҙәренә көндәлек кәрәген генә ала белә.**



УЙЛЫҒА - УЙ

# ЯБАЙ КЕШЕНЕҢ...

## ҡатмарлы фекерҙәре





### Тәбиғәттә бөтә ғәмәл камил

*Эй, әҙәмдәр, донъя серҙәренә*
*Төшөнгәндәр әле бик һирәк;*
*Һаҡ булығыҙ сиктәр биләгәндә,*
*Әҙәм көслө, Йыһан көслөрәк!..*
*Беҙгә тиклем шулай,*
*беҙҙән һуң да*
*Был донъяға ни булһын, тиҙәр...*
*Йыһан көйәнтәһе ике осло,*
*Ипһеҙҙәргә осо нык тейәр!*

Донъя тәбиғәтен нисек ҡорған, кеше ғүмере лә шулай: мәшәҡәтле көнө, хисле кисе, хәүефле төнө, өмөтлө таңы бар. Кисәге көндөң тәжрибәһенә таянып, бөгөнгө көндән һабаҡ алып, иртәгәһе көндә йәшәргә ынтылыу - ғүмер йәшәү тип аталалыр. Шәхестең йән һәләттәрен асып, донъяла тәғәйен урынын табыуы - йәшәү мәғәнәһелер.

Тәбиғәттә бөтә хәл, ғәмәлдәр тығыҙ бәйләнештә икәненә шик юҡ. Тәбиғәт миҙгелдәре, һауа торошо, йәшәү шарттары даими үҙгәрештә. Тәбиғәттәге үҙгәрештәр унда йәшәгән һәр тереклеккә ҡағылмайынса үтмәгәне электән билдәле. Мәҫәлән, 1 кг ауырлығындағы йыртҡысты туйындырыр өсөн 10 кг хайуан ите, 10 кг ауырлығындағы хайуанды туҡландырыр өсөн 100 кг үлән кәрәк. Был тәбиғәт тормошонда мотлаҡ үтәлә торған үҙбәйләнеш. Әгәр тығыҙ бәйләнештең бер өлөшө ниндәйҙер зыян күреү һөҙөмтәһендә баланс боҙола икән, бөтә үлән-үҫемлек, аҡһым менән туҡланыусы һөтимәрҙәр системаһында кире тергеҙмәҫлек үҙгәрештәр тыуыуы ихтимал.

Мәҫәлән, заманында сәсеүлектәрҙе ҡороҡкостарҙан һаҡлау өсөн ағыулы матдәләрҙе киң ҡулланыуҙан яландарҙа, урмандарҙа сысҡандар ҡырылды. Һөҙөмтәлә, улар менән туҡланған терпе, өкө, йыландарҙың һаны күҙгә күренеп кәмене. Йыл һайын үҫемлектәрҙең 38-40 төрө, ә тереклектәрҙең тиҫтәләгән төрө юҡҡа сығыуы билдәле. Әгәр бөгөнгө темптар менән дауам итһә, 2035 йылға бал ҡорттарының һаны ҡырҡа кәмеүен күҙаллай биологтар. Ҡырылып бөтмәгән хәлдә лә, һиҙелерлек кәмеһә, улар һеркәләндергән үҫемлектәрҙең һирәгәйеүе, ҡайһы төрҙәрҙең бөтөнләй юҡҡа сығыуы ихтимал. Ә был, үҙ сиратында, улар менән туҡланған тереклектәрҙең үрсеүенә янаясаҡ. Сөнки ҡош-ҡорт, йәнлектәрҙең үрсеүе фәҡәт улар туҡланған аҙыҡ күләменә бәйле.

Дөйөм индустриялаштырыу башланғандан бирле континенттарҙа төрҙәрҙең юғалыуы катастрофик күләмдә тиҙләнде. Шул уҡ ваҡытта иң агрессив, иң сүп төрҙәр, йәндәренә тәбиғәттән шундай программа һалыныуы һөҙөмтәһендәлер, иң ҡороҡкос үҙгәрештәргә лә бирешмәй, иң ҡаты шарттарға ла тиҙ яраҡлашып, әрһеҙ үрсеүҙәрен дауам итә. Был хәл үҫемлектәр, ҡоштар, балыҡтар, һөтимәрҙәр араһында ла күҙәтелә һәм тәбиғи эволюция һөҙөмтәһе түгел, ә кешелектең аңлы эшмәкәрлеге арҡаһында барлыҡҡа килгән катаклизм тип күҙаллана.

Элегерәк болондарҙа ҡоштар һайрауына ҡушылып тәбиғәт йырлай ине. Урман, яландарҙа йыландарҙың, кеҫәрткеләрҙең төрлө төҫтәге төрҙәре һанап бөткөһөҙ булды. Яр буйҙары ҡарлуғас ояларынан тишек-тошоҡ ине. Төйләгәндәр ҡаҙ себештәрен алып китеп, әсәй-өләсәйҙәрҙең теңкәһен ҡоротто. Баҡа тауыштарынан ҡолаҡ тонор ине... Хәҙер урмандарҙа йәнлектәр, тау-таш араһында йыландарҙың үҙҙәрен түгел, ташлап киткән ҡабыҡтарын, кеҫәрткеләрҙең ҡойроҡ остарын да осратмаҫһың. Йылға, күл буйҙарында баҡа тауыштары ла бик һирәк, ҡоштар һайрауҙан бөтөнләй тыйылды. Урман, тау йылғаларынан бәрҙе, сабаҡ, ҡорбан балыҡтары ҡасты. Ҡый үләне, сүп-сар баҫҡан күлдәрҙә табан балығы урынына сүп балыҡтарҙың ҡатнаш төрҙәре ҡотороноп үрсей. Йәшел ағаслы сауҡалыҡтар тапалып, янып, ҡола яланға, йылға үҙәндәре бысраҡ канауға әйләнеп бөттө. Урман төпкөлөндә терпе йәки өкө күреү - тормошҡа ашмаҫлыҡ хыял. Күп йәнлек, ҡош, бөжәк төрҙәре күҙгә күренеп кәмене...

Ер, һыу, һауа бысраныуы, климат шарттары үҙгәреүе планетала йәшәүсе йәндәрҙең һәр береһенә ҡағыла. Йыл һайын ер йөҙөнән юҡҡа сыҡҡан үҫемлек, ҡош, балыҡ, бөжәк, хайуандарҙың исемлеген теркәргә мең бит ҡағыҙ ҙа етмәҫ. Былар бөтәһе лә һуңғы 50-60 йыл дауамында - беҙ йәшәгән бер быуын ғүмерендәге үҙгәрештәр. Тәбиғи үҙгәрештәр түгел, ә кешеләрҙең һаҡһыҙ эшмәкәрлеге арҡаһында килеп сыҡҡан тәбиғәт үҙгәрештәренең һөҙөмтәһе былар. Ошондай дәүерҙәге булмышын хәл итер, яһалма йәки тәбиғи һынауҙарҙа тере ҡалып, нәҫелен дауам итер өсөн һәр йән төрө, һәр үҙгәрешкә яраҡлашып, ҡулайлашырға мәжбүр.

Әҙәм балаһына ла, бер тапҡыр ғына бирелгән ғүмерен ҡәҙерләп, донъяһын һаҡлап, ерҙә лайыҡлы йәшәйем тиһә, өйрәнергә алыҫҡа йөрөйһө юҡ: өлгө алырлыҡ камил ҡоролған тормош уның эргә-тирәһендә генә - тәбиғәт ҡоролошо, тәбиғәт тормошо ул. Тәбиғәттә бер нәмә лә күҙ буяу өсөн генә эшләнмәй, бер нәмә лә әрәм булмай, файҙаһыҙ бер ғәмәл дә юҡ. Ошо камил ҡоролған тәбиғәттең тәжрибәһен өйрәнеп, үҙенең берҙән-бер йәшәү сығанағы - тирә-яҡ мөхитен ҡурсалап, ҡәҙерләп йәшәйһе урынға, кеше ер йөҙөн шартлата, яндыра, ағыулай, ағастарын ҡырҡа, таштарын аҡтара, һыуҙарын ҡамай, йәнлек, ҡош-ҡорттарын ҡыра, ерҙең елеген аяуһыҙ һура, ә тәбиғәт иһә елле суҡмарын тотоп ҡаршы сығып, үс алып йөрөмәй. Ул үҙен яҡлар, донъяһын һаҡлар өсөн әллә ҡайһы арала, әллә ниндәй ысулын табып, әҙәм ҡырғандарҙы тергеҙә, ҡыйратҡандарҙы төҙөкләндерә башлай. Шул маҡсатта, түҙерлек әмәле ҡалмаған сиктә, үҙенә даими зыян килтереүсене юҡ итеүе лә ихтимал...

Ер йөҙөндә йәшәгән мөхитен аяуһыҙ ҡыйратыу, ҡырыуҙа үҙен иң аҡыллы тип иҫәпләгән әҙәмдән дә яуыз йән эйәһе юҡтыр тип уйларлыҡ. Хатта йыртҡыстар ҙа тәбиғәттән үҙҙәренә көндәлек кәрәген генә ала белә. Шул уҡ ваҡытта, урманы ҡырҡылып, ҡырылып бөткән ерҙәрҙә яңы сауҡалыҡтар ултыртып сығыр өсөн, йылға буйҙарында таллыҡ, ереклектәр үҫтерер өсөн, урмандарҙағы тереклектәрҙе һаҡлау, ҡош-ҡортто тергеҙеү өсөн оҙаҡ ваҡыт та, гигант сығымдар ҙа, айырым шарттар тыуҙырылыуы ла кәрәкмәй. Барын ҡәҙерләп, зыян күргәндәрен ваҡытында тергеҙергә өйрәнергә генә кәрәк. Шул турала уйланһаң, ысынлап та, кешелек ерҙә үҙ донъяһын юҡ итергә тыуҙырылған йән эйәһе тип фараз итерлек, билләһи!

Тәбиғәттең сыҙам-сабырлығына, талмаҫ-тарҡалмаҫ йәшәү көсөнә иҫ китерлек! Тәбиғәт бындай һүрелмәҫ көстө ҡайҙан ала икән, тигән кеүегерәк һүҙ сыҡһа йә бәхәс ҡупһа, шикһеҙ, Йыһанда ифрат көслө Бөйөк Аң барҙыр, тип һығымта яһайһың. Сөнки ҡасандыр ҡырҡылып, йолҡолоп, яндырылған үҫемлек урынына ул фәҡәт шул төрҙөң орлоғон әллә ҡайҙан табып, осороп алып килеп, фәҡәт шул орлоҡ үҫерлек йәтеш, бөтә уңайлыҡтары булған ергә сәсеп ҡуя. Һәр ағас, үлән төрөн, ҡайһыныһы ҡайҙа үҫкәнен, ҡайҙа уға иң уңайлы шарттар бар икәнен ҡайҙан белә, нисек иҫләйҙер, ғәжәп, ләкин белә, иҫләй! Аңһыҙ булһа, тәбиғәт әҙәм емергәнде тергеҙеп, ҡырғандарҙы үрсетеп, яндырғанды үҫтереп йәшәй алыр инеме?

Тәбиғәт үҙенең бөтә ғәмәлдәре менән үҙе оҫта, мәрхәмәтле идара итә! Туплаған тәжрибәһен һаҡсыл ҡуллана белә! Тәбиғәттең балалары - йәнлектәре, ҡош-ҡорттары ла үҙе кеүектәр. Әҙәмме йә берәй башҡа касафатмы ояларын ҡыйратһа йә тоҡомона зыян килтерһә, улар күҙҙәре шәмәреп, ҡанат, ҡойроҡтарын һәлендереп ултырмай, күҙ суҡып, үс алып та йөрөмәй, ә шунда уҡ күмәкләшеп ояларын йүнәтергә, донъяһын төҙөкләндерергә, тоҡомон үрсетергә керешә. Юғары аңлы әҙәм балаһы, саҡ ҡына бәлә-ҡаза килһә, ҡойолоп төшә, төшөнкөлөккә бирелеп, бөлөп бара, ғәйепләләрҙе эҙләй, үсен алыу, үҙен йыуатыу сараларын йүнләй...

Әлбиттә, тәбиғәттә лә төрлө хәл-мәлдәр булып тора: ул да һаҡланыу теләгенән тикшерә, һынай, яңылыша, яңы үҫеш юлдарын байҡай, әҙәм ҡыйратҡанды тергеҙеү, әҙәм ҡылғандарҙы зарарһыҙландырыу ысулдарын эҙләй һәм шул эҙләнеүендәге ыңғай һөҙөмтәләрҙе һайлап алып үҙләштерә, файҙалана, ә кәрәк тип тапмағандарынан ҡырҡа баш тарта ла онота. Был да әҙәмгә үрнәк булырлыҡ ғәмәл, сөнки юғары аңлы әҙәм балаһы һаулығына зарарлы икәнен белә тороп та, алама ғәҙәттәренән арына белмәй, үҙенең йәшәү сығанағын ҡорота.

Әҙәм тәбиғәт ҡосағына йышыраҡ барып, уның ҡоролошон, бөжәк, йәнлек, ҡош-ҡорттарының донъяһын күҙәтһә, бәлки, үҙе лә йәшәгән мөхитен һаҡларға өйрәнер ине. Беҙҙең ата-бабалар йәйләүҙәргә күсенеп сығып, ғүмерҙәренең яртыһын илаһи тәбиғәт ҡосағында, тәбиғи мөхиттә, уның камил йәшәйешен өйрәнеп, уға эйәреп үҫкәнгә, тәбиғәт балалары тормошон кисергән. Тәбиғәт мөмкинлектәре менән файҙалана, тәбиғәт йомартлығын ҡәҙерләй белгән кеүек, үҙҙәренең ғүмеренең дә ҡәҙерен яҡшы белгәндәр. Барын ҡәҙерләргә, бары менән ҡәнәғәт булырға өйрәнгәндәр.

*Ғүмерендә ҡарт ҡарағас*
*Күпте күргән Ирәндектән:*
*Бында борон ҡанбабалар*
*Бесән сапҡан, иген иккән.*
*Кеше ғәмһеҙ ҡылғандарын*
*Ҡарап тороп ғәрләнгәндер,*
*Ғәрлегенән тәне ҡороп,*
*Ул солоҡҡа әйләнгәндер…*
*Теле булһа, солоҡ ағас*
*Әйтер ине йәне көйөп:*
*- Ниңә әҙәм үҙ ерендә*
*Ике көнлөк яттар кеүек?*
*Беҙҙең ейән-бүләләргә*
*Ағас нимә һөйләр икән?*
*Ерҙе һеҙҙең ҡартатайҙар*
*Тәләф итте, тиер микән?*

*Уйланам да, шуға көйәм:*
*Оят миңә беҙҙең өсөн.*
*Буйым етһә, ғәфү ит, тип*
*Үбер инем ағас осон.*
*Ҡайҙа хәтер тамғалары:*
*Баштарҙамы, таштарҙамы?*
*Ҡарағастың шаһит осон*
*Әллә ҡырҡып ташларғамы?*

**Урал МОСТАФИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡорт дәүләт университетында Донор көндәре уҙғарыла. Сара 16 майҙа көндөҙгө сәғәт 2-лә башлана. 17 һәм 18 майҙа, Башҡорт дәүләт университетының төп корпусы алдында иртәнге сәғәт 9-ҙан 2-гә тиклем күсмә ҡан тапшырыу пункты эшләйәсәк. Акцияла 18 йәше тулған, теркәү үткән студенттар ҡатнаша ала. Акция көнөндә ҡан тапшырыу пунктына паспорт менән килергә кәрәк.

✓Йәйге һауыҡтырыу кампанияһы башланыр алдынан Башҡортостан Мәғариф министрлығы йәйге сәләмәтләндереү учреждениеларына каникулдарҙа балаларҙы ҡабул итеүгә әҙерлек һәм лагерҙарға, шифаханаларға уларҙы илтеү мәсьәләләре буйынса граждандарҙы тематик консультациялау ойоштора. Мәғариф министрлығы белгестәре 15 майҙан граждандарҙың шылтыратыуҙарын иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға тиклем (347) 218-03-57 телефоны буйынса ҡабул итә.

✓Өфө Муниципаль электр транспорты идаралығы Черниковка биҫтәһендәге троллейбус маршруттарына юл хаҡын кәметте. Электр транспорты идаралығында хәбәр итеүҙәренсә, Өфөнөң Калинин һәм Орджоникидзе райондары ойошторолоуына 65 йыл тулыу менән бәйле 4,9,10-сы һәм 15-се троллейбус маршруттарында 1 июлгә ҡәҙәр аҡсалата түләү өсөн юл хаҡы 18 һумғаса төшөрөлдө.

✓Өфөлә Салауат Юлаев һәйкәле алдындағы майҙанда "Киске уйын" студенттарҙың осрашыу марафоны старт ала. Тәүге осрашыу Башҡортостан йәштәрен 20 майҙа йыя. "Юлдаш" радиоһы алып барыусылары байрамда ҡатнашыусылар өсөн төрлө уйын-конкурстар әҙерләгән. Башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары ҡатнашлығында концерт көтөлә. Сара киске сәғәт 6-ла башлана.

✓Еңеү көнөндә Башҡортостанда тыл эшсәндәренә һәм һуғыш балаларына һәйкәл асыу тантанаһы булды. Мемориал Өфө районының Алексеевка ҡасабаһында урынлашҡан. Проект урындағы башланғыстарға булышлыҡ итеү программаһы сиктәрендә тормошҡа ашырылған, тип хәбәр иттеләр муниципалитетта.

✓Башҡортостанда Кропачево - Дим ҡала яны поезы 17 майҙан яңы расписание буйынса йөрөйәсәк. Силәбе өлкәһендәге Кропачево станцияһынан электричка иртәнге сәғәт 5-се 28 минутта (Мәскәү ваҡыты) ҡуҙғала, Әшә станцияһына - 6 тула 18 минутҡа, Өфөгә - 9-сы 7 минутҡа, Димгә 9-сы 25 минутҡа килеп етә.

**"Башинформ"дан.**

ҠЫҪҠАСА

# ТЕРЕ БАЛЫҠ БАҘАРЫ БУЛАСАҠ

✓ **Башҡортостанда тере балыҡ баҙарҙары төҙөү күҙаллана. Тейешле бойороҡҡа республика хөкүмәтенең премьер-министры ҡул ҡуйҙы.** Проектты Башҡортостандың Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса дәүләт комитеты әҙерләй. Документта 2017-2019 йылдарға саралар планы раҫланған. Тәүге этап түбәндәге ойоштороу эштәрен үҙ эсенә ала: Башҡортостанда балыҡ һәм балыҡ продукцияһын етештереү күләмдәрен, баҙар һыйҙырышлылығын билдәләү, республиканың балыҡ баҙарын тикшереү, мәғлүмәт йыйыу, инвесторҙар менән эшләү, продукцияны сауҙа ойошмаларына тапшырыу. Икенсе этап тере балыҡ баҙарҙарын төҙөүҙе һәм магазиндарҙа сауҙа нөктәләрен ойоштороуҙы күҙ уңында тота. Һуңғы этапта франшиза системаһын әҙерләү һәм индереү, республикалағы балыҡ һәм балыҡ продукцияһын етештереүселәрҙе "Башҡортостан аҙыҡ-түләге" проектында ҡатнашыуға йәлеп итеү, "Сауҙа мәктәбе"н уҙғарыу, махсуслаштырылған йәрминкәләр ойоштороу күҙаллана.

✓ **Өфөлә Еңеүҙең 50 йыллығы исемендәге скверҙа 34 исемле ҡарағай ултыртылды.** Ағастарҙың һаны хәрби бурыстарын үтәгәндә һәләк булған хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең һанына тап килә. "Хәтер аллеяһы"на нигеҙ һалыуҙа сараның инициаторҙары - Рәсәй милли гвардия ғәскәрҙәре федераль хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығы һәм генерал Шайморатов исемендәге махсус тәғәйенләнештәге отряд етәкселеге һәм шәхси составы, Өфө хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, Совет районы хакимиәте башлығы Урал Килсенбаев, һәләк булған хеҙмәткәрҙәрҙең тол ҡалған ҡатындары, ата-әсәләре, балалары, дини конфессия, ветеран ойошмалары вәкилдәре ҡатнашты. Исемле ағастар аллеяһы Рәсәй гвардияһы идаралығының яңы традицияһын булдырыуға этәргес бирәсәк, хәрби хеҙмәткәрҙәр, ҡала халҡы өсөн иҫтәлекле саралар һәм осрашыу урынына әүерелəсәк, тип билдәләнәде сарала.

✓ **Рәсәй Ҡулланыусылар хоҡуҡтарын күҙәтеү хеҙмәте талпан энцефалиты күҙәтелгән урындарҙа ҡайнатылмаған кәзә һөтөн эсмәҫкә кәңәш бирә.** "Талпандар ваҡ мөгөҙлө малға үлән ашаған сағында һөжүм итә. Талпан вируслы булған осраҡта уның һөткә эләгеүе ихтимал", - тип хәбәр иттеләр Рәсәй Ҡулланыусылар хоҡуҡтарын күҙәтеү хеҙмәтендә, эсер алдынан һөттө ҡайнатырға кәрәклеген өҫтәп. Миҙгел башынан Башҡортостанда медицина хеҙмәткәрҙәренә 200-ҙән ашыу кеше талпан тешләүенә зарланып мөрәжәғәт иткән. Белгестәр билдәләүенсә, Өфөлә алты адрес буйынса талпан энцефалитына ҡаршы ашығыс иммунопрофилактика алырға мөмкин. Ул - 21-се ҡала клиник дауаханаһы (Урман тыҡрығы урамы, 3, 3-сө корпус), тел. (347) 232-54-91; 5-се ҡала дауаханаһы (Цюрупа урамы, 84), 250-68-00; 10-сы ҡала клиник дауаханаһы (Горький урамы, 47), 243-25-38; 4-се балалар поликлиникаһы (Орджоникидзе урамы, 15), 263-15-97; 5-се балалар поликлиникаһы (Маршал Жуков урамы, 18), 241-27-97 һәм 6-сы балалар поликлиникаһы (Аксаков урамы, 62), 250-59-46. Ошо телефондар буйынса тәүлек әйләнәһенә шылтыратырға мөмкин.

ЯҠТЫ ХӘТЕР

**...Ә командир һаман донъя буйлап...**
**Һалдаттарын йөрөй таратып...**
**Еңеү байрамы алдынан Интернет селтәрендә салынып ҡалды был шиғыр юлдары. Авторын, үкенескә күрә, иҫләмәйем, ниндәйҙер төркөмдәге таныш булмаған таныш ине. Ләкин йөкмәткеһе генә түгел, ундағы образдар һаман да күҙ алдында тора: донъя буйлап мәңге йәш, үлемһеҙ булып ҡалған һалдаттар атлай, улар хатта ял итергә лә туҡтамай; был парадты бөгөнгөнән күҙәтеп тороусылар үҙҙәренең хәбәрһеҙ юғалған йәки әлегәсә ерләнгән урыны асыҡланмаған атай-олатайҙарын танып, ошо сафтан алып ҡала бара, алып ҡала бара... Йәш лейтенант инде һигеҙенсе тиҫтә йыл донъя буйлап һалдаттарын өйҙәренә тарата, һуңғы һалдаттың исеме асыҡланып, уны туғандары тапмайынса, һуғыш туҡтамай, дауам итә...**

# БАЛАЛАР ҺӘМ ЕЙӘНДӘР...

## яугир олатайҙар менән бер сафта



"Үлемһеҙ полк" акцияһы тураһында ине ул шиғыр. Ябай ғына һүҙҙәргә төрән һәм бөйөк мәғәнә һалынғайны: лейтенант командаһы сафы кәмей барған һайын, беҙҙең сафтарыбыҙ тулылана. Бөгөн инде Рәсәй өсөн генә түгел, таныуға телә-мәһә лә, донъя өсөн иң әһәмиәтле көндәрҙең береһе булған 9 Май байрамын тереләр менән мәңге йәш һәм вариҫтары күңелендә мәңге тере булып ҡалған һалдаттарҙан тупланған "Үлемһеҙ полк" хәтер маршынан башҡа күҙ алдына килтереп тә булмай. Был сарала йылдан-йыл ҡатнашыусылар һаны арта бара. Өфөлә былтыр Еңеү көнөндә тамашасылар менән бергә илле меңдән ашыу кеше ҡатнашһа, быйыл был һан алтмыш меңдән артып китте. Мәскәүҙә иһә "Динамо" метроһы станцияһынан башланған "Үлемһеҙ полк"та һигеҙ йөҙ илле меңдән ашыу кеше тупланды. Илебеҙҙең баш ҡалаһындағы сарала өсөнсө йыл рәттән ил Президенты Владимир Путин шәхсән ҡатнашып, башҡалар менән бер рәттән яугир атаһының портретын тотоп, Еңеү яулаусыларға ихтирамын һәм рәхмәтен белдерә. Башланғанынан алып акция тарихында быйылғыға үҙенең киң масштаблы булыуы менән дә айырылып торҙо. Владивостоктан алып тотош ил буйлап мәрхүмдәр рухы тереләр менән бер сафҡа баҫты. Рәсәй субъекттарынан тыш, унда донъяның утыҙ иле ҡатнашты. Ҡайһы бер илдәрҙә сара хатта бер нисә көнгә һуҙылды.

Байрам көнөндә БДБ дәүләттәрендә генә түгел, "Үлемһеҙ полк" шулай уҡ Австрияның, Бөйөк Британияның ҡайһы бер ҡалаларында, Сербияның баш ҡалаһы Белградта, Афинала, Минскиҙа, АҠШ-тың алты ҡалаһында, шул иҫәптән бер нисәһендә беренсе тапҡыр үтте. Японияла акция Токиолағы Рәсәй Федерацияһы вәкиллеге территорияһында уҙғарыла. Мадридта "Үлемһеҙ полк" дүрт йөҙ самаһы кешене йыя. Пусанда ул бөтөнләй ғәҙәти булмаған ғына үтә: ойоштороусылар уны пляжда уҙғара. Шунда уҡ концерт та ҡуйыла. Пекинда хәтер акцияһына бер нисә тиҫтә кеше йыйыла. Монреалдә был сара "Донъяға - тыныслыҡ" лозунгыһы аҫтында ойоштороbла. Бында Еңеү көнөн Рәсәй флагы ҡаҙалған машиналарҙа автоуҙыш менән башлайҙар. Һуңынан инде халыҡ урамдан колонна менән уҙа.

Страсбургта бер нисә йөҙ кеше туғандарының фотоларын тотоп, урамдан үтә. Был акцияла ҡатнашыусылар элекке СССР-ҙан сығыусылар ғына түгел, хатта француздар ҙа була. Испанияның бик күп ҡалалары урамдарынан, шул иҫәптән Мадрид, Тенерифе, Барселона буйлап "Үлемһеҙ полк" үтә. Германияның тиҫтәләрсә ҡалаһында, шул иҫәптән Берлин урамынан "Үлемһеҙ полк" үтә, Дрезденда һуғышта ҡатнашҡан атай-олатайҙарының фотоларын тотҡан ватандаштар осрашыуы уҙғарыла, Гамбургта Бергедорф районының зыяратында сәскәләр һалына.

Ғөмүмән, "Үлемһеҙ полк" географияһы йылдан-йыл киңәйә бара. Хәҙер ул Европа илдәрендә генә түгел, Азия, хатта Африка ҡитғаһына ла барып еткән. Сөнки был рәсми бойороҡтар менән ойоштороla йәки рәсми ҡарарҙар менән тыйыла торған сара түгел, ул донъялағы һәр айыҡ аҡыллы кеше күңеленә һәм йөрәгенә ҡан менән, юғалтыуҙар менән яҙылған, һуғыш ипкене ҡағылмаған бер генә ғаилә лә юҡтыр, моғайын. Шуның өсөн дә ул даръя кеүек бөтөн донъяға тарала, йылдан-йыл ҙурыраҡ биләмәләрҙе ялмай бара...

...Йәш лейтенант һаман да яугирҙарын донъя буйлап өйҙәренә таратып йөрөй һәм йылдан-йыл сафтары арта барған "Үлемһеҙ полк"тан йәш һалдаттарҙың өнһөҙ ҡарашы һаман беҙҙе тыныслыҡтың ҡәҙерен белергә саҡырып тора...

**Земфира ХӘБИРОВА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостандың Милли банкы мәғлүмәттәре буйынса, 2017 йылдың 1 апреленә ҡарата физик берәмектәрҙең кредит ойошмаларындағы вкладтары 341,2 миллиард һум тәшкил иткән. Йыл башына үҫеш темптары 101,2 процент булған. Йыл башында халыҡтың банктағы иҫәбендә 337 миллиард һум иҫәпләнгән.

✓Башҡортостандың Урман хужалығы министрлығы бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ өсөн 25 урман участкаһын һатыуға ҡуйған. Улар Әбйәлил, Баймаҡ, Бәләбәй, Инйәр, Салауат, Стәрлетамаҡ урмансылыҡтарында урынлашҡан. Ағас әҙерләүҙең дөйөм күләме - 6,9 мең кубометр. Бынан тыш, эшҡыуарҙарҙы ҡыҙыҡһындырған урмансылыҡтарҙа урман һатыу буйынса тәкдимдәрҙе ҡарарға мөмкин, тип хәбәр иттеләр ведомствола. Аукциондарҙа ҡатнашыуға ғаризалар 10 майҙан 26-на тиклем ҡабул ителә.

✓Башҡортостандың барлыҡ районларында тантаналы шарттарҙа "2014-2017 йылдарҙа һәм 2020 йылға тиклемге осорҙа ауыл биләмәләрен тотороҡло үҫтереү" федераль маҡсатлы программаһында ҡатнашыусыларға торлаҡ сертификаттары тапшырылды. 454 ғаилә торлаҡ төҙөү өсөн социаль түләүҙәр алды. Шуларҙың 352-һе - йәш ғаиләләр. Ошо маҡсатҡа ике кимәлдәге бюджеттарҙан 448 миллион һумдан ашыу аҡса бүленгән.

✓Баш ҡалала рәсми теркәлгән эшһеҙҙәр аҙая, тип хәбәр иттеләр мәшғүллек хеҙмәтендә. Йыл башынан эшһеҙҙәр 300 кешегә кәмегән. Әгәр йыл башында Өфөлә уларҙың һаны 6,1 меңдән ашыу булһа, хәҙер - 5,8 мең. Эш биреүселәрҙән тәкдимдәр, киреһенсә, 11,3-тән 14,9 меңгә тиклем артҡан.

✓Һуңғы йылдарҙа баш ҡалала парктарҙы, йәйәүлеләр зонаһын, скверҙарҙы төҙөкләндереү һәм эшләү, реконструкциялау буйынса эшмәкәрлек киң йәйелдерелә. Үкенескә күрә, граждандар араһында ҡанун боҙоусылар ҙа юҡ түгел. Иван Якутов паркында, мәҫәлән, тағы ла һыу сығанағының ярына ҡуйылған бәләкәй яҡтыртҡыстарҙы ватҡандар. Ғөмүмән, йылдың беренсе кварталында ғына ҡала парктарында һәм скверҙарында 300 вандаллыҡ осрағы теркәлә. Улар ҡаҙнаға 2 миллион 200 мең һумдан ашыу зыян килтерә.

*АҢЛАҒАНҒА - ИШАРА*

# ҠАУ АҪТЫНАН ДАУ ЭҘЛӘМӘЙЕК...




**Социаль селтәрҙәрҙә тағы шау-шыу ҡупты: "Бәйләнештә"ге бер төркөм хәбәр итеүенсә, Башҡортостанда "Рус телле уҡыусыларҙың хоҡуғын яҡлау буйынса комитет" төҙөлгән икән. Унан мәғлүм булыуынса, баш ҡаланың 39-сы гимназияһында белем алыусы уҡыусыларҙың бер төркөм ата-әсәһе бер йыл инде уҡыу планын үҙгәртергә, башҡорт теле дәресе иҫәбенә рус йәки инглиз телен уҡытыуға өлгәшергә тырыша.**

"Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында" БР Законына ярашлы, уҡыу пландарын ҡабул итеүҙе ата-әсәләр комитеты һәм мәктәп администрацияһы хәл итә. Мәғлүм булыуынса, бөгөн дүрт төрлө уҡыу планы бар. Әммә милли төбәк булараҡ, Өфө ҡалаһына уның тап икенсеһе тура килә. Сөнки беренсе планда туған телдәр генә бар, дәүләт телдәре юҡ, төбәк компонентына ваҡыт әҙ ҡалдырылған. Шуға ҡала мәғариф идаралығы икенсе планға өҫтөнлөк бирә. Унда дәүләт телдәрен уҡытыу ҙа, туған телдәрҙе уҡытыу ҙа бар, йәғни төбәк компонентына сәғәттәр һаны күберәк бүленгән, тигеҙ шарттар булдырылған.

Бөгөн мәктәптәрҙә телдәрҙе ҡыҫалар (рус теле булһынмы ул, башҡорт теле булһынмы) тигән һүҙ - ул ысын мәғәнәһендә уйҙырма. Ғәмәлдә, телдәр закон тарафынан яҡланған, ә инде һөҙөмтә ата-әсәләрҙең мәктәп менән нисек эшләүенә, закондарҙы белеү-белмәүенә, аңлау-аңламауына һәм башҡорт теленә мөнәсәбәтенә бәйле. Әгәр күпселек ата-әсә ҡала, район өсөн тап килгән уҡыу планын һайлаһа, мәктәп хакимиәте бер нисек тә уларҙың ихтыяжына ҡаршы сыға алмай. Ләкин ата-әсәләр үҙҙәренең шундай ҡеүәтле көскә эйә икәнен беләме икән? Был йәһәттән йәмәғәт ойошмалары, киң мәғлүмәт сараларының эшләп еткермәүе лә, халыҡҡа кәрәкле мәғлүмәтте аңлайышлы итеп еткермәүе лә үҙ ролен уйнайҙыр, моғайын.

Әгәр рус телле ата-әсәләр үҙ телен яҡлау өсөн комитет төҙөгән икән, башҡорттар ҙа быны эшләй ала бит. Ә инде үҙҙәре өсөн быны кемдеңдер килеп эшләп биререн көтөп ултырһалар, әлбиттә, фекер алышыуҙар, кемделер ғәйепләүҙәр, кеҫәнән генә йоҙроҡ төйнәүҙәр менән бер нәмәгә өлгәшеп булмаясаҡ.

Бында тағы шуны ла өҫтәп әйтергә булыр ине: 1 мартта Башҡорт дәүләт университетында "Йәш быуындың милли үҙаңын тәрбиәләүҙә халыҡ педагогикаһының, ғөрөф-ғәҙәттәренең, традицияларының, диндең, мәҙәниәттең һәм әҙәбиәттең роле" тигән темаға түңәрәк ҡор ойошторолдо. Унда йыйылыусылар алдында шундай мәсьәлә күтәргәйнем: РФ Дәүләт Думаһында Татарстан депутаттарының бер вәкиле Берҙәм дәүләт имтиханын туған телдәрҙә тапшырыу тураһында бик күп мөрәжәғәттәр булыуға бәйле, ошо турала закон ҡабул итеү тәҡдиме менән сығыш яһағайны. Әммә Башҡортостан яғынан был тәҡдимде хуплаған бер ниндәй ымишара ла булманы. Ә инде минең һорауға ҡаршы: "Бөгөн 9-сы синыфтар имтихандарҙы башҡорт телендә тапшырыу хоҡуғына эйә булһа ла, былтыр тотош Башҡортостан буйынса ундай теләк белдереүсе табылманы. Ә һин Берҙәм дәүләт имтиханы тураһында хыялланаһың", - тип яуаплап, "урынға ултыртҡайнылар". Ләкин көн бөгөн менән генә бөтмәй. Бәлки, бер нисә йылдан һуң Берҙәм дәүләт имтиханын башҡорт телендә тапшырырға теләүселәр табылыр, әммә ҡанун булмаç. Ул ваҡытта балаларға нимә тип яуапларбыҙ? Икенсе яҡтан, Рәсәйҙә бит бер башҡорттар ғына йәшәмәй, беҙгә ул ҡанун кәрәкмәй икән, башҡа милләттәргә кәрәк. Хәйер, ҡанундың булыуы ла зыян итмәç - аҫабалыҡ тураһындағы ҡасанғы грамоталарға нигеҙләнеп, һаман да башҡорттарҙың аҫаба халыҡ булғанына күкрәк ҡағабыҙ бит әле, ә ни өсөн киләсәк быуындарға үҙебеҙҙән һуң да шундай грамота ҡалдырмаçҡа, имтихандарҙы башҡорт телендә тапшырыу хоҡуғы буйынса булһа ла?.. Ошондай хыялдарға сумдырғайны түңәрәк ҡорҙа мәсьәлә күтәреүем. Бөрйән районына ҡылған сәфәрем иһә күңелгә өмөт оҫҡоно һалды: былтыр район үҙәгендә урынлашҡан Иҫке Собханғол мәктәбендә 9-сы синыфты тамамлаусы ике бала башҡорт теленән имтихан тапшырһа (ә мине Башҡортостан буйынса тапшырырға теләүселәр юҡ, тип инандырырға тырышалар), быйыл ике кластан барлығы 36 (!) бала башҡорт теле һәм әҙәбиәтен һайланы, тип белдерҙеләр. Ә республика буйынса бындай балалар һаны күпме булыуы мөмкин? Юҡһа, рус телле балалар башҡорт теле дәрестәрен уҡырға теләмәйҙәр, тип баш ватабыҙ. Беҙгә, киреһенсә, башҡорт телен һәм әҙәбиәтен имтихан фәне итеп һайлаусыларҙы һәм Берҙәм дәүләт имтиханын үҙ телендә тапшырырға теләүселәрҙе берәм-бөртөкләп эҙләргә, уларҙы хупларға, күтәрмәләргә кәрәк.

Икенсе яҡтан, рус телле балаларҙың ата-әсәләре башҡорт телен уҡытыуҙың ниндәй вариантына ҡаршы сыға? Моғайын да, һүҙ дәүләт теле булараҡ уҡытылған башҡорт теле тураһында баралыр. Әгәр Башҡортостан Республикаһында йәшәйһең икән, уның ҡанундарын үтәргә лә, дәүләт телен һәм символдарын ихтирам итергә лә кәрәк түгелме икән? Ә Башҡортостан закондары Рәсәй Федерацияһы закондарынан бер нимәһе менән дә айырылмай тиерлек. Бары тик ата-әсәләр ҡануниәт буйынса балаларын йәшәгән ерҙәренә яҡын булған мәктәпкә урынлаштыра икән, тимәк, уларҙы мәктәптең башҡорт, татар, рус һ.б. телле мәктәп булыуы ҡыҙыҡһындырмай, тимәк, улар ошо мәктәп ҡағиҙәләрен һәм талаптарын ҡабул итә. Ҡабул итмәһәләр, балаларының ихтыяжына һәм мәнфәғәтенә тура килгән белем усағын һайларҙар ине. Бында мәктәптең алыҫлығы сәбәп булып булып тормай, ана, райондарҙа күпме мәктәптәр ҡыҫҡартылып, балалар көн һайын нисәмә саҡрымдарҙы йә автобуста, йә йәйәү йөрөп уҡый.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Ата-әсәләре комитет төҙөгән 39-сы мәктәп ЮНЕСКО-ның ассоциацияланған мәктәбе булып тора. Мәғлүм булыуынса, ЮНЕСКО ойошмаһы үҙе үк хәүеф аҫтында торған телдәргә ярҙам итергә тырыша һәм ата-әсәләрҙең был ҡылығы халыҡ-ара ойошма проектына ҡушылған мәктәп өсөн ҡара тап булып төшә түгелме? Миҙал бер яҡлы ғына булмай, хатта башҡорттарға, башҡорт теленә, мәҙәниәтенә, тарихына, әҙәбиәтенә ҡаршы эшләгән хәл-ваҡиғаларҙы ла үҙебеҙҙең файҙаға бороп ебәрергә мөмкин бит. Ошо мөмкинлек хаҡында уйлашайыҡ әле.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ЙӘШТӘРГӘ ӘЙТӘМ...*

# ХЫЯЛ ЙӘШӘТӘ КЕШЕНЕ

**Бала саҡтары Бөйөк Ватан һуғышы йылдарына тура килеп, ошо ауыр замандың бөтә һынауҙарын күтәргән тыл ветерандары һөйләгән хәтирәләр һәр саҡ тетрәндерә. Әбйәлил районының Рәхмәт ауылында йәшәүсе тыл ветераны Нурлығаян Мансурова һөйләй:**

- Бөйөк Ватан һуғышы йылдарының ауырлыҡтары минең кеүек үҫмер балаларҙың да иңенә төштө. 12-15 йәшлек кенә балалар һуғышҡа алынмай ҡалған ҡарттар менән ил өсөн, Еңеү көнөн яҡынайтыу өсөн үҙен йәлләмәй эшләне. Беҙ ғаиләлә дүрт бала инек, ағайымды фронтҡа алдылар, өс ҡыҙ араһында мин иң ҙуры булғас, ғаиләне аҫрау минең елкәгә һалынды. Атайым ул саҡта инде оло йәштә ине, алтмышты уҙғайны. Учалы районы Байрамғол ауылында минең йәштәштәр - 16 ҡыҙ, 2-3 малай - ниндәй эшкә ҡушалар, шунда йөрөнөк. Ул заманда хәҙерге кеүек техникаһы ла юҡ, бөтә нәмәне ҡул менән эшләйбеҙ. Колхозға эшкә сыҡҡан өсөн хеҙмәт стажы ла булманы, таяҡ һыҙалар ҙа, эшләгән өсөн көнөнә 100 грамм һоло бирәләр. Ерҙе атҡа һыбай менеп тырматабыҙ, игенде ҡул менән йөрөп сәсәбеҙ, ҡул менән урабыҙ, бесән дә саптыҡ, мал да ҡараныҡ инде... Эшкә сыҡҡан балаларға колхоздан йә бер литр ойор-ойомаç ҡатыҡ, йә бер аш сүмесе менән шыйыҡ ыумас алып килеп бирәләр. Шуны ҡуҙғалаҡ, йыуа, һарына, ҡымыҙлыҡ менән ҡушып эскән булабыҙ. Колхоз эшенән ҡала күрингә йөрөнөк. Мишәле тигән ергә задание биреп ебәргәндәре хәтерҙә. Түштән ҡар ярып йөрөп күрин ҡырҡабыҙ, саҡ ағастан баҫылмай ҡалған ваҡыттар булды. Унда эшләгәндә көнөнә 400 грамм кирбес кеүек ҡатып бөткән арыш икмәге бирәләр ине. Торф сығарырға Миндәккә йөрөнөк, күперҙәр юҡ, түштән һыу кисеп, аға-аға йылғаны аша сығабыҙ. Былай ҙа өҫкә кейер кейемебеҙ юҡ, тәнгә һыуыҡ үтеп, нисек ауырып китмәгәнбеҙ икән, тием хәҙер. Мәктәпкә бөтә эштәр тамамланғас, октябрь айында ғына бара торғайныҡ. Күрше ауылдарҙан йыйылып, 5-се класҡа уҡырға килгән 56 баланың ни бары алты-етеһе генә етенсе класты тамамланы. Ҡалғандары ашарына ашы, өҫтөнә кейеме булмағас, уҡырға йөрөй алманы. 1954 йылдан һуң ғына етешерәк йәшәй башланыҡ. Тормош иптәшем Вассаф менән биш бала үҫтерҙек. Мин хәҙер ейәндәр һәм бүләләр менән бергә бөтәһе 39 баламды күреп, ҡыуанып ултырам, Аллаға шөкөр. Миңә быйыл, Алла һаулыҡты бирһә, 90 йәш тула.

Хәҙерге заманда йәштәр тырышһа, уҡып белем алһа, эшһөйәр булһа, бөтәһе лә бар. Шулай ҙа алдына саҡ ҡына ҡаршылыҡтар килеп тыуһа, яҙмыш һынауына түҙә алмай, тормошона ҡул һелтәп ҡуйғандары күп. Уларға, бер ваҡытта ла танауығыҙҙы төшөрөп, ҡул ҡаушырып ултырмағыҙ, тип әйтергә теләйем. Тормошонда, көнкүрешенде яҡшыртырға тырышып, киләсәккә яҡты уйҙар менән йәшәргә кәрәк. Илдәр имен, күк йөҙө тыныс булһа, кеше лә бәхетле була ул. Беҙҙең дә тормош әкренләп яйға һалынды, йәштәр беҙҙең быуынға төшкән ауырлыҡтар тураһында онотмаһын һәм тормош һынауҙарына бирешмәй, киләсәккә яҡты уй-ниәттәр, хыялдар менән йәшәһен, тип теләйем.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Баш ауыртыуы

❖ Тоҙ баш ауыртыуын баҫа. Марляны 8 ҡат һалып, бәйләмес яһағыҙ, киңлеге маңлайҙы ҡапларға, ә оҙонлоғо елкәгә етергә тейеш. Бынан һуң 250 мл һыуҙы 60-70 градусҡа тиклем йылытабыҙ, 2 балғалаҡ тоҙ һалып болғатабыҙ. 8 процентлы тоҙ иретмәһе килеп сыҡты. Йылымыс һыу менән маңлайҙы, ҡолаҡтарҙы, соңҡаны йыуабыҙ, тоҙло иретмәгә марляны манып, бер аҙ һығабыҙ һәм башты, ҡолаҡтарҙы, елкәне ҡаплайбыҙ. Нығыраҡ торһон өсөн яулыҡ менән бәйләйбеҙ. Бер нисә минуттан еңеллек тойорһоғоҙ, ләкин марляны сисергә ҡабаланмағыҙ, ятып тороғоҙ. Бәйләместе сискәндән һуң башты йылымыс һыу менән йыуырға кәрәк.

### Хәтерҙе нығытыу

❖ Был эликсирҙы бер нисә ай дауамында көн һайын эсһәгеҙ, ҡан тамырҙары таҙарыр, ҡан баҫымы яйланыр, хәтер нығыныр. 1 лимонды ҡабығы менән, 1 баш һарымһаҡты ваҡларға, 1 литр ҡайнатып һыуытылған һыуға һалып, 1 ҡалаҡ бал өҫтәргә. Банканы салфетка менән ҡаплап, 3 көн төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң 1-2 ҡалаҡ эсергә. Бал өҫтәмәҫкә лә була.

### Ҡыҙыл сөгөлдөр

❖ 1,5 кг таҙартылған сөгөлдөрҙө 4-5 киҫәккә бүлергә һәм 2 л ҡайнар һыу ҡойорға. 1 сәғәт талғын утта ҡайнатырға. 1 сәғәттән һуң 1 ҡалаҡ шәкәр, 1 ҡалаҡ алма һеркәһе өҫтәргә. Һыуытҡыста һаҡларға. Көнөнә 3-4 тапҡыр 30-40 мл сөгөлдөр төнәтмәһе эсергә һәм 1-2 киҫәк сөгөлдөр ашарға. Сөгөлдөр ҡан сифатын, йөрәк-ҡан тамырҙары һәм тын алыу системаһы эшмәкәрлеген яҡшырта, организмды таҙарта, яман шеш күҙәнәктәре үҫешен туҡтата, енес биҙҙәре функцияһын көсәйтә, енси көсһөҙлөктө дауалай, йәшәртә, климакс билдәләрен еңеләйтә, һимеҙлектән дауалай.

### Йүткереү

❖ Кәбеҫтә япрағын 1-2 минутҡа ҡайнар һыуға тығып алырға, бал һөртөргә һәм түшкә һалырға. Тығыҙ футболка кейеп, йоҡларға. Әгәр ҙә йүткереү ныҡ көслө икән, арҡаға ла кәбеҫтә япрағы һалырға. 3-5 төндән һуң йүткереү үтә.

✓ ***Бер һүҙ менән әйткәндә, Урта быуаттарҙа Венгрия мәмләкәтендә башҡорттар оҙаҡ ваҡыт, биш йәки алты быуат тирәһе йәшәгән, тигән фекер бөгөнгө ғилми донъяла шик тыуҙырмай.***



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Ата-бабалары тураһында белешмә

Әбд-әл-Мотталибтың байтаҡ йылдар улдары булмай. Был күренеш башҡалар алдында унның абруйын бик ныҡ төшөрә, сөнки, шул замандағы ғәрәптәрҙең фекеренсә, улдары булмаған кешенең тормошо заяға үтә, ул ниндәй генә юғарылыҡтарға уҡталмаһын, үҙ ҡаҙаныштарын, үҙ байлығын береһенә лә мираҫ итеп ҡалдыра алмай. Әбд-әл-Мотталибтың ҡатындары иһә гел ҡыҙ балалар таба. Шул саҡ Әбд-әл-Мотталиб илаһтар һәм халыҡ алдында һүҙ бирә: әгәр ун улы тыуһа, береһен ул илаһтарға ҡорбан итеп бирәсәк. Һәм, ысынлап та, бынан һуң гел малайҙар тыуа башлай. Ун түгел, хатта, ун ике булып китә. Улар үҫә биргәс, Әбд-әл-Мотталибҡа илаһтар алдында биргән вәғәҙәһен үтәү ваҡыты килеп етә. Улдарын ярата ул, тик аңлай - биргән һүҙендә тормаһа, илаһтар тарафынан уларҙың кире тартып алыныуы бар.

Әбд-әл-Мотталибтың улдары, быны белгәндән һуң, аталарының ҡарары ниндәй генә булмаһын, шул ҡарарға буйһонасаҡтары тураһында белдерәләр. Әбд-әл-Мотталиб улдарының һәр береһенә күрәҙәселек уғы яһап, шунда үҙ исемен яҙырға ҡуша. Шунан һуң бөтөнөһө бергә Ҡиблаға, Һубал илаһ янына баралар. Һубал Әбдаллаһҡа күрһәтә. Әбд-әл-Мотталиб уны ҡорбан салыу урынына алып китә.

Ошо ваҡыт быға тиклем өндәшмәй генә ҡарап торған Мәккә кешеләре Әбдаллаһты үлтермәүҙе һорай башлай. Тик улар өгөтләүҙән башҡа бер ни эшләй алмай, сөнки Әбдаллаһ Әбд-әл-Мотталибтың улы, ә ата кеше улы менән ни теләһә, шуны ҡыла ала. Әбд-әл-Мотталиб улын ҡорбанға килтерергә әҙерләнеп бөттөм генә тигәндә, ҡорбан салыу урынына йүгереп Әл-Мөһир килеп етә. Ул Фатиманың - Әбдаллаһтың әсәһенең ырыуҙашы була. Әбд-әл-Мотталибты туҡтатып тора ла, илаһтар, бәлки, икенсе берәй ҡорбанға риза булыр, тигән фекер әйтә. Мәккә кешеләре был фекерҙе хуплап, Йәҫрибтә йәшәүсе данлыҡлы күрәҙәсе әбейгә барырға кәңәш итә. Әбд-әл-Мотталиб был кәңәшкә шатлана һәм тиҙ генә ризалаша һала. Сөнки ата кешегә бер ғәйебе булмаған улын ҡорбанға килтереү еңел булмай. Һәм улы менән Йәҫрибкә юлланалар. Күрәҙәсе әбей әйтеүенсә, кеше ҡорбанын ун дөйә менән алмаштырып була (Ул ваҡыттағы ғәрәптәр яңылыштан үлтерелгән кеше өсөн, ун дөйә биреп, ҡарымтанан ҡотолған).

- Әгәр риза булмаһалар? - тип һорай Әбд-әл-Мотталиб.

- Ул саҡта тағы ун дөйә өҫтә. Илаһтар ризалашҡанға тиклем унар дөйә өҫтәй бар, - тип яуап бирә күрәҙәсе әбей.

Мәккәгә ҡайтҡас, Әбдаллаһты Һубал алдына баҫтырып ҡуялар ҙа, Ҡибла янына ун дөйә килтерәләр. Күрәҙәселек уҡтары илаһтарҙың риза булмауын белдерә. Тағы ун дөйә килтерәләр. Илаһтар тағы риза булмай. Тағы ун дөйә килтереп ҡуялар... Дөйәләрҙең һаны йөҙгә еткәс кенә илаһтар ризалаша. Яңылышмаҫ өсөн, Әбд-әл-Мотталиб Һубалдан тағы ике тапҡыр һорай. Ике тапҡырында ла уҡтар дөйәләргә күрһәтә. Әбдаллаһ ҡотҡарыла.

569 йылдар тирәһендә Әбд-әл-Мотталиб Әбдаллаһҡа ҡөрәйш ырыуының данлыҡлы, әммә бай булмаған ғаиләһенән Әминә исемле бик сибәр ҡыҙ алып бирә. Киләһе йылына Мөхәммәт тыуа.

**(Дауамы бар).**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ҺУНҒАРИЯ БАШҠОРТТАРЫ,

## йәки Европала 500 йыллыҡ тарих ҡалдырған халыҡ тураһында



### Инеш һүҙ

Башҡорт халҡының тарихы бай һәм уның әлегә өйрәнелмәгән өлкәләре байтаҡ. Шуларҙың береһе - боронғо дәүерҙәрҙә төрлө сәбәптәр арҡаһында тыуған иле Уралдан китеп, алыҫ-алыҫ ерҙәргә барып төпләнеп, шунда күп быуаттар йәшәгән башҡорттарҙың тарихы.

Монгол-татар яуына тиклем күп быуаттар элек башҡорттарҙың бер өлөшө Венгрияға барып төпләнгәнлеге билдәле. Ғалим Нияз Мәжитов яҙыуынса, Арал менән Көньяҡ Урал араһында көн иткән бәшнәк ҡәбиләләре менән башҡорттарҙың бер өлөшө яҡын аралашып йәшәгән, союздаш булған. IX быуаттың башында бәшнәктәр уғыҙҙар менән һуғышта еңелгәс, көнбайышҡа, Волганың уң яғына күсенә. Улар менән башҡорттарҙың бер өлөшө лә китә. IX быуаттың уртаһында башҡорттар бәшнәктәр менән Ҡара диңгеҙҙең төньяҡ яры буйына килеп, мадьярҙарҙы (венгрҙарҙы) көнбайышҡа күсенергә мәжбүр итә. Мадьярҙар IX быуаттың аҙағында Паннонияға (хәҙерге Венгрияға) барып төпләнә. Ә инде XI быуатта башҡорттар менән бәшнәктәр бында килә.

1236 йылда венгр монахы Юлиандың боронғо ата-бабаларының тыуған илен эҙләп, Башҡортостанға килгәнлеге билдәле. Бында ҡәрҙәштәрен осратыуы, улар менән аралашыуы хаҡында яҙып ҡалдырған. Ҡайһы бер тарихсылар Юлиан Башҡортостанда булмаған, төрки телле башҡорттар менән аралаша алмаҫ ине, тимәк, Болғар аръяғындағы уғыр халыҡтарының береһендә булған, тигән фекер әйтә. Бәлки, Юлиан христиан динен ҡабул иткән Венгрия башҡорто булғандыр. Сөнки Әхмәтзәки Вәлиди яҙыуынса, Зәкәриә Казвини XIII быуатта (вафаты 1283 йыл) Венгрия башҡорттарының күпселеге христиан, араларында хәнәфи мәҙһәбендәге мосолмандар бар, тип яҙып ҡалдырған. 1246 йылда Рим папаһының илсеһе Плано Карпини монгол ханы ставкаһына сәйәхәт ҡыла. Унда ул Болғарҙың эргәһендә Баскарт иле, йәғни "Бөйөк Венгрия" ("Магна Һунгария") ята, тип яҙа. 1320 йылда Венгриянан тағы бер монах Башҡортостанға сәйәхәт ҡыла. Миссионерлыҡ маҡсаты менән килгән монах Иоганка башҡорт ханының янында була, хандың үҙе һәм яҡындарының мосолман диненә мөкиббән бирелгән булыуы тураһында яҙып ҡалдыра.

Ошоларҙан сығып, XIX быуаттың урталарынан тарихсылар венгрҙарҙың боронғо тыуған иле Урал тип яҙа башлай. Башҡорт менән венгрҙар Уралда бер халыҡ булып йәшәгән. Венгрҙар киткәндән һуң, мадьяр телле башҡорттар төркиләшкән, имеш. XX быуат башында ла был фекер бик популяр була. Шуға күрәлер ҙә, 1901 йылдың йәйендә Будапешт университетының профессоры Вильгельм Преле башҡорт телен өйрәнеү маҡсаты менән Өфөгә килә һәм башҡорт уҡымышлылары менән берлектә киң тикшереү эштәре алып бара. Аҙаҡтан башҡорт халҡының йыр өлгөләрен немец телендә баҫтыра. Башҡорт теленең фәнни грамматикаһын төҙөп, уны Будапештта нәшер итә.

Ә башҡорт ғалимдары тарафынан Венгриялағы башҡорттарҙың тарихы ниндәй кимәлдә өйрәнелгән һуң? Әхмәтзәки Вәлидиҙең "Башҡорттар тарихы" китабында был темаға ҙур ғына урын бирелгән. Хатта "Мадьярстандағы башҡорттар" тигән айырым бүлек тә бар. Ә бына Башҡортостан тарихсылары сығарған китаптарҙа Венгриялағы башҡорттар тураһында мәғлүмәт табыуы ҡыйын. Н. Мәжитов менән Ә. Солтанованың 1994 йылда сыҡҡан "История Башҡортостана с древнейших времен до XVI века" исемле китабында башҡорттарҙың ҡасан һәм ни сәбәпле Венгрияға күсенеүе хаҡында ғына телгә алына. 2004 йылда сыҡҡан "История Башкортостана с древнейших времен до наших дней" исемле авторҙар коллективы яҙған китапта Венгрия башҡорттары хаҡында бер-ике һөйләм генә бирелгән. Ә мәктәп дәреслектәрендә бөтөнләй мәғлүмәт юҡ. Был йәһәттән философия фәндәре кандидаты Илшат Насировтың бынан байтаҡ йылдар элек "Башҡортостан" гәзитендә баҫылған "Венгриялағы башҡорттар" тигән мәҡәләһе иғтибарға лайыҡ. Ғалим теманы Сәғүд Ғәрәбстанының баш ҡалаһы Эр-риядта уҡыған сағында өйрәнгән. И. Насиров мәҡәләһен һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итмәксебеҙ.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

### Венгрия мәмләкәтендә юғалыу

Һуңғы йылдарҙа башҡорттарҙың үҙенсәлекле тарихына, милли-азатлыҡ көрәшенә ҡағылышлы күп кенә китаптар, ғилми-публицистик мәҡәләләр донъя күрҙе. Мин иһә уларҙа сағылған мәсьәләләрҙең береһенә - Урта быуаттарҙа Венгрияла йәшәгән башҡорттар, уларҙың яҙмышы һәм Ер йөҙөнән юғалыу сәбәптәре тураһында һөйләмәксемен.

Милādиҙең IX быуатының икенсе яртыһында Урал тауҙары битләүенән хәҙерге Венгрия ерҙәренә күсенгән боронғо мадьярҙар (венгрҙар) хәрби-ҡәбилә иттифағы араһында Юрматы, Йәнәй һәм башҡа башҡорт ырыуҙары булыуын шул заманда йәшәгән ғалимдар яҙып ҡалдырған. Венгрия батшалығындағы башҡорттар тураһында иң тулы мәғлүмәттәрҙе Әхмәтзәки Вәлидиҙең "Башҡорт тарихы" китабынан табырға була. Ләкин Әхмәтзәки Вәлиди Туған Көнбайышта көн күргән башҡорттарҙың Венгрияның ҡайһы урынында йәшәгәнлеге һәм ни сәбәптән Ер йөҙөнән юғалыуҙары хаҡында аҙ яҙған. Поляк ғалимы Т. Левицкий инглиз телендәге "Ислам энциклопедияһы"ның яңы баҫмаһында бирелгән "Мадьярстан" мәҡәләһендә башҡорттар тураһында ғәрәп һәм латин сығанаҡтарына таянып яҙған. Уның әйтеүенсә, Венгрияла йәшәгән башҡорттар тураһында тәүге мәғлүмәттәрҙе ғәрәп ғалимы әл-Масудиҙың "Муруди әл-джаһаб" китабында табырға була. Милādиҙең X быуатында йәшәгән әл-Масуди боронғо венгрҙарҙың һәм уларҙың иттифаҡташтары бәшнәктәрҙең (урыҫса печенеги) Византия империяһына ҡаршы һуғышын тасуирлаған (932-944 йылдар). Автор "баджгирд" һәм "базгирда" атамаларын ҡулланғанда венгрҙарҙы һәм төрки телле башҡорттарҙы күҙ уңында тотҡан.

Ғәрәп ғалимы әл-Истарһи "Китаб Масалик әл-Мамалик" китабында шулай уҡ венгрҙарҙы һәм башҡорттарҙы "башғирд" тип атаған. Ибн-Һауҡал "Китаб Сурат әл-алрд" әҫәрендә (967 йыл), әл-Истарһи мәғлүмәттәренә таянып, боронғо венгрҙарҙың барыһына ла "башджирд" исеме бирә. Ғәрәп сәйәхәтсеһе һәм яҙыусыһы Әбү Хамид әл-Андалуси әл-Ғарнати "Әл-Миғраб ән-бағд чадаиб әл-Мағриб" китабында "Ункурия" (Һунғария йәғни Венгрия) иле халҡын "баджғирд" тип яҙа. Әл-Андалуси Венгрияға 1150-1151 йылдарҙа сәйәхәт ҡылып, өс йыл йәшәгәндән һуң, ерле мосолман ҡыҙҙарына өйләнгән кесе улы менән Венгрияны ҡалдырып китә. Сәйәхәтсе "Төхвәт әл-әлбаб" китабында венгрҙарҙы "башғурд" ти. Ғәрәп ғалимы Яҡут Сүриәләге Халеб (Алеппо) ҡалаһында башҡорт шәкерттәрен осратҡан һәм ундағы мосолмандар үҙҙәрен "башғирдиа" тип йөрөтөүҙәрен белгән.

Бер һүҙ менән әйткәндә, Урта быуаттарҙа Венгрия мәмләкәтендә башҡорттар оҙаҡ ваҡыт, биш йәки алты быуат тирәһе йәшәгән, тигән фекер бөгөнгө ғилми донъяла шик тыуҙырмай. Ләкин башҡорттар Европаның ҡайһы өлөшөндә көн күргән һуң? Боронғо ғәрәп һәм Көнбайыш тарихтарын ентекле өйрәнгәндән һуң, башҡорттар хәҙерге Венгрияның көнбайыш өлөшөндә һәм элекке Югославияның Босния һәм Герцеговина биләмәләрендә йәшәгән, тигән һығымта яһарға була. Был фекерҙе дәлилләргә мөмкин.

**✓ Башҡорт ҡәбиләләренең Башҡорт хан тирәһендә тупланыуы, дәүләтселектең нығыныуы башҡорт халҡының үҙаллы үҫешенә булышлыҡ иткән. Башҡорт халҡының ядроһы Урал территорияһы тирәһенә тура килә.**



Ғәрәп географы Ибн Сәйед әл-Мәғриби (1286 йылда донъя ҡуйған) боронғо Венгрия халҡын ике төркөмгә бүлгән. Дунай йылғаһынан көньяҡта йәшәгән төрки телле мосолмандар "әл-башҡирд", христиан венгрҙар "һункар" тип исемләнгән. Ибн Сәйед әйтеүенсә, был ике халыҡ дин яғынан ғына түгел, тел яғынан да айырылған. Һуңғы факт ҙур әһәмиәткә эйә, сөнки, берҙән, Урал башҡорттарының Венгрияға күсеп килеүен иҫбатлаһа, икенсенән, башҡорттарҙың Венгрия батшалығының ҡайһы тарафында төйәкләнеүен эҙләүҙе еңеләйтә.

Ибн Сәйед, боронғо Венгрияның шәреҡ өлөшөндә христиан венгрҙар (һунгарҙар), көнбайыш өлөшөндә Венгрия мосолмандары "әл-башғирд"-тар йәшәй тип яҙған. Башҡорттар Дунай буйында германдарға (йәғни Австрияға) күрше булғандар. Ибн Сәйед, "әл-башғирд" иленең баш ҡалаһы - Крат, һәм ул илдең көньяғында урынлашҡан, тип күрһәткән. "Крат" - славянса "град" һүҙенең ғәрәпсә транскрипцияһы. "Белград"тың "аҡ ҡала" икәнен иҫкә төшөрәйек. Т. Левицкийҙың фекеренсә, Урта быуаттарҙа Балҡан славяндары, Сербияның баш ҡалаһы Белградты, шулай уҡ венгр нәҫеленән Арнауттар батшалығының төүге баш ҡалаһы Секешфехерварҙы "Белград" тип йөрөткәндәр. Т. Левицкийҙың был фекере Урта быуаттарҙа латинса һәм немецса яҙылған документтар менән раҫлана. Секешфехервар латинса "Алба сивитас редалис" ("Батшаларҙың аҡ ҡалаһы") һәм немецса "Штулвайсенберг" ("Аҡ ҡала") тип йөрөтөлгән. Ғәрәп ғалимы әл-Иҙриси Секешфехерварҙы "Бел(а)града" йәки "Бел(и)града" тип яҙған.

Тимәк, Европаға күскән башҡорттар боронғо Венгрия батшалығының көнбайыш тарафында, Австрияға күрше яҡта һәм элекке Югославияның Босния һәм Герцеговина йөмһүриәте ерҙәрендә көн күргән. Сөнки, беренсенән, Секешфехервар ҡалаһы көнбайыш Венгрияла урынлашҡан. Икенсенән, венгр батшалары мосолмандарҙы, башҡорттарҙы хәрби хеҙмәткә йәлеп иткәндәр. Йәш венгр дәүләтенә көслө Германия тарафынан даими хәүеф янаған. Шуға улар башҡорт һәм бәшнәк ырыуҙарынан ғибәрәт булған ғәскәрҙәрҙе Венгрияның көнбайыш тарафында тотҡан.

Ғәрәп ғалимы Бутрус әл-Бустани (XIX быуат) "Даиретуль - мәғариф" энциклопедияһында, тарихсы Яҡуттың яҙмаларына таянып, Уралдағы башҡорттар һәм Урта быуаттарҙа Венгрия мәмләкәтендә көн күргән "әл-башғирдтар" - бер халыҡ, тип яҙған. Шулай уҡ әл-Бустани башҡорттарҙы һәм Босния халҡын бер халыҡ тип һанаған. Әл-Бустаниҙың "Әл-Башджирд" мәҡәләһенең бер өлөшөн тәҡдим итәм: "Ғәрәп тарихсыһы Яҡут ошолай тип яҙған: "Мин Сүриәнең Халеб ҡалаһында бер төркөм башҡорт талиптарын осраттым. Уларҙың йөҙҙәре бик аҡ, сәстәре лә аҡ-һары. Мин бер башҡорттан "Башғирд" иленең урынын һәм хәл-әхүәлдәрен һораштым. Ул миңә: "Илебеҙ Константиния (Византия) дәүләтенән бире, икенсе "афранджи" (йәғни Европа)", "Һункар" (йәғни Венгрия) исемле мәмләкәттең эсендә урынлашҡан. Беҙ - мосолмандар һәм венгр батшаһының подданныйҙары. Беҙ утыҙ ауылда йәшәйбеҙ һәм ауылдарыбыҙҙың барыһы ла ҡала ҙурлығында, ләкин венгр батшаһы, үҙенә ҡаршы яу ҡуптарыуынан ҡурҡып, башҡорттар йәшәгән ҡалаларҙы диуарҙар менән уратырға ҡәтғи тыйған. Беҙ, башҡорттар, христиандар иленең уртаһында йәшәйбеҙ. Беҙҙән төньяҡта - славяндар, көньяҡта католик папаһының дәүләте урынлашҡан, көнбайышта - Андалусия, ә көнсығышта Рум (Византия) империяһы ята. Беҙҙең телебеҙ - "афранджи" (Европа) теле, кейгән кейемебеҙ ҙә Европа кейеме. Башҡорттар венгрҙар менән армияла хеҙмәт итә һәм бергә төрлө халыҡтарға һәм дәүләттәргә ҡаршы һуғышҡа йөрөй. Башҡорттар мосолман булараҡ, Ислам илдәренә ҡаршы хәрби походтарға йөрөмәй", - тип яуап бирҙе. Яҡут, уларҙың Ислам динен ҡабул итеү сәбәптәре тураһында һорағас, ошо яуапты ишеткән: "Ата-бабаларыбыҙ әйтеүҙәре буйынса, борон заманда Булғар иленән ете мосолман, башҡорттар араһында оҙаҡ йәшәп, Ислам динен тараткан. Һәм башҡорттар, мәжүсилекте ташлап, иман юлына баҫтылар. Аллаһы Тәғәлә һиҙийә ҡылды һәм, Аллаға шөкөр, башҡорттар Ислам динен ҡабул иттеләр. Беҙ, башҡорт талиптары, Ислам ғилеме өйрәнәбеҙ һәм илебеҙгә ҡайтҡас, халҡыбыҙ беҙҙе йылы ҡаршылаясаҡ һәм дини эштәрен беҙҙән ҡулға тапшырасаҡ". Яҡут уларҙан: "Ниндәй сәбәптән һаҡалдарығыҙҙы европалылар кеүек ҡыраһығыҙ?", - тип һораған. Улар: "Башҡорттарҙан хәрби синыфта булғандары ғына ҡыра, ә ҡалғандары ҡырмай", - тип яуап биргәндәр. "Илегеҙ бынан алыҫ ятамы?", - тигән һорауға башҡорттар: "Сүриәнән Константинияға сәфәр ҡылыу ике ай ярым ваҡыт талап итә, һәм Константиянан илебеҙгә шулай уҡ ике ай ярым ваҡыт эсендә етеп була", - тип аңлатҡандар. Ғәрәп тарихсыһы әл-Истарһи ҙа, Башҡорт иленән Булғар иленә егерме биш көн эсендә етеп була һәм Башҡорт иленән икенсе төрки халыҡ - бәшнәктәргә ун көнлөк юл, тип яҙған. Был мәғлүмәттәрҙән шул асыҡ - башҡорттар һәм Боснияләғы үә Сербияләғы "бәшнәктәр" ("бочняк") бер халыҡ. Босния Урта быуаттарҙа Венгрия мәмләкәтенең эске өлкәһе була. Боснияға көнсығыш тарафтан Болгария һәм Византия империяһы сиктәш, ә славяндар - көньяҡта була. Боронғо ғәрәп карталарынан, китаптарҙан шул мәғлүм: Боснияға иң яҡын булып төрки телле печенегтар - "бачняктар" йәшәгән. "Бачняктар" "башнаҡтар" (босняктар) түгел. Һәр хәлдә, киләсәктә Европа китаптарында ниндәй генә яңы мәғлүмәттәрҙең табылыуына ҡарамаҫтан, Босниялағы "башнаҡтар" һәм ғәрәп сәйәхәтсеһе Ибн-Фаҙлан осратҡан "башҡорт" - бер халыҡ". Ошо һүҙҙәр менән тамамлана Бутурус әл-Бустаниҙың мәҡәләһе.

Мин, әлбиттә, әл-Бустаниҙың, Урал башҡорттары һәм Боснияның босняк-мосолмандары - бер халыҡ, тигән фекере менән килешмәйем, сөнки босняктар антропологик яҡтан да, тел яғынан да балканлы, славян халҡы. Минең уйымса, көнбайыш Венгрия һәм Боснияла йәшәгән башҡорттар, күпселекте тәшкил иткән ерле славяндар араһында тарихи сәбәптәр арҡаһында ассимиляцияға дусар булып, Ер йөҙөнән юғалған. Әммә улар Боснияның славян телендә һөйләшкән халҡына "башджирд" ("башҡорт"), "башнаҡ" ("босняк") тигән атамаларҙы ҡалдырған. Тимәк, бөгөнгө Босния халҡының "босняк" атамаһы - "башнаҡ" һүҙенән, ә "башнаҡ" һүҙе "башҡорт" ("башджирд") һүҙенән алынған. Бындай миҫалдар тарихта күп. Мәҫәлән, Дунай Болгарияһы дәүләтенә нигеҙ һалған төрки телле болғарҙар ике-өс быуаттан һуң, аҙ һанлы булыу сәбәпле, ерле славян халҡына ҡушылып, ассимиляцияға бирелгән, ә "Болгария" атамаһы ҡалған. Хәҙер Дунай славяндары "болгар" һүҙен милләт атамаһы итеп ҡуллана.

Венгрия мәмләкәтендә башҡорттарҙың юғалыу сәбәптәрен эҙләп ҡарайыҡ. Т. Левицкий "Ислам энциклопедияһы"нда ике ҙур сәбәпте күрһәтә. Беренсенән, XIII быуаттың беренсе яртыһында Венгрияла мосолмандарҙы суҡындырыу (христианлаштырыу) сәйәсәте көсәйә. Әл-Андалуси яҙыуына ҡарағанда, XIII быуаттың башына тиклем бындағы мосолмандар христиан венгр дәүләте менән яҡшы мөнәсәбәттә булған. Мәҫәлән, батша Геза II дәүерендә лә дини яҡтан ҡыҫым кисермәгәндәр. Батша Андрей II лә (1205-1235 йылдарҙа хакимлыҡ иткән) мосолмандарҙың дуҫы һаналған. Һуңғы йылдарында ғына Андрей II христиан сиркәүе баҫымы һөҙөмтәһендә мосолмандарға мөнәсәбәтен үҙгәртә. 1222 йылда "Алтын Булла" исемле төп документ донъя күрә. Унда мосолмандар ҙа, венгр христиандары кеүек үк, ижтимағи-дәүләт етәкселегендә вазифа биләргә хоҡуҡлы тип рәсмиләштерелгән. "Алтын Булла"ның икенсе баҫмаһында ла (1231 йыл) мосолмандарҙың хоҡуҡтары тағы рәсми тәҫ ала.

Эстергам ҡалаһы архиепискобы Роберт 1232 йылда Венгрияны тотош христиан дәүләте итергә әмер бирә, батша Андрей II мосолмандарҙы ижтимағи дәүләт вазифаларына йәлеп итеүҙә ғәйепләй, бөтә христиандарҙы Венгрия мосолмандарына ҡарата бойкот яһарға саҡыра, улар менән сауҙа һәм башҡа мөнәсәбәттәрҙән баш тартырға ҡуша. Архиепископ Роберт, рим-католик сиркәүе башлығы папа Григорий IX баҫымы менән Андрей II мосолмандарҙы ижтимағи-дәүләт хоҡуҡтарынан мәхрүм иткән яңы документҡа ҡул ҡуя. 1232 йылдан мосолман ауылдары һәм ҡалаларҙа сиркәүҙәр, монастырҙар төҙөлә башлай, халыҡ көсләп суҡындырыла.

Икенсе, Т. Левицкий фекеренсә, 1241 йылда Венгрияны татар-монголдар баҫып ала. Венгр ғәскәрендәге башҡорттар дошманға көслө ҡаршылыҡ күрһәтә. Ғәрәп ғалимы Ибн Сәйед, Венгриялағы "Башкирд" илен татарҙар 1241 йылда баҫып алған, башҡорттарҙы күпләп ҡырған, тигән. Башҡорттар, венгрҙарҙың иттифаҡташтары булараҡ, шул уҡ йылда герман-венгр армияһына ҡушылып, Хорватияла, Адриатик диңгеҙе буйындағы Шибеник ҡалаһы янында татарҙарға ҡаршы һуғышта ҡатнаша. Был яуҙа татарҙар тар-мар ителә.

"Рогери кармен мизерблис" исемле латинса тарихи документ, Венгрияла йәшәгән мосолмандар, ҡулдарына ҡорал алып, татар илбаҫарҙарына ҡаршы яу сапҡан, тип һөйләй. Шул осорҙан ҡалған икенсе бер латинса документта татарҙар 1241 йылда Венгриялағы "Бей" тигән районда халыҡтың барыһын да юҡ иткән, тигән мәғлүмәт бар.

Был ваҡиғаларҙан һуң Венгрияла Ислам дине 100 йыл самаһы йәшәгән. 1340 йылда Карл-Роберт Анжуй батша (1308-1342 йылдар) христиан булмаған вассалдарына (подданныйҙарына) йә христиан динен ҡабул итергә, йә илде ташлап китергә бойора.

Юғарыла әйтеп кителгәндәрҙең барыһы ла Венгрия һәм Босния башҡорттарының милләт булараҡ юҡҡа сығыуына килтерә. Әммә улар Европа уртаһында, бөгөнгө Боснияла, Ислам мәҙәниәтенең үҫеп китеүендә ҙур роль уйнаған, шулай уҡ бихисап ҡорбандар биреп, Европа цивилизацияһын һаҡлап ҡалырға булышлыҡ иткән. Башҡорттарҙың Европа азатлығы өсөн монгол-татарҙарға ҡаршы аяуһыҙ көрәше, ҡаһарманлыҡтары ихтирамға лайыҡ.

Башҡорттарҙың Европала булыу тарихы әле ентекле ғилми тикшеренеүҙәрҙе талап итә.


**Илшат НАСИРОВ,**
**философия фәндәре докторы, профессор.**
**Мәскәү ҡалаһы.**


БАШҠОРТ ҠАМУСЫ




*Йәдкәр БӘШИРОВ*


# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## V. Бөйөк Башҡорт иле халыҡтары тураһында

Башҡорттар араһында оҙаҡ йәшәүсе доктор Михайлов уларҙың яҡшы сифаттары хаҡында яҙа. Улар ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата әхлаҡи яҡтан таҙа халыҡ. Башҡорт тәбиғәте менән намыҫлы, ул башҡа кешенең шәхесен ихтирам итә, үҙендә һәм башҡаларға тәкәбберлеккә һәм һөмһөҙлөккә юл ҡуймай.

Черемшанский әйтеүенсә, башҡорттар һәр ваҡыт алданыуҙан ҡурҡа. Уларҙың башҡаларға шикләнеп, ышанмай ҡарауы башҡа халыҡтар менән оҙайлы ваҡыт аралашып йәшәүенән, уларҙан йыш ҡына алданыуҙан килә. Нефедовтың күҙәтеүҙәренә ҡарағанда, башҡорттар һөйкөмлө, кинәйәле фекерле халыҡ, үтә ныҡ тойғоға бирелеүсән, фантазияға бай, тиҙ генә ҡыҙып китәләр ҙә, шундуҡ һыуына беләләр, изге күңелле һәм ҡунаҡсыл, аҙ ғынаға ла ҡәнәғәт була беләләр - уны ялҡау ғына таламай.

Сығанаҡтарҙан беҙгә тарихи аренанан күп кенә, хатта донъяла барған процестарға ваҡытында йоғонто яһаған халыҡтарҙың тарихи аренанан юҡҡа сығыуы билдәле. Мәҫәлән, күк төрөктәр, хазарҙар, уғыҙҙар, төргөштәр, ҡимаҡтар, Волга болғарҙары, бәшәнәктәр һ.б. юҡҡа сыҡҡан. Башҡорттар хаҡында ла шулай күрәҙәлек ҡылыусылар булды. Әммә тормош киреһен иҫбат итә. Башҡорттарҙы башҡа халыҡтарҙан (мишәрҙәрҙән, Ҡаҙан татарҙарынан, сыуаштарҙан һ.б.) айырыусы төп үҙенсәлек - революцияға тиклем башҡорт халҡы үҫешендәге этносоциаль процестар ырыуҙар (кланлы) структураһында барған. Башҡорт йәмғиәте сәйәси-хоҡуҡи мөнәсәбәттәрҙең уникаль күренешен тәшкил иткән, унда һәр бер ырыу (клан) ғәскәрҙә хәрби бурыс үтәү шарты менән ерҙең коллектив хужаһы булып иҫәпләнгән. Улар уникаль социаль төркөмгә - аҫаба башҡорттар социаль төркөмөнә ҡараған, унда этник һәм социаль сиктәр тулыһынса тап килгән. Шул уҡ ваҡытта башҡорт ырыуҙары араһында хоҡуҡи яҡтан тиңлек һаҡланған. Был осраҡта иң ҙур вәкәләтлек ролен йыйын үтәгән. Башҡорт йәмғиәтенең структураһын үҙаллы һәм тиң хоҡуҡлы клан берәмектәре тәшкил иткән. Был институт Рәсәй империяһының монархиялы дәүләт булараҡ һәләкәткә осрауынан һуң юҡҡа сыҡты. Бер нисә быуат һуҙымында башҡорт аҫабалығы ошо милләт вәкиле булыуҙың төп күрһәткесе булып, уның социаль, этномәҙәни тормошонда сағылыш таба.

Башҡорт ҡәбиләләренең Башҡорт хан тирәһендә тупланыуы, дәүләтселектең нығыныуы башҡорт халҡының үҙаллы үҫешенә булышлыҡ иткән. Мәскәү кенәзлегенә ҡушылғандан һуң башҡорт халҡының ядроһы Урал территорияһы тирәһенә тура килә. Тарихи сығанаҡтарға ярашлы, төп башҡорт ҡәбиләләре Өфөгә яҡын урында "Хан урҙаһы" үҙгәнә ярашлы дүрт юлға бүленә, улар: Нуғай, Себер, Ҡаҙан һәм Уса юлдары. Шуға күрә улар дүрт юл башҡорттары тип атап йөрөтөлә. Ырыуҙар юлдарға түбәндәгесә бүленә:

Нуғай юлы: меңле, меркет, табын, һарт, юрматы, ҡыпсаҡ, бөрйән, үҫәргән, ҡаңлы, сураш, тамъян, тиләү, ҡатай.

Себер юлы: ҡоҙәй, табын, ҡошсо, сыуын, танып, унлар, йәнәй, мырҙалар, һарт, ҡыуаҡан, барын-табын, ҡыпсаҡ-табын.

Ҡаҙан юлы: ҡәрше, ҡаңлы, ҡайлы, елдәт, кирәй, йәнәй, байлар, йылан, ҡырғыҙ, бүләр.

Уса юлы: таҙлар, уран, ирәкте, ғәйнә, һалауыш, ҡарөйлә.

**(Дауамы бар).**

**Тәбиғәт балаларҙа ял итә, имеш, тиҙәр. Ләкин тәбиғәт үҙе ял иткән арала, был раҫлауға саҡ ҡына үҙгәрештәр ҙә инеп китәләр, күрәһең. Шулай булмаһа, республикалағы арҙаҡлы шәхестәребеҙ балаларының ата-әсәһе юлын дауам итмәһә лә, тормошта лайыҡлы урын алып тороуын нисек аңлатырға? Бынан бер быуаттан ашыу элек республикала башҡорттарҙан беренсе профессиональ опера йырсыһы кимәленә күтәрелгән, Башҡортостанда РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы тигән маҡтаулы исем алған тәүге йырсыларҙың береһе, "Салауат Юлаев" операһында иң беренсе булып Салауат ролен башҡарған Хәбир Ғәлимовтың ҡыҙы, СССР Мәҙәниәт министрлығының "Алдынғы хеҙмәте өсөн" знагына, "БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре", "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре" исемдәренә лайыҡ булған һәм башҡорт мәҙәниәтен үҫтереүгә күп көс һалған Земфира ВӘЛИЕВА быға сағыу миҫал.**
**Ул - рубрикабыҙҙың бөгөнгө ҡунағы.**

# ХӘБИР ҒӘЛИМОВ ҠЫҘЫ УЛ!



**Тормошоғоҙҙоң ҡайһы мәлдәре хәтерегеҙҙә һаман да һаҡлана?**

- Бала сағым музыка донъяһының йоғонтоһо менән үтте. Үҙемдә иҫләгәндән бирле, әгәр гастролдә булмаһа, иртәнсәк атайымдың гаммалар һәм арпеджио йырлағанына уяна торғайным. Иҫке генә "Ҡыҙыл Октябрь" фортепианоһы артында өйрәнгән бөтә репертуары минең күңелемә бала саҡтан һеңде. Ә атайымдың репертуарында халыҡ йырҙары, бик күп ариялар, композиторҙарҙың башҡа әҫәрҙәре тупланғайны. Улар бөтәһе лә миңә бала саҡтан таныш. Шуға күрә, ете йәшемдән музыка мәктәбенә йөрөнөм. Шул күҙлектән ҡарағанда, музыканы ғүмерлек һөнәр итеп һайлауым, ғүмеремдә балаларҙы тәрбиәләүгә бағышлауым бик тәбиғи һәм һис ғәжәп түгел.

...Һирәк осрай торған көслө һәм ҙур диапазонлы драматик тенорға эйә ине атайым. Вокал сәнғәтендә юғары бейеклектәргә күтәрелеп, ул Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың хыялын тормошҡа ашырҙы. Шул замандарҙан алып минең иң яратҡан йырҙарым - башҡорт халыҡ йырҙары, яратҡан уйын ҡоралдарым - ҡурай, фортепиано һәм скрипка, Ер йөҙөндәге иң яратҡан урыным - атайымдың тыуған ере - Салауат районының Лағыр ауылы, йәмле Әй буйҙары.

**Яҙмыш елдәре һеҙҙе илдең төрлө мөйөштәренә ташлаған. Сит мөхит, ят кешеләр - шул ваҡыттарҙа ошо башҡорт мәҙәниәтенә булған һөйөү баҫылып ҡалманымы?**

- Ысынлап та, 20 йәшемдә тормош иптәшем - хәрби ососоу Юрий Вәлиевты осратып, уның менән ғаилә ҡорҙоҡ. Уға илебеҙҙең төрлө тарафтарында хеҙмәт итергә тура килде - Балтика буйы илдәренән алып Алыҫ Көнсығышҡа тиклем, хатта Германияла ла. Ошо яҙмышты икебеҙ бергә бүлдек, бергә кисерҙек, бергә үттек. Ләкин яҙмыш елдәре ҡайҙа ғына илтмәһен, хыялымда ҡасан да булһа тыуған яғыма ҡайтып төпләнеү осҡоно йәшәне. Хәрби гарнизондарҙа офицер ҡатындарының күбеһенә эш булмаһа, минең музыкаль белемем бар урында ла кәрәк ине. Һәр ерҙә лә тиерлек музыка мәктәптәренә директор йәки уҡытыу бүлеге мөдире итеп саҡырҙылар. Ҡайҙа ғына эшләһәм дә, һәр ваҡыт башҡорт музыкаһын пропагандаланым, атай-әсәйем ҡунаҡҡа килһә, атайымдың сығыштарын ойоштора инем.

**Ә Өфөлә иң яратҡан урынығыҙ ниндәй?**

- Телеүҙәк артында атайым менән әсәйем үҙ ҡулдары менән һалып сыҡҡан өйөбөҙ була торғайны. Мин ғаиләбеҙҙең нисә кешенән торғанын да әйтә алмайым. Сөнки беҙҙә бер өҙләкһеҙ туған-тыумасалар, ауылдаштар, райондаштар йәшәне. Данлыҡлы кеше булыуына ҡарамаҫтан, атайым дуҫлыҡты юғары дәрәжәле кешеләр араһынан эҙләп йөрөмәне. Уның дуҫтары артистар, йырсылар, композиторҙар ине. Ул йомшаҡ һәм интеллигент кеше булды. Атай-әсәйемдең дуҫтарына, тирә-яҡтағы кешеләргә, туғандарына булған ҙур ихтирамы, мөхәббәте беҙгә, балаларына ла күсте. Мин үҙем атайымдың дуҫтарын ныҡ хөрмәт иттем. Зәһир Исмәғилев һәм Ғилман Ниғмәтйәновтарҙы айырым атап үткем килә. Сөнки бер байрамыбыҙ ҙа уларҙан башҡа үтмәй торғайны. Хатта Мәскәү консерваторияһында уҡыған мәлдәрендә Зәһир Исмәғилев менән Рәиф Ғәбитов һәр саҡ беҙҙә булды, беҙҙә йәшәне, тиһәм дә арттырыу булмаҫ.

Икенсе яратҡан урыным - Совет майҙаны, сөнки хәҙерге Урта махсус музыка колледжы урынында элек дауахана булған һәм мин шунда тыуғанмын. Һуңынан шунда музыка мәктәбендә белем алдым, Өфө дәүләт сәнғәт институтын тамамланым, ошо мәктәптә директор булып эшләнем. Ғөмүмән, тормошом Совет майҙаны, Телеүҙәк һәм ошо ике араны тоташтырған Пушкин урамы менән ныҡлы бәйләнгән.

**Энә ҡайҙа - еп шунда, тигәндәй, 17 йыл гарнизондан-гарнизонға күсеп йөрөгәндән һуң, ҡабат Башҡортостанға ҡайтҡанһығыҙ...**

- Зәһир Исмәғилев Өфө дәүләт сәнғәт институты ректоры булып эшләгән ваҡытында мине ошо уҡыу йорто ҡарамағындағы Урта махсус музыка мәктәбенә директор итеп саҡырҙы. Союз буйынса музыка мәктәптәрендә тупланған тәжрибәмдең файҙаһын шунда ныҡ күрҙем дә инде. Бында хужалыҡ эштәре буйынса ғына түгел, ә милләтенә нисек ярҙам итеү күҙлегенән сығып фекер йөрөтәм. Эйе, директорға хужалыҡ эштәрен дә йырып сығырға кәрәк, әммә заманында Ғәзиз Әлмөхәмәтов башҡорттарҙы йыйып, Мәскәү консерваторияһына уҡырға ебәргән кеүек, беҙ ҙә ауылдар буйлап йөрөп, мәктәпкә уҡыусылар йыйҙыҡ. Сибай ҡалаһында, Урал аръяғы райондарында йәшәүсе һәләтле балалар сифатлы музыкаль белем алһын өсөн мәктәптең филиалын астырыу ҙа ҙур ҡаҙаныш булды. Белем усағында беренсе тапҡыр Зәһир Исмәғилев призына конкурс ойошторҙоҡ, Юлай Ғәйнетдинов алып барған ҡурай класына йөрөүсе үҫмерҙәр "Һорнай" ансамбле менән сығыш яһай башланы. Бөгөн республикала ғына түгел, Рәсәйҙә, донъя кимәлендә башҡорт халыҡ уйын ҡоралдарында уйнаусыларҙы, ҙур сәхнәләрҙә сығыш яһаусы милләттәштәремде күрһәм, ҡыуанысымдың сиге юҡ - уларҙың күпселеге беҙҙең мәктәпте тамамлаусылар.

**Башҡорт йырҙарына, музыкаһына һөйөү бала саҡтан килә, тинегеҙ, шулай ҙа йыр аша тормошоғоҙҙо асып бирергә тиһәләр, ниндәй йырҙы һайлар инегеҙ?**

- Ғөмүмән, барлыҡ башҡорт халыҡ йырҙарын да яратам, сөнки атайымдың репертуарында ғына ла 100-ҙән ашыу башҡорт халыҡ йыры бар ине. Уларҙың һәр ҡайһыһы - үҙе бер тарих. Шулай ҙа, тормош юлымды Хөсәйен Әхмәтовтың Мостай Кәрим һүҙҙәренә яҙған атайым яратып башҡарған "Ғүмер тураһында баллада"һы менән сағыштырыр инем. Ҡайҙа ғына эшләһәм дә, үҙемде тулыһынса хеҙмәткә арнаным, ҡайһы берҙә хатта ирем, ғаиләм, балаларым, ейәнсәрҙәрем өсөн ваҡыт та ҡалмағандыр, әммә эшемдең һөҙөмтәләрен күреү, коллективта йылы, эшлекле мөхит тыуҙырыу, балаларҙың шат тауыштарын ишетеү - минең бәхетле, халҡыма бағышланған ғүмеремдең бер өлөшө.

**Атайығыҙҙы, Хәбир Ғәлимовты, бәлки, бөгөн күп йәштәр белмәйҙер, әммә ул башҡорт мәҙәниәтенең алтын бағаналарының береһе. Арҙаҡлы шәхес балаһы булыуы нисек?**

- Атайымды белеүселәр уның бөйөк йырсы булыуына ҡарамаҫтан, изгелекле, йомарт, коллегаларына һәм тамашасыларына ихтирамлы булыуын иҫләйҙәр. Дуҫтарын: "Ғәжәйеп матур, иҫ киткес яҡшы кеше", - тип, бер һөйләм менән генә баһалай ине. Әлбиттә, ошондай атай ҡыҙы булыу оло яуаплылыҡ та өҫтәй, һәр ҡайҙа үҙеңде лайыҡлы тоторға, атай абруйына тап төшөрмәҫкә, уның ҡаҙаныштарын арттырырға һәм һаҡларға, киләсәк быуындарға еткерергә бурыслыһың. Шәхсән үҙем атайымдың яҡты иҫтәлеген һаҡлау өсөн ҡулымдан килгәнсә тырышам: 2006 йылдың 11 мартында Лағыр урта мәктәбендә Хәбир Ғәлимов исемендәге музей асыуға өлгәштек. Шулай уҡ халыҡ йырҙарын башҡарыу традицияларын һаҡлау һәм үҫтереү, уның ижади мираҫын пропагандалау һәм популярлаштырыу, яңы сағыу исемдәр асыу маҡсатында Салауат районында "Оҙон көй" конкурстары үткәрелә. Ул хәҙер төньяҡ-көнсығыш төбәк конкурсына әүерелде. Район үҙәгендә, Лағыр ауылында һәм башҡа ауылдарҙа Хәбир Ғәлимов исемендәге урамдар бар. Әлеге ваҡытта атайым тураһында китап әҙерләп, З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтенә тапшырҙым. Өфө ҡала Советына баш ҡала урамдарының береһенә атайымдың исемен биреүҙе юллайым. Быны республика, баш ҡала йәмәғәтселеге лә хуплап сыҡһа, бик яҡшы булыр ине...

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

*✓ Яҡшы яҙыусы бик һирәк яҡшы журналист була. Һәм - киреһенсә. Минеңсә, беҙҙең яртылаш яҙыусы, яртылаш журналист замандаштарыбыҙҙың күпселеге ана шул ике һөнәр араһында ғүмер кисерә.*



ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

# ХАЛЫҠ МӨҒЖИЗӘГӘ ҺЫУҺАҒАН,

## халыҡтың ышанғыһы килә...



**Башҡорт әҙәбиәтендә үҙенсәлекле ҡарашы, жанрҙар төрлөлөгө, ҡыҙыҡлы сюжеттары менән айырылып тора Нияз АЛСЫНБАЕВтың ижады. Әҫәрҙәрендә лә авторҙың тура һүҙле, тапҡыр фекерле, төплө белемле кеше икәнлеге сағыла. Уның яҙғандары шыйғалаҡ фәлсәфәгә генә ҡайтып ҡалмай, ә мотлаҡ фәнни, тарихи, ғилми дәлилдәргә нигеҙләнә. Яҙыусыларға бирелә торған "Өс һорау"ҙа ла уның яуаптары аныҡ һәм тура булды.**

**➔ Башҡорт әҙәбиәтендә фантастик жанрға урын бирелһә лә, ул ныҡлап үҫешеп китә алмай әле. Ә бит, уйлап ҡараһаң, ошо жанр аша әллә күпме халыҡтарҙың һоҡланғыс мәҙәниәте донъяға билдәле. Хатта әлеге ваҡытта беҙҙең йәштәр һуштары китеп ҡараған, уҡыған "Властелин колец", "Хоббит", "Гарри Поттер" кеүек әҫәрҙәр ҙә фантастика ғына. Ә бит беҙҙең фольклорҙа, ауыҙ-тел ижадында шундай китаптарға нигеҙ булырҙай байлыҡ һанһыҙ һаҡлана. Һеҙ үҙегеҙ ҙә ошо жанрға мөрәжәғәт иткәнегеҙ булды. Нисек уйлайһығыҙ, башҡорт фантастикаһының күтәрелеп китеренә өмөт бармы?**

- Башҡорттоң тарихи байлығы иҫ китмәле. Әлегә беҙ, башҡорт яҙыусылары, уның өҫкө ҡатламдарын ғына белә алабыҙ. "Белә алабыҙ", сөнки йә беҙҙең "ҡул теймәй", йә фантазия етмәй. Миҫал өсөн, бөйөк "Урал батыр" эпосын алып ҡарайыҡ. Бында беҙҙең өсөн иң ҡиммәтлеһе: "тирә-яғын һыу ҡаплаған ҡоро ер"ҙә ғүмер һөргән тәү кешеләр. Йәғни ҡырағай холоҡло әҙәми заттар. Таш менән ҡоралланған, теш менән йәнлек боғаҙын йыртып, ҡан эскән ҡырағай ата-бабаларыбыҙ, Йәнбирҙе менән Йәнбикә. Улар ерле-юҡтан уйлап сығарылмаған. Улар башҡорт тарихының боронғолоғона ишара. 4 мең йыл элек булған тәүтормош йәмғиәте ағзалары. Был инде тарихи әҫәргә бынамын тигән материал! Теләһәң, әйҙә, "Киләсәк тураһында хәтирәләр" тигән һымағыраҡ "кәпәс" аҫтында фантастик роман яҙ! Бер һүҙ менән әйткәндә, башҡорт уйҙырмаһын яҙыу, уны үҫтереү беҙҙән, яҙыусыларҙан тора. Ниндәй генә телдә яҙылһа ла. Фантазияң ғына булһын!

Тарихи фәнтәзи тигәндән, мин бынан 7-8 йыл элек "Серле мосафир" тигән мажаралы повесть яҙғайным. Имеш, Зәки Вәлиди Туған 1962 йылда йәшерен генә иленә ҡайтып киткән... Хатта, имеш, ҡыҙылдар яғына сыҡҡан мәлдә башҡорт тауҙарында йәшереп ҡалдырған алтынын эҙләп йөрөгән... Һәм халыҡ ышанды!

- Һин ысынды яҙғанһың бит, Вәлидиҙең китапта телгә алған көндәлеген күрһәт әле! - тип ҡат-ҡат мөрәжәғәт итеүселәр табылды. Хатта ҙур ғына вазифалы, донъя күргән, етди ағайҙар ҙа ышанған да ҡуйған. Повестың уйлап сығарылғанын аңы менән аңлап, әммә йөрәге менән ҡабул итмәй, һаман да үпкәләп йөрөүселәр бар. Ул ғына ла түгел:

- Башҡорт хөкүмәте ҡаҙнаһын ысынлап та йәшереп ҡалдырған ти бит ул Зәки Вәлиди! Минең олатайҙар шулай тип һөйләй торғайны. Әйтсәле, ҡайҙа йәшергәндәр? Әйҙә, бергәләп эҙләйек, тапһаҡ, яртыһы минеке, яртыһы - һинеке! - тип тимер эҙләүсе ҡулайлама менән килеп етте бер егет. Әммә тиҙ генә байып китергә насип булманы. Ни тиһәң дә, булмаған хазинаны эҙләп табыуы булғанын соҡоп сығарыуҙан күпкә ауырыраҡ.

Мәҙәк тә, ғәжәп тә был хәлдән бер генә һығымта яһарға мөмкин - халыҡ мөғжизәгә һыуһаған, халыҡтың ышанғыһы килә. Һорау бар, тәҡдим юҡ. Улай ярамай, егеттәр. Тимәк, эшләргә, яҙышырға, танһыҡты ҡандырырға кәрәк.

**➔ Журналист һөнәре яҙыусылыҡта ҡамасау ул", тип ҡабатларға ярата журналист яҙыусылар. Мин, киреһенсә, үҙеңде үҫтерергә ярҙам итеүсе бер баҫҡыс микән тип уйлайым. Һеҙҙеңсә нисек?**

- Ысынлап та, журналист һөнәре яҙыуһыҙыу шөғөлөнә урын ҡалдырмай тиерлек. Журналистика шулай уҡ яҙыусының һүрәтләү рәүешенә лә йоғонто яһай. Уратып-суратып, семәрләп тасуирлау журналисҡа хас түгел. Ул тураһын ярырға күнеккән. Бәлки, бөгөнгө тиҙлектәр, йәштәр әйтмешләй, "экшн" ("хәрәкәт") заманында был һәйбәттер ҙә. Журналистика тормошто, унда көн иткән әҙәм балаһын, уның уй-хыялдарын, өмөт-ышаныстарын яҡынданыраҡ танып белергә өйрәтә. Уның сәбәптәрен аңларға ярҙам итә. Төп өҫтөнлөгө шунда. Әммә был һөнәр, "идеяларҙы үлтерә, аҡыл һайығыуына килтерә", тигән һүҙҙәр менән килешмәйем. Аҡыл йә бар, йә юҡ. Шуның һымаҡ, талантты ла Хоҙай бирһә - бирә, бирмәһә - юҡ. Яҡшы яҙыусы бик һирәк яҡшы журналист була. Һәм - киреһенсә. Минеңсә, беҙҙең яртылаш яҙыусы, яртылаш журналист замандаштарыбыҙҙың күпселеге ана шул ике һөнәр араһында ярым йәш, ярым ҡарт, ярым "шәп", ярым "әй, яҙған булған инде шунда" статусында ғүмер кисерә. Ике һөнәр араһында өҙгөләнә. Береһе матди нигеҙҙе тотоп тора, икенсеһе рухи ҡиммәттәрҙе үҙ итә. Журналистика ашата, яҙыусылыҡ ошо ашаныуҙы ситтән генә ҡарап тора. Ҡарап ҡына ла тормай, ә, бәлки, "Мине киләсәк быуындар беләсәк!" ти үҙ-үҙен йыуатып тора. Әҫәрҙәре сәхнәлә барған өс-дүрт бөртөк драматургты иҫәпкә алмағанда, әлбиттә.

**➔ Мөхәббәттең йәш саҡта булыуы хәйерле, тиҙәр. Тик уның тураһында "Мөхәббәт ул - утлы-йәшен! Ҡарап тормай ҡартын-йәшен!" тип тә яҙалар...**

- Был тема мине, нисектер, борсоғаны юҡ, шуға ла аҡыллы фекерҙәр әйтә алмаҫмын, моғайын. Ләкин бәғзе бер күҙәтеүҙәрем менән уртаҡлашырға була. Был күҙәтеүҙәрҙең мәғәнәһе шул: мөхәббәт ул бик мәкерле һәм холоҡһоҙ нәмә. Йәшен-ҡартын айырып тормай, башы һуҡҡан яҡҡа сығып китеп, теләһә кемде килә лә баҫа. Грипп киҙеүе кеүек. Һәр хәлдә, шундайыраҡ фекер ҡалды ошо бер тарихтан һуң.

Бер мәл, 90-сы йылдар башында, эшселәр ятағында йәшәп алырға тура килде. Бүлмәләшем, уға 40 йәштәр самаһы, "һуғырға" ярата. Исемен Эдик тип алайыҡ. Эдиктың һәр иртәһе стакан төбөндәге араҡыны ғортлатып түңкәреүҙән башланып китә. Төшкө аш мәлендә ҡайтып китә: ул яҡында ғына тракторсы булып йөрөй. Ярты стаканды түңкәрә ҡоя ла йәнә сығып китә. Киске табыны үтә лә бай була. Консерваланған балыҡ, ҡыяр, бер телем икмәк һәм тулы стакан. Шәмбе - көтөп алған байрам. Киске тамаҡтан һуң Эдик һары мыйығын ҡап-ҡара итеп буяй. Ул ашыға, ул тулҡынлана, сөнки ул бөгөн "ҡыҙҙарға бара":

- Кейенеп алайым әле матур ғына итеп!

Матур ғына итеп кейенеүе шунан тора. Һары күлдәк, ялҡынланып торған ҡыҙыл галстук, зәңгәр төҫтәге костюм-салбар. Аяҡта ҡап-ҡара туфлиҙар. Тутыйғош төҫөнә кергән кавалер ҡыйыулыҡ өсөн йәнә берҙе елгәрә лә, тыҡ-тыҡ баҫып сығып олаға.

- Ҡыҙҙарға, ҡыҙҙарға!

"Ҡыҙҙар" тигәне Даша тигән ашнаҡсы ханымға ҡайтып ҡала. Әйтеүе буйынса, ул бик сибәр: фигура - во , характеры - во, ә күҙе... ә күҙе - зәңгәр... Шулайҙыр, мин бит уны күргәнем юҡ. Эдиктың холҡо һәйбәт, һис ҡасан да "ҡыҙын" ятаҡҡа алып ҡайтмай, минән тартына, күрәһең. Таң алдынан ҡайтып, мәс килеп йығыла. Үҙе туҡтауһыҙ нимәләр һөйләй, үҙе әрләй, илап та ала. Ята биргәс, тып итеп иҙәнгә йығылып төшә, унан тыптыр-тыптыр килеп ике карауат араһында тәгәрләп йөрөй башлай. Ул ауырый, үҙе әйтмешләй, "эсәктәре янып бара", сөнки ул бөгөн эскән, ул бөгөн һөйөклөһө менән талашҡан. Шуға ла туп һымаҡ ике карауат араһын ҡыҙыра. Ярай әле, бәхетенә, бөгөн ял... Йәкшәмбе көн көс йыя, яраларын ялай, өҫ-башын рәткә килтерә.

Ҡатыны "Йәшел сауҡалыҡ" биҫтәһендә йәшәй, улар рәсми рәүештә айырылмаған. Һирәк-һаяҡ ҡайтҡылап йөрөй, ләкин бергә тормайҙар, быының үҙ сәбәптәре бар. Кистәрен Эдик ғаилә тормошонан ҡот осҡос хәлдәр һөйләй. Уның фекере буйынса, ҡатын-ҡыҙға һин үҙең түгел, ә һинең аша килгән аҡса, бала, фатир һәм "ирле ҡатын" тигән һүҙ генә кәрәк... Ул былар хаҡында бик оҫта итеп, бирелеп китеп, ниндәйҙер ғәжәйеп әртислек менән тасуир итә. Үҙ-үҙен һыйлап ултырырға ла онотмай. Иҫереүе һуңғы нөктәгә барып еткәс, күҙенә йәш алып:

- Ул бит миңә тапочка менән һуҡты! Бала алдында! - тип өҫтәлгә йоҙроғо менән тондора. Маңлай тирәһенә төртөп күрһәтә. Бына ошонда һуҡты! Зарланып ултыра торғас, йәтеш кенә итеп карауатына ауып төшә, тәрән булмаған йоҡоға тала... Унан кинәт һикереп килеп тора. Һәм итәгенә ут ҡапҡандай, "мин кызларга киттем" тип ашығып сығып олаға. Ҡайһы саҡта аҙналап ғәйеп була.

Бер мәл Эдуардты ен, дөрөҫөрәге, фәрештә алыштырғандай булды. Эсеүен ҡырҡа кәметте. Алыҫтан балҡып торған һары күлдәк менән теткеләнә башлаған ҡыҙыл галстук шешәләш дуҫтарына бүләк ителде. Ир күҙ алдында үҙгәрә башланы. Туҡ бесәй һымаҡ, мыйыҡ аҫтынан йылмайып йөрөй. Теш ҡуйҙырҙы. Һүгенеүҙәр кәмей төштө. Зауыҡ менән кейенә башланы: өҫтөндә зәңгәр салбар-пинжәк, аҡ күлдәк, күкһел галстук. Телмәренә "ғәфү итегеҙ, рәхим итегеҙ, зинһар" тигән кеүек ят һүҙҙәр килеп инде. Шик юҡ, минең дуҫҡа ниндәйҙер бик ҡөҙрәтле кеше йоғонто яһай башлағайны. Баҡһаң, Дашаның ниндәйҙер йомошо менән поликлиникаға барғанда бер медсестраға күҙе төшкән, имеш.

- Ул ултыра, мин торам. Ул миңә бер ҡараны, и все! Мин, блин, һоп! Ғашиҡ булдым да ҡуйҙым! Блин! - эсенә һыймаған мөхәббәт хистәрен Эдик шулай хәленән килгәнсе аңлатты. Йөҙө еҙ батмустай ялтырап, балҡып тора. Исеме ул ҡатындың Эльвира. Гардеробсынан белешкән.

Нисек булғандыр, әммә Эдик һөйгәне менән танышҡан. Хатта бер көн эштән көтөп алып (ул тағы ла ҡайҙалыр иҙән йыуа икән), оҙата барған. Сәй эскәндәр. Балаһы бар икән, ун бер йәшлек. Шунан ҡайта алмайынса, ҡышҡы һыуыҡта ике сәғәттән ашыу транспорт көтөп торған. Бер мәл театрға билет алып ҡайтты. Хәҙер ул Эльвира менән һаташа, хатта уға арнап, минән шиғыр яҙҙырып маташты. Ләкин Даша ла йоҡлап ятмай ине. Ул мөхәббәт фронтынан сығып ҡасҡан "дезертирҙы" юллап, бер нисә мәртәбә ятаҡҡа килеп әйләнде. Тәүгеһендә минең дуҫ саҡ ҡасып ҡотолдо. Вахтер әбей алдан иҫкәртелгәйне, теге әрһеҙ ҡатын килеп инеү менән ҡысҡырып һөйләшә башлай:

- Эдик юҡ! Эдик эсеп йөрөй, бер аҙна инде күренгәне юҡ!

Беҙҙең бүлмә вахтаға яҡын, эргәлә генә, был тауышты ишетеү менән ишекте бикләп ҡуябыҙ. Унан Эдик карауат аҫтына боҫа, мин разведкаға китәм. Ханым көтөп ултыра-ултыра ла, әрләй-әрләй ҡайтып китә. Эдиктың "фигура - во" тигән элекке "ҡыҙы" йыуан кәүҙәле, нәҙек иренле, боламыҡ күҙле мәрйә булып сыҡты. Записка ҡалдырып китте. Эдик әйтеүенсә, ауырлы икән, шуны яҙған. Мөхәббәт ҡорбаны уны йәлләп, фатирына бер-икене инеп сыҡты. Әммә үҙенең икенсе ҡатынды яратыуын тәки әйтмәгән:

- Йә бер нәмә эшләп ҡуйыр үҙе менән... Беләһеңме, ул ниндәй ҡыҙыу!

Минең күрше хәҙер Эльвираны әйттереү тураһында хыяллана башланы. Етеп килгән Яңы йылды бергә ҡаршыларға, аҙаҡ никах уҡытырға ниәт иттеләр. Ҡатыны менән рәсми рәүештә айырылды. Эльвира Яңы йыл алдынан килеп, икебеҙҙе лә ҡотлап китте. Артыҡ сибәр булмаһа ла, бик һөйкөмлө, йылы ҡарашлы 30-35 йәштәрҙәге ҡатын ине. Беҙҙе бәлеш менән һыйланы. Тик был икәүҙең бәхете оҙаҡҡа һуҙылманы. Эльвира осрашыуҙан ситләшә башланы, Эдуард иртәле-кисле вахтанан китешмәй, ҡат-ҡат шылтыратып ҡараһа ла, трубканы алманы. Эдик күҙгә күренеп һулыны, йәнә эсә башланы. Минең өгөтләүҙәр менән ризалаша, ләкин үҙе менән бер нәмә лә эшләй алмай ине. Аҙаҡ ҡына һөйләне. Баҡһаң, Даша ҡатындың эшенә барған. Нимә һөйләшкәндәрҙер инде, уныһы ҡараңғы, әммә осрашыуҙар туҡтаны. Бер мәртәбә эшенә эсеп килгән ирҙе ҡыуып сығарған. Оло янъял ҡупҡан, минең дуҫ шунан һуң намыҫланып, шылтыратмай башланы...

Шунан мин районға ҡайтып киттем. Йәнә 20 йыл самаһы үткәс, теге ятаҡханаға инеп сыҡтым. Мине белгән ике-өс егет кенә ҡалған. Яңы йөҙҙәр, яңы ғәҙәттәр, яңы еҫтәр. Элекке ҡунаҡсыл ағас ишектәр тимергә алыштырылған. Ҡарт буйҙаҡ Фәнид әйтә ҡалды:

- Эдикмы? Ул һин ҡайтып киткәндән һуң, йәйгә табан, күсеп китте икенсе эшкә. Ул бит өйләнде, Дашаға шикелле...

- Йыуан мәрйәгәме, бында килеп йөрөгән?

- Юҡ, ул йыуан түгел. Акушермы, врачмы шунда, һин күрҙең уны!

- Тимәк, Эльвираға!

- Шуға! Эйе, Эльвира шикелле исеме...

Быны шулай тамамланды ысын тормоштағы бер ваҡиға. Тимәк, мөхәббәт үҙ ваҡытын белә, бер ҡасан да һуңламай һәм бер нәмәгә лә ҡарамаҫтан, үҙ юлын таба. Әгәр ул мөхәббәт булһа. Башҡаса өҫтәрлек һүҙ юҡ, тамам.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА**
**әңгәмәләште.**

***✓ Ә ниңә әсенә әле Хәтирә? Үҙен көскә тотоп йәшәтте, иркә-наҙҙарын күҙ йомоп ҡабул итергә өйрәнде. Таң яҡтырыр яҡтырмаҫтан уянып, килер көнгә әҙерләнде, кис төшөүгә, һағайып төндө көттө.***




– Тап үҙе. - Килеүсе хужабикәне беләге менән ситкә эткәндәй итеп, өй ишегенә ынтылды. - Мин, һеңлем, Ғимран ҡустыға.

- Ә-ә, үтегеҙ әйҙә, - Хәтирәгә апай артынан эйәреүҙән башҡа сара ҡалманы.

Ҡатын инде, бер аҙ ишек төбөндә туҡтап, өй эсен байҡап алды ла, быймаларын һалып, үтеп урындыҡ ситенә терәлде. Хәтирә асыҡ ҡарашын ҡатынға, тегеһе ап-аҡ итеп ҡырып йыуылған буяуһыҙ иҙән таҡталарына күсерҙе. Һәр береһе кемдеңдер һүҙ башлауын көткәндәй, тынып ҡалды. Шунан, ултыра торғас, апай ҡапыл бөтә көүҙәһе менән Ғимран яғына боролдо. Аһ, уныһы нимәгә ен күргәндәй булып ағарып ҡатҡан һуң?

- Нишләп өндәшмәйһең, Ғимран ҡусты? - апайҙың тауышы шундай талапсан яңғыраны, хужалар хатта юғалып ҡалды. "Нисек инде уның иренә - түрәгә, ниндәйҙер бер ябай бисә улай ҡаты бәрелә ала?" Бала саҡта ла, үҫкәндә лә ғаиләлә атаһына ҡаршы өн сығарырға ярамағанлығы ҡанына һеңгәс, эсендә ниндәй асыу ҡайнағанда ла иренә екереү йәки яуап талап итеү уның өсөн баш еткеһеҙ ҡурҡыныс хәл кеүек ине. Шунлыҡтан, Ғимрандың да атаһы кеүек донъя туҙҙырып ҡыҙып китеренән ҡото алынып, ипләп кенә ҡарашын күтәрһә, ҡайҙа ул ярһыу, иренең башы һәлберәп төшкән. Хас та эш боҙған үҫмер малай тиерһең. Ниндәй ғәйебе бар уның был апай алдында? Хәтирә күҙҙәрен түңәрәкләндереп, бер ҡатынға, бер иренә ҡараны.

- Бына шулай, иптәштәр, оятты ҡапланым да килдем. Баламды әрәм иттерер хәлем юҡ.

- Ә... нимә булған һуң?..

- Атаң башы буған! Минең ҡыҙға тейгән бит ирең! Бөтә ғәм шуны һөйләй, бутта, һин ишетмәй ултыраң...

Сайҡалып китте әллә Хәтирә, ипләп кенә арҡаһы менән мейескә һөйәлде.

- Кит, апай, юҡтыр...

- Юҡ булырға, ҡорһағы етешеп килә. Еңгәһе вис һөйләтеп алды, фермала ҡарауылда ҡалғанда Ғимран ағай көсләне тигән.

- Хат! - Хәтирәнең келт итеп иҫенә теге хат төштө.

- Мин яҙҙым ул хатты, аптырағандан, - ҡатын, уфтанып, усы менән маңлайын баҫты. - Йә, нишләйбеҙ? Берәй яры хәл итмәһәң, Ғимран, хатта әйтелгәнсә, райкомға ла, обкомға ла барам. Фронтавик балларынан көлөп, көсләп йөрөй тип фаш һалам. Аның атаһы менән ағаһы һуғышта ҡан ҡоя!

Ҡатын ошо юғары нотала өҙөлөп, барып быймаларын кейҙе лә, сығыр алдынан:

- Иртәгәле көтәүелләйем дә - үҙеңә ҡарап үпкәлә, каммунис тип тормам, - тигән дәшһәтле янауын эстә ҡалдырып, ишекте япты. Хәтирә менән Ғимран шул шаңҡыуҙарынан арына алмай ултырып ҡалды.

...Ҡалған көндәрҙәге хәл-ваҡиғалар Хәтирәнең үҙе менән булманы кеүек. Әллә нишләне лә ҡуйҙы ул. Ғимрандың күҙҙәренә йәш алып, хәлде аңлатыуына ла тыныс ҡалды, ваҡытлыса ятаҡҡа күсеп торорға өгөтләүенә лә күнде, хатта ире эйәртеп алып ҡайтҡан оло ҡорһаҡлы, бала сырайлы ҡыҙға ла бер ҡаты һүҙ әйтә алманы. Һыйырын һауып индереп, һөтөн һикегә ҡуйҙы ла, урындыҡ ситендә аңшайып ултырған көндәшенә: "Ана сипарат аҫта, әрәм итмә, үткәреп ал", - тип сыҡты ла китте. Ғимран сумаҙанын күтәрешеп алып барышмаҡсы ине, уны ла: "Кит, кеше көлдөрөп йөрөмә", - тип һеңгәҙәтеп китте. Көндөҙ, теге ҡатынды алып килмәҫ элек үк китмәне йә, яҡтыла урамдан үтә алырына ышанманы шул, ҡараңғыға ҡалып, бур шикелле ҡаса-боҫа ғына ташлап китте ул өйөн. Ғимран: "Был хәл ваҡытлыса ғына, бала тыуып, баш-күҙ алһа, мин уны кире әсәһенә ҡайтарам", - тип ураған һайын тылҡыһа ла, был йортҡа ҡабаттан аяҡ баҫмаҫын аңланы шул саҡ Хәтирә. Эте лә, бесәйе лә, һыйыры ла ҡабат уны был ихатала тап итмәйәсәк, уларҙы икенсе ҡулдар иркәләйәсәк, тәрбиәләйәсәк бынан ары.

Район үҙәгендә генә түгел, бөтә район бисә-сәсәһе телендә улар булғандыр һуңғы мәлдә. Тегеләргә нисектер, Хәтирәгә һәр кем уның йөҙөнә төбәлеп ҡарай, йәлләй, йә аҫтыртын көлә кеүек тойолдо. Кәмһенеүе, ғәрләнеүе үҙәген өҙһә лә, ул сер бирмәне. Киреһенсә, юҡ-барға шарҡылдап көлдө, уйындарҙа таҡмаҡ әйтеп беренсе булып шартлатып бейергә төштө, иртәнән ҡара кискәсә тракторында ер аҡтарҙы. Унан төндө көнгә ялғар сәсеү башланды. Хәтирәгә ал да, ял да кәрәкмәне, тамаҡ ялғап, трактор кабинаһында ғына серем итте лә, ҡорос атын кире ҡабыҙҙы. Бригадир Даша апай туҡтатманы ла, тыйманы ла уны, "ир бирмәк - йән бирмәк, башҡа ни менән баҫһын инде йөрәген", тип кенә ҡуйҙы.

Сәсеүҙе тамамлағас, йәйләүгә сыҡҡан ауыл фермалары өсөн концерт әҙерләп йөрөгән мәлдә, ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа шыбырлап, Ғимрандың балаһы тыуыуы хаҡында хәбәр килтереп еткерҙеләр. Иғтибарға алмаған булһа ла, бер һуң ғына ҡайтып килешләй, әллә ни ғилләә менән аяҡтары үҙҙәренән-үҙҙәре шул яҡҡа тартты ла, урлашырға килгән ҡараҡ шикелле йәшенә-боҫа өйҙәренең алғы баҡсаһына төшөп, ҡорған тартылған тәҙрәнең бер егенән генә эскә күҙ һалды шул. Ғимран, моғайын, өйҙә лә юҡтыр, уттай ҡыҙыу эш мәлендә ҡырҙа яталыр. Теге бисә нишләгән була икән? Бала бәүетеүҙән күҙе тоноп бөткән яңғыҙ ҡатынды йәлләмәксе булып үрелгәйне, күргәндәренән ауыҙын асып ҡатып ҡалды. Йәй башы булыуға ҡарамаҫтан, мейес тултырып ут яғып ебәргәндәр, уныһы ялҡындарын күңелле бейетеп йылы бөркөп тора. Мейес алдына ултырғыстар ҡуйып, оло кәритә ултыртҡандар ҙа... бәпес йыуындыралар. Ғимрандың йөҙө! Килбәтһеҙ ауыҙы ҡолағынаса йырылған, туҡтауһыҙ нимәлер һөйләгән була. Өҫ-башы һыуланып бөткән, унда иһә эше лә юҡ, ибәтәйһеҙ ҡулдарына сей генә балаһын тотоп алған да, берсә һыуға тыға, берсә өҫкә тартып сығара. Теге әргендек кенә бисәһе һабын күпертеп шул бер бармаҡ башындай нәмәләрен йыуып-йыуған була.

Ярһып илаған баланы ҡатын йүргәккә төрөп алып киткәйне, Ғимран етеҙ ҡыланып, һыуҙарҙы түгеп инде, хатта туңҡанлап иҙәнгә түгелгәндәрен һөртөп алды ла, бәпәй имеҙергә ятҡан ҡатыны ҡаршына барып, ауып китте. Кит, шуның имсәгенә ҡарап ята микән! Ары Хәтирәнең күҙәтеп торор хәле ҡалманы. Йәки тәҙрәне онтай һуғасаҡ йәки шунда хәле бөтөп ҡолаясаҡ ине ул. Асыуынан һаҡлыҡты ла онотоп, үҙе ултыртҡан сирен ҡыуаҡтарын шаптырлатып йырып сығыуға ыңғайлағайны, баҡса тәңгәленә килеп үк эте ләңкелдәп ебәрҙе. "Аҡтүш! Аҡтүш..." тип танытайым тигәнсе, эстән кемдер килеп тәҙрәгә ҡапланды. Саҡ башын алып өлгөрҙө. Ул арала булмай, хужа соландан: "Эй, кем бар унда?"- тип өндәште. Сыҡты ла осто Хәтирә. Ҡараңғыла әллә ниндәй түмһәләргә барып менде, эләгеп ҡоланы, тағы тороп йүгерҙе. Әйтерһең дә, Ғимран уның артынан ҡыуа төшкән, әйтерһең дә, хәҙер елкәһенән эләктереп ала ла фашлай. Ысынында, Ғимрандан түгел, үҙенән ҡаса ине ул. Баҙрап торған ут күҙле өйҙәр күренмәй, эттәр абалауы ишетелмәй башлағас, ҡатын үҙенең инде ҡасабанан күпкә алыҫлашыуын аңлап ҡалды. Төн йөҙө булһа ла ыңғайлаған юлын таныны ул: ауылына ҡарай сыҡҡан бит. Шул асыштан тағы ла ярһып йүгерә лә, тамам хәле бөтһә, аһылдай-аһылдай атлауға күсә, унан тағы сәсәгәнсе йүгерә. Шулай йүгерә-атлай тиҫтәнән ашыу саҡрымдарҙы һанай. Ә күҙ алдында һаман шул бер күренеш: бала тотҡан Ғимрандың бәхетле йөҙө. Эш өҫтөндә тимәгән, йоҡларға өйөнә ҡайтҡан бит әле. Етмәһә, ғүмерҙә күрелмәгәнсә, ир башы менән бала ҡойондороп йөрөй. Һыуын түгә, иҙәнен һөртә. Ул бит һуң, ике йылдан ашыу ҡатыны булып йәшәп тә ундай Ғимранды белмәне. "Һинһеҙ йәшәй алмайым, бары ла мөхәббәттән булды", - тип инәлеп-ялбарып күндергәйне бит кейәүгә сығыуға ла теге хәшәрәт хәлдән һуң. Үҙара саҡтарында ла "Жаныйым" тип кенә торҙо, хатта ошо ҡыҙҙың ауырлы булыуы асыҡланғас та, "Саҡ ҡына түҙ, һинһеҙ миңә тормош юҡ", тип ялбарҙы, аулаҡта һағалап, күрешеү эҙләп аптыратты. Әле, балаһы тыуғас, донъяһын онотҡан. Шул саҡ Хәтирә өйҙәренә килеп инһә лә танымай, кем икәнен аңламай торор ине. Бөтә аңын, ғаләмен ҡулындағыһы томалаған ине. Бәхетле ине ул! Нисек кенә ышанғыһы килмәһен, нисек кенә әсе булмаһын, тойомлағаны хаҡ - Ғимран әлеге ҡатыны һәм балаһы менән бәхетле.

Ә ниңә әсенә әле Хәтирә? Үҙен көскә тотоп йәшәтте, иркә-наҙҙарын күҙ йомоп ҡабул итергә өйрәнде, донъяһын күтәреп һуғып сығып китеүҙән саҡ тыйылып ғүмер итте түгелме һуң? Таң яҡтырыр яҡтырмаҫтан уянып, килер көнгә әҙерләнде, кис төшөүгә, һағайып төндө көттө. Теләктәрен тыйҙы, быуҙы, башын эйелергә, күнергә мәжбүр итте. Йөрәгенең төбөндә һурып алмаҫлыҡ булып тамырланған ғәзиз һынды ла онотоорға маташты. Һәм булдырғайны кеүек тә һуң. Тик Хоҙай Тәғәлә бына ошолай итеп үҙенсә хәл итте лә, шул әҙәмдең ҡатыны булыуҙан ҡотҡарғайны түгелме уны? Бына ул азат, ирекле ҡош кеүек, хатта төн йыртып йөрөп ята, ҡырын ҡараған кеше юҡ. Ниңә улай тулай йәне, ниңә һыҡтай бынау күкрәк тәңгәле? Тапалған ғорурлыҡтанмы? Улай тиһәң, ул ғорурлыҡ күптән саң араһында уға ҡалһа. Кәмһенеүҙәнме? Кәрәкһеҙлегеңде, яңғыҙлығыңды тойоуҙанмы?

Таңдан алда барып төштө Хәтирә ауылына ауышҡан тау итәгенә. Һаман мейеһен быраулап шаулатҡан уйҙар шауҡымынан арына алмайынса, атланы ла, битенә, беләгенә тал-сыбыҡтың әсеттереп һуғыуын да, балтырҙарын ҡара кесерткән көйҙөрөүен дә тойманы. Шаптырлап һыуға барып ингәс кенә туҡтап ҡалды. Аһ-һ! Йылғаға килеп төшкән бит. Туфлийы-ние менән шаршыла баҫып тора. Һалҡын ағым ҡурып алып, аҡылына ҡайтарҙымы, ҡатын ярға сығып сүгәләп, түңәрәк зәңгәр шарҙың аҡһыл нурҙары аҫтында ап-асыҡ булып шаҙраланып ятҡан ағымға ҡарап ҡалды.

Шаршы! Бетерә шаршыһы... Уны ошо ерҙә тыуҙырған, үҫтергән йылғаның йүгерек бөҙрә тулҡындары. Кендеген ҡырҡҡас, уны ошо шаршы һыуында ҡойондорғандар, йәне сығып осҡан тәнен дә ошо уҡ шаршы һыуы менән паклап һаласаҡтар. Нисә быуат, нисә быуын ошо ерлек кешеләре ғәҙәт иткән һәм уның менән дә шулай буласаҡ. Нисә быуат, нисә быуын был йылға һыуын һылулағандар зар-ҡайғынан йәки яҙмышында яуап эҙләп, ошо шаҙра ялтырауыҡтарға төбәлгәндер. Хәсрәтемде ағын һыу алып китһен, тип, серҙәремде шаршы тыңлаһын, тип, яр ситенә килеп ҡолағандыр. Шаршы!.. Алып китһәңсе уның да зарҙарын. Йәнен иҙгән, йөрәген талаған хәсрәттәрен ағыҙһаңсы... Ниңә өндәшмәйһең? Танымайһыңмы әллә? Һиндә, ошонда, итәге менән селтей һөҙөп, ҡырсынташтарыңды йыйып уйнаған үҙең кеүек йүгерек, тиктормаҫ ҡыҙсығыңды оноттоңмо ни? Нәҙек бармаҡтары менән ҡомоңдо тырнап алып, ҡомған ялтыратҡан көләкәс үҫмер ҡыҙҙы хәтерләмәйһеңме? Итәк бөрөп, ҡолас ташлап кер сайҡаған, сая ҡарашлы, үткер телле һылыуыңды иҫләй алмайһыңмы? Уның эшен бөткәндән һуң әлегеләй шаршыңа ҡулын тығып, сер-хыялдарын һөйләүен, теләктәр теләп, бит-ҡулын сайыуын, йылға һыуы эсемгә бармаһа ла, һине үпкәләтмәҫ өсөн услап һыуыңды уртлауын, ризалығың өсөн таш араһына зыңҡылдатып баҡыр аҡса ташлауҙарын онота булдыңмы?.. Юҡтыр... Ана бит, һалҡынлығыңдан яйлап ҡыҙыңдың томаланған аңы асылды. Йөрәгендәге ҡара көнсөллөк аҡ беләктәре, нәфис бармаҡтары аша һурылып сығып, ағым йүгеректәрендә ирене, үҙен йәлләгән, кәмһеткән бахыр уйҙары таралып, ғорурлығы уянды. Йән инде уға, сәм менән ғәм өҫтәлде. Зәңкеп туңған ҡулдарын һыуҙан алып, туҙып ялбыраған сәстәрен һыйпап рәтләне лә, яйлап ҡына ҡалҡынып тороп, итәгенә һарылған ҡырсынташтарҙы ҡағып төшөрҙө һәм тамам тынысланған, хатта, бөтөнләй бушанып, туғарылып ҡалғандай булып ауылға сыҡҡан тыранса күпергә ыңғайланы.

Беләгенә һыңар биҙрәһен элеп алып, ауыҙын ябып иҫнәп, йыбанып ҡына ялан кәртәгә ыңғайлаған йоҡоло әсәһен тертелдәтеп, ялп итеп арҡы ҡапҡанан килеп инде Хәтирә.

- Һаумыһың, әсәй!

Ҡыҙын таныған Сәғиҙә, быға тиклем ишеткән-белгәндәрен эсенә йыйып түҙеп йөрөгән булһа, әле килеп, ғәзиз балаһы күҙе алдына килеп баҫыуҙан күңеле тулып, буҙлап илап ебәрҙе. Бигерәк йомшаҡ инде әсәһе, ҡайғыны ла, шатлыҡты ла йөҙ һыуы менән йыуа торған кеше.

- А-ай, ниндәй ҡайғың бар? - тас атаһы булып өндәште ҡыҙы, уның һүҙҙәре менән. Йомшаҡлыҡты яратмаған Саҙрытдин ҡарт ҡатынының күҙе дымланғанда шулай тип бурылдап ҡуя торған.

- Эй, аллам, балаҡайым, көйөп-янып ҡына көн итеп ятаңмы-ы, - Сәғиҙә биҙрәһен шалтыратып төшөрөп ебәреп, үсеккән бала кеүек шундағы бүкәнгә сүгәләп, мал араһына кейгән керле алъяпҡыс итәге менән күҙ-битен һыпырҙы. - Ы-ы-ыһ... Баламды... Ҡороғор! Йөҙө йөҙтүбән киткер, түпәһе уйылғыр абышҡа! Алма кеүек баламды әрәм итте... Бер әрәхәт күрмәһен әйҙә, сәнселгер!

(Дауамы бар).

✓ ***Кеше китап уҡығанда әҫәрҙәге ваҡиғалар, геройҙар өсөн борсола, шатлана, шул ваҡытта мейе әүҙемлеге күтәрелә. Йәғни, аҡ ҡағыҙҙан уҡығанда беҙҙең мейе лә, тойғолар сығанағы булған йөрәк тә күнекмәләр яһай булып сыға...***



*КӨЛГӘНГӘ - КӨЛКӨ*

# БҮРЕЛӘР МЕНӘН ОСРАШЫУ



Күптән түгел мине бер йәш ауылдашым туҡтатып, өндәшә ҡуйҙы: "Хәҙер бүре тураһында күп яҙалар, күп һөйләйҙәр. Минең менән булған хәлде лә гәзиткә яҙып ебәр әле". Яҙырмын, тип һүҙ биргәс, тәүҙә тыңларға тура килә инде.

Кәләштең алдау-шаяртыуы тамам теңкәгә тейҙе бит, әй. Йәнәһе лә, иртән мал ҡыуған мәлдә уға көн дә бер бүре осрай. Йәнәһе лә, ул көн һайын ҡурҡа-ҡурҡа мал ҡыуа. Йәнәһе лә, ул бүре һыйырҙы ғына түгел, уның үҙен дә ашап ҡуйыуы бар. Имеш, былай йоҡлап ятһам, кәләшһеҙ ҙә тороп ҡалырмын әле. Фәлән-фәләндең йәп-йәш кәләшен йәп-йәш көйөнсә генә бер бүре ашап киткән икән, тип һөйләһәләр, ояты ни тора. Билләһи, уның һөйләүенән хатта көлкө килеп китә. Һиҙеп торам, кәләш ҡырын атып тура тейгеҙергә маташа. Йәнәһе лә, мин ир башым менән таңдан тороп уға мал ҡыуышмайым, ә рәхәтләнеп йоҡлап тик ятам. Тураһын ғына әйтһә лә тыңлайым бит инде.

Сыҙаманым, бер көн иртәнсәк һыйырҙы үҙем ҡыуырға булдым. Кәләштең шым ғына тороп киткәнен көтөп бер аҙ ята биргәс, йәйләп ҡына килеп торҙом. Киреләдем, һуҙылдым. Йәйләп ҡына тышҡа сыҡтым. Ҡара әле, тышта апаруҡ һалҡын икән. Быйыл яҙ һуңлап килә шул. Һарай яғында кәләштең һөйләнә-һөйләнә һыйыр һауғанын тыңлап тороуы былай күңелле генә икән, әй. Әйткәндәй, беҙ яңыраҡ ҡына айырым донъя көтә башланыҡ. Өйләнеү менән атай беҙҙе тиҙләтеп айырым сығара һалды. Өйөбөҙҙөң урыны былай матур. Ул ауыл ситендә генә урынлашҡан. Беҙҙең өйҙән һуң урман башлана китә.

Ул арала кәләш тә һыйырын һауып бөттө. Ул минән һоҡланыулы ҡараштарын айыра алмай (ир һыйыр ҡыуа!) оҙатып тороп ҡалды, ә мин һәлмәк кенә баҫып, һыйырҙы көтөүгә ҡыуып алып киттем. Әммә оҙаҡ ҡыуып барырға тура килмәне минә. Бер мәл атлар-атламаҫ ҡына барған һыйырым ҡапыл ғына туҡтаны ла, урман яғына күҙ һалып алғас, ауыл яғына торҙо ла сапты. Аңғармай ҙа ҡалдым. Улай ҙа була икән, тип ҡарап оҙатып тороп ҡалдым мин уны. Ә шулай ҙа һыйырҙы кире бороп алып килер кәрәк, тигән уй башҡа инеп тә сыҡманы. Ауыл малына ҡушылып көтөүгә килер әле. Ә кәләшкә инде: "Ҡыуҙым һыйырҙы, көтөүгә алып барып еткерҙем", - тип әйтермен дә ҡуйырмын. Бындай шылдырыуҙар беренсегә түгел бит инде.

Ярай, һыйырҙы "ҡыуҙым". Аллаға шөкөр. Ә бына этемә нимә булған? Уныһы инде урман яғынан ен һымаҡ сабып килә. Һай-һай, шәп тә саба икән. Артынан ҡойондар ғына уйнай. Минең эргәгә килеп етә башлау менән ул тая-тая минән борола башланы. Минә саҡ-саҡ төкөмәй, эргәнән генә үтеп китте. Хатта мин бер аҙ интайып тороп ҡалдым, шикелле. Эттән елдәр иҫте, ә минең салбар балағына былтыр ҡойолған ҡайын япраҡтары ғына йәбешеп ҡалды. Бына шундай юғары тиҙлектә саба ине минең этем, үәт. Уны күҙ ҡараштарым менән оҙатып ҡалдым да, алға ҡарап ебәрһәм - Аллам һаҡлаһын, минә ҡарай ике бүре сабып килә! Ни эшләргә? Исмаһам, ҡулда таяҡ юҡ бит, әй. Шул мәл күҙ ҡараштарым ерҙә ятҡан һәлмәк ташҡа төштө. Күңел күтәрелеп китте. Уны эләктереп алдым да саптым бүреләргә табан! Хәҙер күрмәгәндәрен күрһәтәм мин уларҙың! Баштарын уя бирәм! Минән ҡасып ҡотола алмаҫтар, урман санитарҙары! Әммә бүреләр минән ҡасырға уйламайҙар ҙа, шикелле. Ярай, үҙ баштарына ғына саба былар минең ҡаршыға. Ҡыҫҡаһы, улар минә табан саба, мин уларға табан осам.

Минә яҡыная башлағас, бүреләр сабыуын ҡапыл туҡтатып, арт яғына ултырып, минә ҡаршы шыуып килә башланылар. Дымлы ер өҫтөнән сана менән шыуып килгән һымаҡ килә былар. Мин, аптырап, туҡтап ҡалдым Ә таш тотҡан ҡул һаман өҫтә әле. Шул мәл шыуып килгән ике бүре минә ҡул һуҙымы ғына аралыҡта туҡтап ҡалды. Нисек шулай туҡтай алғандарҙыр инде, уныһын һорашмағыҙ, барыбер белмәйем. Ә мин инде үҙем ҡаттым да ҡалдым. Йә, хәҙер мине ситтән ҡарап тороп, күҙ алдына килтерегеҙ инде. Урман ситендәге аҡланда тып-тын ҡалып, ике бүре ултыра. Ә улар алдында бер аҙ алға эйелгән һәм таш тотҡан ҡулын күккә сөйгән бер йәш ир баҫып тора! Көлкө, ибет. Ә ул мәлдә минең бер ҙә генә көлкө килмәй ине. Тән ҡатҡан, ә мейелә бер генә уй ҡайнай. Ни эшләргә? Әллә ҡасырға, әллә тик торорға! Әллә олорға, әллә көләргә! Әммә бүреләргә бер генә лә таш менән тондорғо килмәй, әй. Йәлләтә. Ҡабырға-фәләнен имгәтә һуғып ҡуйырмын, тип ҡурҡам. Ситтән генә уҫал күренәм бит мин. Ә ысынында иһә, күңелем бигерәк нескә шул минең. Күпме торғанбыҙҙыр инде ошолай, белмәйем. Бындай сетерекле мәлдән мине ата бүре ҡотҡарҙы. Бер мәл ул минә ауыр ҡараштарын төбәп, ауыҙ сите менән генә ырылдап ҡуйҙы.

- Ыр-р-р-р!

Минә шул ғына ла етте. Ҡапыл ғына боролдом да остом өй яғына. Ошо мәлдә минең эргәлә эт (нишләп ыуаҡланып торам әле - ат булһын, әйҙә) сабып барһа, биллаһи, уны тапап уҙып китер инем. Ҡайҙан инде мал ҡыуған ҡапҡаны асып тороу. Һайғау кәртәләрҙе бер генә һикереүҙә осоп үттем.

Минең сабып килеүҙе кәләш ҡарап торған икән. Аласыҡҡа инеп, сәй ҡуйған да, минә күҙ һалырға сыҡҡан. Уның күҙ һалыуы минең ен һымаҡ сабып килгән мәлгә тура килгән. Ә бына нишләптер теге ике бүрене күрмәгән. Минән күҙен ала алмағандыр инде. Бигерәк матурмын бит. Мине ул һыны ҡатып көлөп ҡаршы алды. Йәнәһе лә, мин ихласлап һабантуйға әҙерләнә башлағанмын. Тик иртәрәк түгел микән. Көн дә былай йүгерә-һикерә башлаһам, быйылғы һабантуйҙа минә етеүсе булмаҫ инде. Ҡыҫҡаһы, килештерҙе.

Мин үҙемде саҡ тынысландырып, ҡулдарҙы урман яғына күрһәтеп, телде көскә әйләндереп, бер генә һүҙ әйтә алдым.

- Бүре!

Кәләш тәгәрәп ятып көлә. Ул мине шаярта тип уйлай.

Мин бармаҡты бөгөп уға күрһәтәм.

- Икәү!

Кәләш хәҙер туҡтай алмай көлә. Ә мин тотлоға-тотлоға әйтә ҡуям.

- Ырррр, тип әйтте.

Был һүҙҙәрҙән кәләш көлөүенән хатта бөгәлөп-бөгәлөп китә. Көлөүенән көскә туҡтатып, минән ҡабатлап һорай.

- Нимә тип әйтте?

Ә мин ысын күңелдән яуап ҡайтарам.

- Ырррр, тип әйтте.

Һәм өҫтәп ҡуям.

- Атаһы әйтте, инәһе мыҫҡыл итеп көлөп ултырып ҡалды.

Хәҙер кәләш көлөүенән бөтөнләй тыйыла алмай. Саҡ тынысланып алғас ҡына минә өндәшә.

- Әртист кенә булып тыуғанһың бит һин. Бигерәк килештереп ебәрһең. Әйҙә, ин сәй эсергә. Әкиәтеңде сәй эскәндә һөйләп бөтөрһөң. Аҙаҡ ҡайныма барып һөйләрһең. Бары тик ике бүренең санала шыуып килгәнен һөйләгәндә буталып ҡына ҡуйма.

Һәм ҡулға күрһәтә.

- Исмаһам, ҡулыңдағы ташыңды ташла. Этлеккә тиһәң, башың шәп эшләй шул һинең. Кеше ышандырып, таш тотоп алған бит әле.

Ҡулға ҡараһам, теге һәлмәк таш һаман ҡулда икән...

Бына шулай, ағай. Һыйыр ҡыуам, тип, саҡ ике бүренән ашалманым. Ярай, кәләшкә бер бүре осраған. Ә минә бит - икәү! Фәлән-фәләндең йәп-йәш кейәүен йәп-йәш кенә көйөнсә ике бүре ашап киткән икән, тип һөйләһәләр, ояты ни тора. Туҡта әле, ә һеҙ нишләп көләһегеҙ, ағай? Ярай, кәләш борон-борондан минә ышанмай, минән көләп йәшәне. Исмаһам, һеҙ улайтмағыҙ инде. Ә гәзиткә матур итеп яҙығыҙ. Әйткәндәй, минең бер һорауым бар ине. Минә бит тик ата бүре генә ырылданы, ә инәһе мыҫҡыл итеп көлөп кенә ултырҙы. Һорауым ошолайыраҡ ине - тәбиғәттә лә шулай атайҙары, донъя көтәм, тип яныр йөрөй, ә инәләре уларҙан көлөп ултыра микән!?

Көлә-көлә китеп барҙым мин был йәш ирҙән. Ә һүҙ биргәс, яҙырға тура килде инде. Ышанағыҙмы-ышанмайығыҙмы, уныһы инде һеҙҙең ҡарамаҡта. Ә, бәлки, кемдер уның һорауына ла яуап бирә алыр.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

*ӘЙҘӘГЕҘ, УҠЫЙЫҠ!*

# КИТАП МИНЕ КҮТӘРҘЕ



Беренсе класҡа биш йәштән уҡырға бирҙеләр. Уҡырға төшкәс, октябрь айында алтым тулды. Балалар баҡсаһы тигән нәмә булманы, күп балалы ғаиләлә үҫтем, хәреф-һан түгел, мин хатта төҫтәрҙе лә айыра белмәй инем. Уҡыу ныҡ ҡыйын бирелде, уҡытыусы уҫал ине. ЗПР тип күптән ҡул һелтәнгән бала инем инде. Дәрес әҙерләтеү тигән нәмә юҡ, китап-дәфтәр тотоп ултырыу беҙҙең өйҙә ялҡаулыҡ һанала торғайны. Өйгә ҡайтҡас, портфелде сервант башына уҡ ырғытып ҡуям, сөнки бәләкәй ҡустылар дәфтәрҙәрҙе табып, яҙып бөтә, китаптарҙы йырта. Әсәйҙең мәктәп йыйылышынан ҡайтыуына йәшенеп ултырам, сөнки тәртип яғы ла ныҡ насар булды.

4-се класта уҡығандамы икән, китапхана янында уйнап йөрөнөк. Колхоз заманында уҡ һалынған бер ҡатлы ағас йорт электән бар ине ул. Өшөп киткәс, кереп йылынырға булдыҡ. Китапханасы апай беҙҙе бик мөләйем ҡаршыланы, беҙҙә тик ултырырға ярамай, тип, һәр беребеҙгә китап тотторҙо. Ҡыуып сығармаһын был, тип, ҡыланып ҡына китап алып ултырған булдым. Йылынып киттем, ҡыҙыулыҡ артты. Һүрәттәрен ҡарап сыҡтым. Рәссам Майя Зыяи сағыу иллюстрациялар төшөргән балалар өсөн шиғырҙар йыйынтығы ине ул. Хәреф таный белөм, уҡыуын бик ырата алмайым, һүрәттәрҙә төшөрөлгән геройҙарҙың яҙмышын белге килә, уҡый башланым, мауыҡтырғыс ине. Бер битте уҡып бөттөм, икене... Былай булғаны юҡ ине, күңелемә май булып ятты ундағы юлдар. Уҡып бөткөм килә, оҙаҡ ултырып ташланылды, инде унайһыҙ, ҡайтыр кәрәк. Бәәй, китапты яҙҙырып өйгә алып ҡайтырға мөмкин икән дәбаһа! Өйҙәге ул кисем китап уҡып үтте, иртәгәһен тағы барҙым, китапты тапшырып, икенсе китап алдым. Был донъя эскән атай, илаҡ ҡустылар, уҫал уҡытыусы, маҡтансыҡ класташ ҡыҙҙар, гел ваҡыты булмаған әсәй менән генә сикләнмәй икән. Хайуандар, әкиәттәр, шиғырҙар донъяһына баштан-аяҡ сумдым. Шул уҡ ҡышты китапханала булған барлыҡ балалар китаптарын уҡып сыҡтым, ҡалыныраҡтарына, үҫмерҙәргә тәғәйенләнгәненә күстем.

Бер ваҡыт туған тел дәресендә минутка уҡыйбыҙ шулай. Минең фамилиям Я-ға башлана, исемлектә иң һуңғыһы. Ҡайны берҙә, барыбер 20 һүҙҙән арттыра алмай ул, тип уҡытмай ҙа торғайнылар. Был юлы мин, 4-се класс балаһы, 90-100 һүҙ уҡыған отличниктарҙан уҙҙырып, минутына 120 һүҙ уҡып ташланым. Уҡытыусым, һы, тип ҡуйҙы. Ышанмай, тағы бер өлөштә уҡытып ҡараны. Тағы ла шундайыраҡ һөҙөмтә сыҡты. Ысынлап та, китапты эстән булһа ла күп уҡығас, дикция ныҡ үҙгәрә икән. Дикция ғына түгел, уҡығаныңды аңлау, һығымта яһау, уйлау даирәһе киңәйә. Мәктәптә уҡыу яғы йәйләп булһа ла яҡшы яҡҡа үҙгәрәне, сиректе ике "дүртле" билдәнән тамамланым, быға тиклем шау 2-ле, 3-лә була торғайны.

Бишенсе синыфҡа интернатҡа уҡырға киткәс, бөтөнләй 4-легә генә өлгәшә башланым. Мине яратмаған башланғыс класс уҡытыусыһы - уҫал апай, класташтар, минең күңелһеҙ бала сағым - барыһы ла ауылда тороп ҡалды. Яңы тормош, интернат, мине насар уҡыусы итеп белмәгән яңы уҡытыусылар ҙур өмөт бағланы, маҡтау һүҙҙәрен йәлләмәне. Үҙемде яҡшы яҡтан күрһәтергә, абруйымды боҙмаҫҡа - һуғышмаҫҡа, бар көсөмдө һалып яҡшы уҡырға тырыштым. Тырышлыҡтар бушҡа китмәне, мәктәпте алтын миҙалға тамамланым, ике юғары уҡыу йорто бөттөм. Әлеге көндә ныҡлы әйтә алам, минең шәхес булып формалашыуымда китаптар ныҡ ҙур роль уйнаны.

"Киске Өфө" гәзитендә яңыраҡ шундай фекер уҡығайным. Немец геронтология һәм гериатрия йәмғиәте ғалимдары йәшлекте, хәтерҙе һәм теүәл аҡылды һаҡлар өсөн көн дә бер генә бит булһа ла китап йәки гәзит уҡырға кәрәк, ти. Ғалимдар аңлатыуынса, аҡ ҡағыҙҙан хәрефтәр сүпләү мәлендә организмдағы ике нейрон араһында, йә нейрон менән икенсе бер күҙәнәк араһында бәйләнеш барлыҡҡа килә, бына шул бәйләнеш кешенең хәтере яҡшырыуға, башты эшләтеүгә, хатта йәш көйөнсә һаҡланыуға булышлыҡ итә икән. Кеше китап уҡығанда әҫәрҙәге ваҡиғалар, геройҙар өсөн борсола, шатлана, шул ваҡытта мейе әүҙемлеге күтәрелә. Йәғни, аҡ ҡағыҙҙан уҡығанда беҙҙең мейе лә, тойғолар сығанағы булған йөрәк тә күнекмәләр яһай булып сыға...

Ғәжәп хәл, эйеме? Үҙ йәшәйешебеҙҙе, фекерләүебеҙҙе яҡшы яҡҡа үҙгәртә алыуыбыҙ тик үҙебеҙҙән генә тора! Хатта йыбанмай ошо һүҙҙәрҙе уҡыған арала ла һеҙҙең мейе эшмәкәрлегегеҙ ныҡ әүҙемләште, һиҙҙегеҙме? Шуның өсөн китаптарҙы, гәзит-журналдарҙы күберәк уҡыйыҡ, тип әйтмәксе булғайным.

**Билдәһеҙ автор.**
**"Бәйләнештә" сайтынан.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҠӘҺҮӘ УРЫНЫНА... баҫҡыстар

■ Иртәнсәк уяныу өсөн ҡәһүә эсәһегеҙме? Бынан да яҡшыраҡ ысул бар, ти ғалимдар. Джорджия университеты хеҙмәткәрҙәре үткәргән һынауҙар күрһәтеүенсә, 10 минут баҫҡыс буйлап өҫкә күтәрелеү һәм кире төшөү кофеинлы эсемлектәргә ҡарағанда ла нығыраҡ организмды уятып, яңы көнгә дәртләндереп ебәрә икән. Һынауҙарҙа студенттар ҡатнашҡан. Уларҙың барыһы ла йоҡолары туймауға зарланған һәм ысынында ла улар тәүлегенә 6,5 сәғәт кенә йоҡлаған. Ҡайһы бер көндәрҙә улар ҡәһүә эскән, ҡайһылыр көндә баҫҡыстан йәйәү йөрөгән. Ҡатын-ҡыҙҙар яҡынса 30 ҡат йәйәү күтәрелгән. Ҡатнашыусылар шулай уҡ тест һорауҙарына яуап биргән. Физик күнегеүҙәр һәм кофеин хәтергә, иғтибар туплауға бер нисек тә тәьҫир итмәгән. Әммә баҫҡыстар буйлап йәйәү йөрөү эшкә һәләтлелекте арттырған.

■ Ғалимдар раҫлауынса, уңыштың 20 проценты ғына кешенең аҡылынан тора. IQ термины менән бер рәттән хәҙер EQ - эмоциональ интеллект тигән термин барлыҡҡа килде. Бына фекерләү һәләтенең тап ошо төрө беҙҙең уңышлы булыу-булмауыбыҙға яуаплы икән. Һүҙ кешенең үҙ хис-тойғолары менән идара итеү, позитив була һәм маҡсаттар ҡуя белеү һәләте тураһында. Тимәк, логик фекерләй алыу һәм белем булыу ғына кешегә уңыш алып килмәй. Эмоциональ интеллект түбән булһа, психосоматик ауырыуҙар барлыҡҡа килеү хәүефе арта.

■ Калифорния университеты ғалимдары ауырлы саҡта смартфон ҡулланмаҫҡа кәңәш итә. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, әсәләре йыш смартфон ҡулланған балаларҙың 28 проценты гипер әүҙемлек менән яфалана. Лондон университеты ғалимдары гипер әүҙемлек дөрөҫ туҡланмауҙың һөҙөмтәһе, тигән фекерҙә. Бигерәк тә ауырлы саҡта кондитер изделиелары ашау быға килтерә ала.

■ Фастфуд менән артыҡ мауығыу балаларҙа астма һәм экзема сирҙәренең барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә. Ғалимдар раҫлауынса, был ризыҡтарҙағы зарарлы матдәләр ауыр формалағы астманың барлыҡҡа килеү хәүефен үҫмерҙәр араһында - 38, ә 6-7 йәшлек балалар араһында 27 процентҡа күтәрә. Ул шулай уҡ экзема һәм риниттың сәбәпсеһе булып тора. Фастфудты емеш-еләк, балыҡ, ҡуҙаҡлылар менән алыштырыу уның әҙемтәләрен кәметеүгә һәм был сирҙәрҙе иҫкәртеүгә булышлыҡ итә.

■ Тормош юлдашы эҙләгәндә ир-егеттәр генә түгел, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа иң тәүҙә кешенең тышҡы ҡиәфәтенә иғтибар итә, тип белдерә Көнсығыш Коннектикут университеты белгестәре. Тикшеренеүҙәрҙә ҡыҙҙары менән әсәйҙәр ҡатнашҡан. Әсәйҙәр ғалимдар тәҡдим иткән бөтөн ир-егеттәр ҙә ҡыҙҙарына пар булырҙай, тигән фекергә килгән. Ҡыҙҙар иһә нығыраҡ һайланған һәм уларға күберәк тышҡы ҡиәфәте матур булған ир-азаматтар оҡшаған. Шул уҡ ваҡытта, әсәйҙәр ҙә, уларҙың ҡыҙҙары ла кешенең мөләйем, изге күңелле булыуы тышҡы ҡиәфәтенә ҡарағанда өҫтөнөрәк тип белдергән. Шулай ҙа матур сифаттарға эйә булған, әммә йәмһеҙ ир-ат уларҙа ғаилә ҡороу өсөн уңайлы вариант тип табылмаған.

ХӘТЕРКИТАП

# АУЫРЛЫ КӨЙӨ...

## ураҡ урған әсәйҙәр

**Һаумыһығыҙ, редакция хеҙмәткәрҙәре! Һеҙҙең гәзит дөрөҫ йәшәргә өндәүсе, өйрәтеүсе, рухи көс биреүсе бер сығанаҡ миңә. Аҡыллыға - ишара, тигәндәй, аҡыллы кәңәштәрен дә еткерә ул. Иғтибар менән уҡы ғына. Аҡыллыға - ишара, тип, мин дә бөгөнгө заман ауырлыҡтарына бирешмәҫкә өндәмә рәүешендә әсәйебеҙҙең ауыр яҙмышы тураһында бәйән итергә булдым.**



Әсәйем 3 йәшендә генә әсәйҙән ҡалған. Атаһы Беренсе донъя һуғышында йөрөгән, пленға эләккән, тыуған иленә, Мәләүез (Элекке Йомағужа районы) районы Кинйәбай ауылына (ул ауыл хәҙер Нөгөш һыуһаҡлағысы аҫтында ҡалды) бер нисә йылдан һуң ғына әйләнеп ҡайтҡан. Был осорҙа әсәйем үгәй әсә ҡулында ыҙа сиккән. Шул хаҡта ул: "Үгәй әсәй иртән һыйыр һауған саҡта мин ҡырауҙа, ялан аяҡ көйө, быҙауҙы һыйырға ебәрмәй, ҡосаҡлап, тотоп тора торғайным. Көйәнтәләп һыу ташыһам, биҙрәм ергә тейеп, һыуым түгелеп бөтә ине", - тип хәтирәләрен һөйләп ала торғайны.

Халыҡ яҙмышында ил яҙмышы сағыла. Бер кеше яҙмышында - дәүер сағылышын күрергә була. Атай-әсәйемдең тормош юлын уйлаһам, һоҡланам да, ғорурлыҡ тойғоһон да кисерәм. Улар, ябай ауыл балалары, ҙурайып, егет һәм ҡыҙ булғас, өйләнешкәндәр ҙә, бәхетле киләсәк тураһында хыялланғандар. Барыбыҙ ҙа хыялланабыҙ. Атайым оҫта механизатор, ат тәрбиәләү белгесе булһа, әсәйем - егәрле, эшлекле, әҙәпле, атайыма лайыҡлы ҡатын булған. Илдә колхозлаштырыу башланғас, атайым, беренселәрҙән булып, бер нисә баш ат, һыйыр, һабан биреп, колхозға ингән. Шул ваҡытта ул дөйөм хужалыҡҡа алһыҙ-ялһыҙ ер һөргән, иген сәскән, урған, бесән әҙерләгән. Әсәйем дә колхоз эшенән ҡалмай: йәй баҫыуҙа иген утауҙа, көҙ буйы ураҡ менән иген урыуҙа, ырҙында иген таҙартыуҙа була. Һуғыш башланғас, атайымды, оҫта механизаторҙы һәм ат белгесен, бронь менән һуғышҡа ебәрмәй торалар. Атайым аттарҙы тейешле тәрбиәләп, ҡарап, һайлап, һуғышҡа оҙата. Аҙаҡ үҙе лә һуғышҡа алына. Күп тә үтмәй, яраланып, Өфөләге госпиталгә эләгә. Яраһы уңалыр-уңалмаҫтан, Өфөләге хәрби заводҡа эшкә ебәрелә. Фронт өсөн ҡорал эшләй. Ә әсәйем 5 бала менән ауылда донъя көтә. Ул бала ҡарай, алһыҙ-ялһыҙ колхозда тир түгә.

Һуғыш бөтһә лә, атайымды өйгә ҡайтарырға ашыҡмайҙар. Тик 1947 йылдың февралендә, аяғындағы яраға һыуыҡ тейеү сәбәпле, гангрена башланғас ҡына, ҡайтарып ебәрәләр. Һыуыҡ завод, һыуыҡ иҙән, өҫкә йүнле кейем юҡлығы, ашап-эсеүҙең дә рәтле булмауы касафаты була инде был. Өҫтәүенә, 1947 йылда ҡот оҫҡос аслыҡ башлана. Атайым, һауыға алмай, үлеп китә. Аслыҡтан, ауырыуҙан, атайым менән бер көндө 9 йәшлек ағайым вафат булып ҡуя. Аслыҡта, ҡәбер ҡаҙырға ла кеше булмағас, атайым менән ағайымды бер ҡәбергә ерләгәндәр. Икенсе көнөнә 11 йәшлек ағайым үлгән. Ул ваҡыттағы ҡайғыға, ауырлыҡҡа үҙе етем үҫкән 38 йәшлек әсәйем нисек түҙгәндер? Шул йәйҙә әсәйемдең атаһы менән бер туған ағаһы ла үлгән. 17 һәм 15 йәшлек ҡыҙҙары, 7 йәшлек улы менән ауырлы ҡалған әсәйем донъя көтөргә ҡайҙан көс тапҡандыр? Ауырлы булһа ла, ураҡта йөрөгән. "Эйелгәндә, ҡорһағым ергә тейә-тейә йөрөй инем. Ашарға бер нәмә лә юҡ, өйҙә һыу ғына. Йылғанан алып килә алмаһаң, ул да юҡ", - тип һөйләй торғайны әсәйем. Атай донъя ҡуйғандан һуң 3 ай үткәс, мин тыуғанмын, дөрөҫөрәге, ике ҡыҙ бала донъяға килгән. Хоҙай Тәғәлә ғүмер биргәс, үлмәй ҡалғанбыҙ. Хеҙмәт яратып үҫтек. Иҫ белгәндән алып эшләнек: яҙ умырзая йыйып киптерәбеҙ, йәй - еләк, муйыл. Уларҙы тапшырып, аҡсаһына мәктәпкә кәрәк-яраҡ һатып ала инек. Һепертке бәйләп тә, арҡан ишеп тә тапшыра торғайныҡ. Унан йәй буйы бесән эшләүҙә ҡатнашабыҙ. Эшһеҙ йөрөмәнек. Өйҙә лә ярҙамлашып үҫтек. Ауылда башланғыс мәктәпте тамамлағас, 4-5 саҡрым алыҫлыҡта ятҡан күрше Нөгөш ҡасабаһына йөрөп уҡыныҡ, 10-сыны Нөгөш урта мәктәбендә тамамланыҡ. Буранда ла, һыуыҡта ла дәрес ҡалдырмаҫҡа тырыштыҡ. Әсәйемә сикһеҙ рәхмәтлемен: беҙ тороуға, көн дә күмер самауыры ҡайнаған булыр ине, ҡайтыуыбыҙға тағы самауырын ҡайнатып, ҡаршы алыр ине. Мейес тултырып икмәк бешерһенме, күрше-тирәгә ойоҡ бәйләп бирһенме, ауылдаштар сәк-сәк бешертергә алып китһендәрме - әсәйем һәр саҡ кешегә ярҙам итте, изгелек ҡылды, яманлыҡты, боҙоҡлоҡто белмәне. Йәшләй тол ҡалһа ла, бирешмәҫкә, беҙгә матур тәрбиә бирергә тырышты. Беҙгә үрнәк булды.

Хәҙер үҙем 5 бала әсәһемен, 6 ейәнейәнсәргә өләсәймен. Ауыр ваҡыттарҙа әсәйемдең тәжрибәһенә таянам. Вафатына 35 йыл үтһә лә, әсәйемә миңә рухи көс биргәне өсөн рәхмәт әйтәм. Етемлек арҡаһында мәктәптә уҡый алмаһа ла ул, тормош көтөү фәне, йәшәйеш ғилеме нескәлектәрен аңлап, уларҙы үҙләштерергә аҡылы еткән уның. Нисек һоҡланмау мөмкин!

Ябай, әммә эшсән, тырыш, инсафлы, сабыр холоҡло әсәйем һәр ваҡыт күңелем түрендә. Шундай әсәйҙәр һәр ваҡыт ил тотҡаһы булды. Иншалла, хәҙер ҙә арҙаҡлы ҡатындарыбыҙ, шәхестәребеҙ бар. Бирешмәҫбеҙ, Алла бирһә!

**Миңлегөл УСМАНОВА.**
**Баймаҡ районы**
**Иҫке Сибай ауылы.**

МИН БЕЛГӘН ЯУГИР



# ЯРАЛАР УҢАЛМАЙ ӘЛЕ...

**Һаумыһығыҙ, редакция! Һеҙгә алыҫ араларҙы яҡын итеп, Ханты-Манси автономиялы округынан яҙабыҙ. Гәзит уҡыусыларға атайым - Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, бихисап орден-миҙалдар кавалеры Ғайсаров Ғөзәйер Ғайсар улы тураһында бер кәлимә яҙып ебәрергә булдым.**

Ул 1914 йылда Салауат районы Илсекәй ауылында тыуған. Илдең тәүге механизаторҙарының береһе булған ул. Бөйөк Ватан һуғышы башланыу менән үҙен фронтҡа алыуҙарын һорап, бер нисә тапҡыр хәрби комиссариатҡа барған, тик уны һәр саҡ: "Һин бында уңыш йыйыуға кәрәгерәкһең", - тип, кире ҡайтарып торғандар. Шулай ҙа 1942 йылда хыялына ирешкән - Эшсе-крәҫтиән Ҡыҙыл армияһына мобилизацияланған. Минең Алина исемле ейәнсәрем, балалар баҡсаһында йөрөгән сағында әле, Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналған сарала ҡартатаһы тураһында бик матур, ентекле доклад һөйләгәйне. Уның докладында шундай юлдар бар: "Ҡартатайым 3 тапҡыр яралана. Ғүмере буйы ул үҙендә тәненә үтеп ингән дошман снаряды ярсыҡтарын йөрөтә. Һуғышта күрһәткән батырлыҡтары һәм ҡаһарманлығы өсөн орден-миҙалдар менән наградлана. Һуғыштан һуң минең ҡартөләсәйемә - Рафиға Ямалетдиноваға өйләнә. Улар 8 ул һәм ҡыҙға ғүмер бирә. Мин үҙемдең ҡартайым менән нык-нык ғорурланам", - тип тамамлана ейәнсәремдең сығышы.

Эйе, яңы быуын бөгөнгө аяҙ күгебеҙҙең ниндәй ауырлыҡ менән яуланыуын фаразлай ғына ала. Беҙҙең атайҙар, ағайҙар быуыны иһә, был ауырлыҡты үҙ яралары менән тойҙо. Илде илбаҫарҙарҙан ябай һалдаттар һәм офицерҙар, тылдағы ҡатын-ҡыҙҙар һәм ҡарт-ҡоро менән бала-саға берҙәмлеге, фиҙаҡәрлеге ҡотҡарҙы. Атайыбыҙ йәш сағынан мәргән һунарсы, теремек, хәрәкәтсән кеше булғанға күрә, бик һирәктәргә генә тәтей торған десантсы-парашютсылар батальоны составында Ленинград фронтына оҙатыла. Өс тапҡыр яралана ул.



"Атайыңдың миҙалдары күп ине: "За оборону Ленинграда" тигәне лә, "За боевые заслуги" исемлеһе лә, башҡалары ла... Тик уларҙы оло ағайың урамға тағып сығып, юғалтып бөтөрҙө", - тигәйне әсәйем. Атайым үҙе беҙгә, нисек итеп бер операция ваҡытында ҡамауға эләгеп, ҡаты яраланыуы тураһында һөйләп ала торғайны. Бәлки, уларҙы был тоҙаҡҡа һатлыҡ йәндәр алып барып эләктергәндер, тип уйлап ҡуям хәҙер. Бер мәл әсәйебеҙгә иренең үлеме тураһында хәбәр иткән "ҡара ҡағыҙ" ҙа килә. Әммә, бәхеткә күрә, ул дөрөҫ булмай сыға - атай ҡаты яраланып ҡына "ҡотола". Эх, был ҡотолғоһоҙ ҡан ҡойош... Атайыбыҙ ғүмере буйы һуғыш яралары һыҙлауы менән көрәшеп йәшәргә мәжбүр булды. Уң яҡ яурынында, ит урынына, тарамыш та, тире генә ҡалған ине. Тәнендә ҡалған дошман снаряды ярсыҡтары, умыртҡа һөйәге эргәһенә үтеп ингән пуля уны аҙ йөҙәтмәне. Ҡартайған көнөндә бер ярсыҡ, бөйөрө эргәһенә килеп сығып, май бөрөләп, шешеп торҙо. Табиптар: "Уны алыу атайығыҙҙың һаулығына зыян ғына итәсәк", - тип, операция эшләмәҫкә ҡарар итте. Ана шул снаряд ярсыҡтары менән, 1990 йылда үлеп китте инде атайыбыҙ. Ә күпме зар, күпме ҡайғы-хәсрәтте күңеленә һеңдереп йәшәгәндер беҙҙең атай-әсәйҙәр быуыны - уларға ғына билдәле...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Атайым тураһында зарланғым килгәндән яҙманым. Маҡсатым - бар кешелекте тыныс тормошҡа өндәү. Кеше был донъяға килгән икән, тыныс йәшәһен ине!**

**Рәфисә КӘРИМОВА.**
**Ханты-Манси автономиялы округының**
**Лянтор ҡалаһы.**

✓ *Әгәр ошо мәлдә башҡа варианттар юҡ икән, ошо мөмкинлеккә йәбеш, уның асылына төшөн. Әгәр әлеге ваҡытта глобаль эш ҡыйратырға мөмкинлегегеҙ булмаһа, бәләкәй аҙымдарҙан башлағыҙ. Иң мөһиме - башларға.*



КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП

# "ТАБИП БӘЙҒӘМБӘРҘӘН АЙЫРЫЛАМЫ?"



**Гәзитебеҙҙең 14-се һанынан башланған "Кинәйәне киңәйтеп" тип аталған рубриканы иғтибар менән уҡып барам. Минеңсә, автор Исмәғәзәм Исмәғилев динебеҙ ҡанундарын һәм уға ниндәй ҡараш булырға тейешлеген ифрат та дөрөҫ аңлаған кеше һәм ул гәзиттең 15-се һанында, "Ғалим һәм дөйә ҡыуыусы" хикәйәһенә ҡарата булған Носсрат Пезешкиандың фекере менән табип Әбуғәлисина һәм уның уҡыусыһы хаҡындағы кинәйәне юҡҡа ғына йәнәш, бер-бер артлы килтермәгән.**

"Табип бәйғәмбәрҙән айырыламы?" тип аталған был кинәйә хатта тәүгеһе менән бер аҙ бәйле лә һымаҡ. Ул ғына ла түгел, диндәр ваҡыт үтеү менән, һәр саҡ үҙгәреп тора, тигәнерәк фекерҙе ҡуйған Носсрат әфәнденең аңлатмаһына тәҙәтеү индереү һәм уны тулыландырыу өсөн махсус рәүештә килтерелгәндер был хикәйә, тип тә әйтер инем. Кинәйәләрҙе бына шундай тәртиптә урынлаштырыу һәм башҡа миҫалдар килтереү юлы менән Исмәғәзәм ҡусты оҫта ғына итеп гәзит уҡыусыға фекер үҫтереү өсөн һау орлоҡ һалған.

Үҙенең яратҡан остазы Әбуғәлисина ялынып-ялбарып һорағанда ла, сатлама һыуыҡта тышҡа сығып, мәке уйып һыу алып инеүҙән баш тартҡан уҡыусы, таң беленеү менән, намаҙға тәһәрәт өсөн һыуға барырға йыбанмай, уны үҙенең һис һүҙһеҙ үтәлергә тейешле бурысы итеп һанай. Бәйғәмбәрҙең вафатынан өс йөҙ йыл үтеүенә лә ҡарамаҫтан, ул мотлаҡ ҡушҡан намаҙ уҡыуҙы (ислам диненең бер терәге), ә уның өсөн шулай уҡ мотлаҡ тәһәрәт алыу кәрәклеген (намаҙ тәһәрәтһеҙ ҡабул ителмәй) белгән мосолман булараҡ, был уҡыусының ошо ғәмәлде һис икеләнеүһеҙ үтәүенең сәбәбен мин түбәндәгесә аңлатып бирмәк булам. Өс йөҙ түгел, хәҙер инде мең ярым йыл үтеп бара, әммә динебеҙ терәктәре шул көйөнсә ҡала килә, һәм улар Ахырызамانғаса һис бер үҙгәртеүһеҙ барасаҡ, иншаллаһ.

Мәҡәләлә Исмәғәзәм Исмәғилев балалар баҡсаһындағы экспериментты миҫал итеп килтерҙе. Ифрат та тапҡыр миҫал. Йәшел төҫтә хатта меңәрләгән кеше кемгәләр "ҡыҙыл" тип тылҡыған хәлдә лә, ул - тик йәшел генә булып ҡаласаҡ! Икенсе төрләрәк итеп әйткәндә, хәҡиҡәт - берәү генә һәм ул бер ваҡытта ла үҙгәрмәй. Динебеҙ ҡанундарына ҡарата нәҡ тә сабый балалар һымаҡ ысын йөрәктән булған ныҡлы ышанысты, йәғни иман төшөнсәһен бәгзеләр фанатизм менән бутап ҡаңғыра. Минең фекеремсә, кинәйәгә ярашлы, Әбуғәлисинаның уҡыусыһының "Нинә һин бәйғәмбәр булырға ынтылмайһың?" тигән һорауына яуап: Бәйғәмбәрҙәргә аңыҡ сифаттар һәм мәсьәләләр ҡуйып, тик бер Аллаһ ҡына уларҙы илсе итеп тәғәйенләгән, шунлыҡтан, уҡыусыһы үҙенең ныҡ яратҡан остазының үтенестәрен үтәмәгән хәлдә лә, Аллаһ илсеһенең бойороҡтарын һис икеләнеүһеҙ үтәй (Бәйғәмбәрҙең һәр бойороғо - Аллаһтан). Ә ғалим үҙе бәйғәмбәр булырға ынтылмай, сөнки бәйғәмбәрлек, йәғни Аллаһ илсеһе булыу - фәҡәт бер Аллаһтың ҡөҙрәтендә, һәм әҙәм балаһы үҙен ниндәй генә аҡыллы итеп тойоуына ҡарамаҫтан, үҙен үҙе бәйғәмбәр итеп тәғәйенләй һәм таныта алмай! Икенсенән, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙән һуң бер ҡасан да башҡа бәйғәмбәр булмаясаҡ! Ҡөрьән Кәримдә Аллаһы Тәғәлә Мөхәммәттең иң һуңғы бәйғәмбәр икәнлеге хаҡында әйтә (Әл-Әхсәб (Фирҡәләр) сүрәһе, 40-сы аят). Ислам динен тәрән белгән был ғалим, әлбиттә, бына шундайыраҡ фекерҙә булған һәм үҙенең уҡыусыһының аңына тап бына ошо хәҡиҡәтте һеңдерергә уйлаған.

Тәүге, йәғни "Ғалим һәм дөйә ҡыуыусы" кинәйәһенә ҡарата шәхсән үҙемдең фекеремде мин түбәндәгесә әйтер инем. Үҙенең ҙур ғалим икәнлеге хаҡында иҫкәртеп, дөйә ҡыуыусының бер өлкәлә лә үҙенә ҡарағанда күберәк белеүе мөмкин түгеллеген иҫбатларға тырышҡан "аҡыл эйәһе"нә уҡый-яҙа ла белмәгән дөйә ҡыуыусының яуабында киләһе фекер һалынған: Аллаһы Тәғәлә кешенең йөрәген иман менән ниғмәтләндерер булһа, һинең донъяуи ғилемдәрҙе күп белеү-белмәүеңә лә ҡарамай. Әгәр Раббыбыҙ теләмәй икән, йөк-йөк фәндәр академиғы булһа ла, дин ғилеменә күңел бирмәй, ғүмер буйы һәр төрлө фәндәр менән генә булышҡан кешенең йөрәге лә имандан буш булыуы мөмкин. Бына шул фекер һалынған был кинәйәгә.

**Быныһы гәзитебеҙҙең 17-се һанындағы кинәйәгә шаңдау.**

"Бер ҡыйыҡ башы... ике төрлө донъя" исемле хикәйәгә фекеремде әйтерҙән алда, үҙемдең дә бер-ике кинәйәмде килтермәксемен. Билдәле ғалим, йәҙрә физикаһының "атаһы" Альберт Эйнштейн ниндәйҙер бер ҡалаға күпмеләр ваҡытҡа йәшәргә күсеп килә. Үҙенең тышҡы ҡиәфәтенә әллә ни иғтибар итергә яратмаған ғалимдың һәр саҡ иҫкерәк пальтола йөрөүен күреп, таныштары иҫкәрмә яһай:

- Һеҙ - күренекле кеше, нишләп яңы пальто алып киймәйһегеҙ?

- Һис ҡурҡынысы юҡ, - тип яуап бирә ғалим, - мине бында бер кеше лә белмәй бит...

Шул ваҡыттан бер нисә йыл үтеп китә. Таныштары уның һаман элекке кейемдә булыуына ҡарап, тағы ла шул һорауҙы бирә:

- Нишләп һаман пальтоғыҙҙы алыштырмайһығыҙ?

- Һис ҡурҡынысы юҡ, - тип яуап бирә Эйнштейн тағы, - мине бында бөтәһе лә белә бит...

Киләһе кинәйә:

- Ҡана, әсәһе, ҡорот бир әле, - ти ире, үҙе ҡоротто маҡтай. - Эй, шәп нәмә бит ул, составында аҡһым тулы, витаминдары ла күп, аш һеңдереү өсөн дә унан яҡшы нәмә тапмаҫһың...

- Ә-әй, атаһы, булған ғына ҡоротто вис баҙарға сығарып һатып бөттөм кисә генә!

- Әй, әсәһе, ҡалай шәп иткәнһең! Оло кешенең үҙеген көйҙәрә бит ул, тешә лә ҡамаштыра, килеп тороп..."

Был тормошта күп нәмәгә сағыштырыуҙар ярҙамында бағабыҙ бит. Ике ҡапма-ҡаршы ситуацияға бер үк төрлө баһа биреү, йә иһә, киреһенсә, бер үк күренеште ике төрлө, хатта ҡапма-ҡаршы итеп күрһәтә белеү ниндәйҙер кимәлдә кешенең зирәклеген аңлатыуы мөмкин. 17-се һандағы кинәйәлә бер ҡыйыҡ башындағы климатты ике төрлө итеп күрһәтеүгә ирешкән ҡөйнә лә бик "зирәк кеше" булған, тип фаразларға була. Былдай нәмәне уйлап сығарыу ҡапыл да бер ҡатлы ябай кешенең аҡылынан килерҙәй түгел. Донъялағы һәр күренеште яҡшы кешеләр үҙҙәренсә яҡшы яҡҡа борорға тырышһа, кире кешеләр, әлбиттә, бөтөнләй икенсе, йәғни, кире яҡҡа ла бора ала...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

---

УҢЫШ ҠАҘАН



## ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

### Йыһан ҡанундары

Тормоштан нимә һорайбыҙ - ул шуны бирә. Ҡыҫҡаһы, әгәр анализ эшләп ҡараһаҡ, алдыбыҙға килгән ваҡиғаларға тормошҡа ашырға үҙебеҙ ярҙам иткәнлегебеҙҙе аңларбыҙ. Йыһан ҡануны күршеләргә тәьҫир итәме икән, тип уйланмағыҙ. Уның урынына сәбәп-эҙемтә бәйләнешенең үҙ тормошоңа кешеләр менән мөнәсәбәттәренә, уңыштарға йәки күңел ҡайтыуына йоғонто яһағанын күҙәт. Шул ваҡытта тормошоңда тыныслыҡ күберәк булыр.

**Ябайҙан - ҡатмарлыға.** Ябай эштәрҙе башҡарырға өйрәнгәс, етди эштәргә тотонабыҙ. Һуңынан тағы ла етдиерәктәре менән шөғөлләнәбеҙ. Белем алғанда ла тәүҙә беренсе синыфҡа барабыҙ, һуңынан икенсегә, өсөнсөгә... Һөҙөмтәле система һәм ул: "Күпте белгән һайын бурыстар ҡатмарлаша бара!" - тигән принципҡа ҡоролған. Әммә ниндәйҙер ваҡытта кешеләр ошо хаҡта онота. Тормош - ул даими алға барыу. Бында бары тик бер генә һорау тора: "Булғанды нисек файҙаланаһың?". "Бер нисек тә", - тип яуаплаһағыҙ, бер ниндәй ҙә яҡшы яҡҡа үҙгәрешкә өмөт итмәгеҙ. Йыһан тыныслыҡты ғына баһалай.

**Беренсенән - икенсеһенә.** Ҡасандыр миңә йәшәү күңелһеҙ һымаҡ тойолғайны. Ҡайһы бер кешеләрҙең тормошо ҡайнап тороуын күреп, улар быға нисек өлгәшә икән, тип аптырай инем. Һуңынан уларҙың барыһы ла ҡасандыр беренсе аҙым яһағанын асыҡланым. Бәләкәйҙән башлап, улар ҙур уңыштарға өлгәшкән. Ҡайһы берҙә артыҡ һайланып, ҙур хата яһайбыҙ. "Мин был эш менән шөғөлләнергә теләмәйем", - тип, эштән баш тартабыҙ. Әгәр ошо мәлдә башҡа варианттар юҡ икән, ошо мөмкинлеккә йәбеш, уның асылына төшөн, һуңынан, береһе артынан икенсеһе эйәрә икән, эйәр. Әгәр әлеге ваҡытта глобаль эш ҡыйратырға мөмкинлегегеҙ булмаһа, бәләкәй аҙымдарҙан башлағыҙ. Иң мөһиме - башларға. Мөмкинлек килеп сығыу менән эшләй башлағыҙ. Ниндәй генә бәләкәй һәм әһәмиәтһеҙ эш булмаһын, уны бөгөн эшләргә тырышығыҙ, шул ваҡытта алдығыҙҙа яңы мөмкинлектәр асылыр. Был - абруй яулау, тигәнде аңлата. Бер ваҡиға мотлаҡ икенсеһенә алып килә.

**Тәлмәрйен принцибы.** Күптәребеҙ тәлмәрйен һәм бер биҙрә һыу тураһындағы тарихты ишеткән барҙыр, моғайын. Ул энтропия ҡанунын асыҡ күрһәтә. Әгәр аҡыллы һәм тормошто һөйгән тәлмәрйендә ҡайнар һыулы биҙрәгә ташлаһаҡ, ул нишләр? Шунда уҡ һикереп сығыр. "Бында яҡшы нәмә юҡ, мин ҡастым!" - тип уйлаясаҡ ул. Шул уҡ тәлмәрйендә һалҡын һыулы биҙрәгә һалып, һыуҙы ут өҫтөндә йылап ҡына йылыта башлаһаҡ нимә булыр? Тәлмәрйен тынысланыр һәм көсөргәнештән арыныр. Бер нисә минуттан ул: "Ә бында йылы һәм уңайлы..." - тип уйлар. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң бешеп сығыр...

Фәһем нимәлә? Тормошта барыһы ла яйлап бара. Беҙ ҙә тәлмәрйен кеүек, алданырға һәм быны бик һуңлап аңларға мөмкинбеҙ. Шуның өсөн тирә-яҡта нимә барғанын даими күҙәтеп торорға кәрәк.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**



### 15 МАЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.25 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 03.30 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Давай поженимся!" (16+).
18.00 "Первая студия". Прямой информационный канал (16+).
20.00 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Власик. Тень Сталина". 7-я и 8-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00"Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.20, 03.05 "Добро пожаловать в Муспорт". Комедия (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Склифосовский". Драматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Доставка". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Капитанша". 1-я и 2-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.45 "Шерлок Холмс". "Любовница лорда Маулбрея". Детективный сериал (12+).
03.40 "Гюльчатай". Сериал (12+).

### БСТ
**Профилактика на канале.**
**14.00 Новости недели.**
**14.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (6+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**17.15 "Полезные новости" (12+).**
**16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**17.15 "Неизвестный Башкортостан" (12+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**18.30, 22.45 Новости (на башк. яз.).**
**19.15 "Бай" (12+).**
**19.45 "Сәнгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Малый бизнес" (12+).**
**22.00 "Спортбар".**
**23.15 "История Одри Хепберн". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.45 "Бәхетнамә" (12+).**

### 16 МАЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.30 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.30 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми". Ток-шоу (16+).
13.20, 15.20 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.10 "Мужское/Женское" (16+).
17.10 "Угадай мелодию".
17.45 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым (16+).
19.15 Чемпионат мира по хоккею-2017. Сборная России - сборная США. Прямой эфир из Германии. В перерыве - Вечерние новости (с субтитрами).
21.30 "Время".
22.05 "Власик. Тень Сталина". 9-я и 10-я серии. Биографический сериал (12+).
00.10 "Вечерний Ургант" (16+).
00.45 Ночные новости.
01.00, 03.05 "Чужие". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Склифосовский". Драматический сериал (12+)
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Мальчик со скрипкой". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир" (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Капитанша". 3-я и 4-я серии (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.45 "Шерлок Холмс". Сериал (12+).
03.40 "Гюльчатай". Мелодраматический сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Барбаросса". Сериал (16+).**
**11.00 "Следопыт" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 18.15 "Неизвестный Башкортостан" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму" (6+).**
**15.30 "Йырлы кәрәз".**
**15.45 "Бауырһаҡ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр" (6+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Дознание" (16+).**
**19.15 "Автограф" (12+).**
**19.45 "Сәнгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Квартет". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Бәхетнамә" (12+).**
**02.15 М.Файзи. "Ак калфак" (12+).**

### 17 МАЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.30 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.10 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.10 "Мужское/Женское" (16+).
17.05 "Давай поженимся!" (16+).
18.00 "Первая студия" (16+).
20.00 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Власик. Тень Сталина". 11-я и 12-я серии. Биографический сериал (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Чужой-3". Худ. фильм (16+).
02.35, 03.05 "Последний американский герой". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Склифосовский". Драматический сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Верное средство". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Капитанша". 5-я и 6-я серии (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.45 "Шерлок Холмс". "Галифакс". Детективный сериал (12+).
03.40 "Гюльчатай". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Барбаросса". Сериал (16+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "У дачи" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**17.15 "Дорожный патруль" (12+).**
**17.45 "Дело "Весна". Док. фильм (12+).**
**19.15 "Үткән гүмер" (12+).**
**19.45 "Сәнгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Красный орел". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.45 "Бәхетнамә" (12+).**
**02.45 Б.Бикбай. "Сваха" (12+).**

### 18 МАЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.15 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Давай поженимся!" (16+).
18.00 "Первая студия". Прямой информационный канал (16+).
20.00 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Власик. Тень Сталина". 13-я и 14-я, заключительная, серии. Биографический сериал (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Чужой 4: воскрешение". Худ. фильм (16+).
02.25, 03.05 "Сладкий яд". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Склифосовский". Драматический сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Короткое замыкание". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Капитанша". 7-я и 8-я серии. Сериал (12+).
23.15 "Поединок" (12+).
01.15 "Шерлок Холмс". "Последнее дело Холмса". Детективный сериал (12+).
03.15 "Гюльчатай". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Барбаросса". Сериал (16+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Неизвестный Башкортостан" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай бакса" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Малый бизнес" (12+).**
**15.15 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Сыйырсык".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Клио" (12+).**
**19.15 "Башкорттар" (6+).**
**19.45 "Сәнгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Последнее дело Ламарки". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 "Бәхетнамә" (12+).**
**02.30 А.Яхина. "Лебедушка моя" (12+).**

### 19 МАЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 04.40 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 Мужское/Женское" (16+).
17.10 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости с субтитрами.
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Победитель". Музыкально-развлекательный проект.
23.00 "Вечерний Ургант" (16+).
23.50 "Фарго". "Городские пижоны". 5-я серия (18+).
00.55 "Место на земле". Худ. фильм (16+).
02.50 "Гром и молния". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Склифосовский". Драматический сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Луна в скорпионе". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести ПФО".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Петросян-шоу" (16+).
23.15 "Мой папа летчик". Мелодрама (12+).
01.10 "Шерлок Холмс". Сериал (12+).
03.15 "Гюльчатай". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Барбаросса". Сериал (16+).**
**11.00 "Краски войны" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Девушка с монистами" (12+).**
**13.30 "Лучи радости". Презентация клипов (12+).**
**14.00 "Хазина" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Бала-сага" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**15.45 "Перекличка" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**16.45, 21.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**17.15 "Современник" (12+).**
**17.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Алтын тирмә".**
**19.45 "Сәнгелдәк".**
**20.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Песня года" (12+).**
**23.30 "Игры патриотов". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 Х.Иргалин. "Вой волчицы" (12+).**

### 20 МАЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Государственный преступник". Худ. фильм.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.40 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Дневник охранника вождя" (12+).
11.20 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.15 "На 10 лет моложе" (16+).
14.00 "Свадьба в Малиновке". Музыкальная комедия.
15.55 "Вокруг смеха".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 Творческий вечер Константина Меладзе.
20.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым".
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "Геракл". Приключенческий боевик (16+).
00.50 "Большие надежды". Худ. фильм (16+)
02.50 "Буч и Сандэнс: ранние дни". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1
05.15 "Особенности национальной маршрутки". Сериал (12+).
07.10 "Живые истории".
08.00 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Аншлаг и Компания" (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Одиночка". Худ. фильм (12+).
16.20 "Золото нации".
18.00 "Субботний вечер".
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Храни тебя любовь моя". Мелодрама (12+).
00.55 "Простить за все". Мелодрама (12+).
02.55 "Марш Турецкого-2". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Доброе утро!"**
**07.45, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Все псы попадают в рай" (12+).**
**09.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**10.00 "У дачи" (6+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "Клио" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**13.00 "Бай бакса" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байык-2017" (12+).**
**17.00 Юбилейный вечер доктора филологических наук, профессора Рашита Шакура (12+).**
**19.00 "Пером и оружием" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәнгелдәк".**
**20.00 "Колесо времени" (12+).**
**21.00 "Полезные новости" (12+).**
**21.15 "Стройки Уфы. Народный контроль" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**22.30, 02.00 Новости надели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башкорт йыры-2017" (12+).**
**23.45 "Блуберри". Худ. фильм (18+).**
**02.30 Н.Гаитбаев. "Любви все возрасты покорны" (12+).**

### 21 МАЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00, 06.10 "Ищите женщину". Худ. фильм.
06.00 Новости.
08.10 "Смешарики. ПИН-код".
08.25 "Часовой" (12+).
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости.
10.15 "Непутевые заметки" с Дм.Крыловым (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.15 "Теория заговора" (16+).
14.20 "Страна советов. Забытые вожди" (16+).
16.30 "Шансон года". Часть 2-я.
18.20 "Аффтар жжот" (16+).
19.30 "Лучше всех!" Шоу талантов.
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Клуб веселых и находчивых". Высшая лига (16+).
00.45 "Канонерка". Приключения (16+).
04.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00 "Особенности национальной маршрутки". Сериал (12+).
07.00 Мультутро "Маша и Медведь".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
13.10 "Семейный альбом" (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Чужое лицо". Мелодрама (16+).
16.15 "Сжигая мосты". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
20.00 Вести недели.
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Русская Антарктида. XXI век". Док. фильм (12+).
02.20 "Испытательный срок". Худ. фильм.

### БСТ
**07.00 "Доброе утро!"**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Удивительные приключения Дениса Кораблева" (12+).**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай" (12+).**
**10.00 "Физра".**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (6+).**
**10.45 "Ал да гөл".**
**11.00 "Сулпылар".**
**11.15 "Фанташ" (6+).**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (12+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башкорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.15 Док. фильм "Озеро в море" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 "Бизнес-обзор" (12+).**
**17.15 "Театральная весна-2017" (12+).**
**18.00 "Байык-2017" (12+).**
**18.55 Футбол. РФПЛ ФК "Уфа" (Уфа) - ФК "Урал" (Екатеринбург).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Никто не забыт..." (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00 "Последний экзорцизм". Худ. фильм (18+).**
**02.30 В.Войнович. "Путем взаимной переписки" (12+).**

✓ *Ата-әсәләрҙең алама ҡылыҡтарын үҙгәртеп өлгөрә алмайбыҙ шул, сөнки беҙ ошоно эшләр йәшкә еткәндә, улар ҡартайған була.*
*(Миньон Маклафлин).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ҒАФУРИ РАЙОНЫ ТӘБИҒӘТЕ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**18-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Бәғерем. Башың. Кейексе. Сана. Ғәйрәт. Кардинал. Люкс. Оло. Ватман. Исаак. Өнһөҙ. Аяҙлау. Үтәғолов. Әкәмәт. Шаян. Лавр. Леви. Файл. Герб. Ария.

**Вертикаль буйынса:** Күсимов. Сыртланова. Кәүҙә. Карнай. Күләгә. Өшә. Ғөбәйҙуллин. Әлифба. Какао. Лета. Миңлеғолов. Австралия. Туҙбаш. Рәсем. Тейен. Утын.

*ҠОЛАҠ ҺАЛ!*

# АЯҠ АҪТЫНДА СИР...



**Көндәр йылыныу менән сысҡан биҙгәге тип аталған бөйөр синдромлы геморрагик биҙгәк менән зарарланыу хәүефе арта.**

**Ҡайһы бер кеше бәләкәй генә сысҡанға әллә ни артыҡ иғтибар биреп бармаһа ла, медиктар был сирҙең бөйөрҙәрҙе, үпкәләрҙе һәм башҡа ағзаларҙы зарарлаусы ауыр, хатта үлемесле инфекцион сир булыуын иҫкәртә.**

Башҡортостан буйынса Роспотребсоюз белгестәре билдәләүенсә, вирус ауырыу кешенән сәләмәт кешегә күсмәй. Ғәҙәттә, ул һауа-саң ысулы аша йоға. Шуға баҡса йорттарын йәки ихаталағы биналарҙы таҙартҡанда, урманда ҡоро-һары, еләк йыйғанда, ҡаланан ситтә булған йорттарҙа эшләгәндә, йәғни сысҡан тиҙәктәре булған ерҙәрҙә, һаҡ булырға кәрәк, сөнки туҙанға ултырған вирус организмға тын юлдары аша үтеп инә. Зарарланыуҙың икенсе юлы - сирле сысҡандарҙың бүлендеге менән зарарланған аҙыҡ-түлекте ашау.

Сирҙе йоҡтороуҙан алып уның тәүге билдәләре асыҡланғанға тиклем 2-3 аҙна, бик һирәк 7 аҙна ваҡыт үтә. Сир киҫкен башлана. Температура 39 - 40 градусҡа тиклем күтәрелә, ҡалтырата, биҙгәк 5-7 көн дауам итә, баш ауырта, мускулдар хәлһеҙләнә һәм ауырта, эс, бил ауыртыуы күҙәтелә. Зарарланғанда вирус ваҡ тамырҙарҙы зыянлай, ҡан һауыуға килтерә, бөйөрҙәр эшмәкәрлеге боҙола. Ауырыу башланғанда ҡайһы берәүҙәрҙә геморрагик күренештәр күҙәтелә: танау ҡанай, күҙҙең лайлалы ҡатламына әҙ генә ҡан һауа.

Беренсе симптомдар күренеү менән сирлене дауаханаға һалырға кәрәк. Дауаланыу ни тиклем иртәрәк башланһа, шул тиклем яҡшыраҡ, сөнки өҙлөгөүҙәр аҙыраҡ буласаҡ.

Бөгөн бөйөр синдромлы геморрагик биҙгәккә ҡаршы вакцина юҡ, шуға күрә ауырыуҙы профилактикалауҙың төп ысулы булып даими рәүештә уҙғарылған санитар-техник саралар һәм кимереүселәрҙе ағыулау, йәмәғәт һәм шәхси һаҡланыу ысулдарын ҡулланыу тора. Дача һәм баҡса йорттарына күсенерҙән алда уның иҙәндәрен өс процентлы хлорамин ҡулланып йыуырға кәрәк. Был иретмә менән һауыт-һабаны эшкәртергә лә мөмкин. Был эштәрҙе башҡарғанда ҡулдарға мотлаҡ бирсәткә кейергә, ауыҙ-танауҙы марля битлек менән ҡапларға кәрәк.

Йышыраҡ был сиргә ир-ат дусар була икәнен дә иҫкәртергә кәрәк. Хатта тәбиғәттә ҡул йыумай тәмәке тартҡанда ла инфекция йоҡторорға мөмкин.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Май (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 15 (19) дүшәмбе | 3:42 | 5:12 | 13:30 | 19:44 | 21:14 | 22:44 |
| 16 (20) шишәмбе | 3:40 | 5:10 | 13:30 | 19:45 | 21:15 | 22:45 |
| 17 (21) шаршамбы | 3:38 | 5:08 | 13:30 | 19:47 | 21:17 | 22:47 |
| 18 (22) кесе йома | 3:37 | 5:07 | 13:30 | 19:49 | 21:19 | 22:49 |
| 19 (23) йома | 3:35 | 5:05 | 13:30 | 19:51 | 21:21 | 22:51 |
| 20 (24) шәмбе | 3:34 | 5:04 | 13:30 | 19:52 | 21:22 | 22:52 |
| 21 (25) йәкшәмбе | 3:32 | 5:02 | 13:30 | 19:54 | 21:24 | 22:54 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**13 май "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия 12+

**14 май "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+

**16 май "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+

**17 май "Нәркәс"** (И. Йомағолов), мелоромантик трагедия. Башлана 15.00. 19.00 12+

**18 май "Хуш, миҙгел!"** Театрлаштырылған тамаша, ижади миҙгелде ябыу 0+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**13 май "Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия. Башлана 18.00 12+

**16 май "Йәнкиҫәккәйем"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия 12+

**18 май "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**18 май "Һулар һауам, эсәр һыуым, тыуған ерем..."** миҙгел ябыу концерты 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**13 май "Маленький гном"** (И. Альмухаметов). Башлана 12.00, 14.00 0+

**14 май "Звездочка"** (Н. Шмитько). Башлана 12.00, 14.00 0+

**19 май "Тысяча и одна ночь"** (П. Васильев) 16+

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән хаттарҙы барлауҙы дауам итәбеҙ. Һеҙ ҙә башҡорт әҙәбиәтендә һәр быуын кешеһенең иғтибарына лайыҡ әҫәрҙәрҙе/китаптарҙы тәҡдим итеүҙән туҡтамағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

57. **Иҙрис Ноғомановтың "Һаҡмарбаш" китабы.** "Китап" нәшриәтендә 2013 йылда сыҡҡан был китапҡа авторҙың "Һаҡмарбаш" һәм "Башҡорт" романдары, "Һуңғы бөркөт", "Ҡон" исемле хикәйәләре индерелгән. Китаптың күпселек өлөшөн биләгән романда һүҙ 1774 йылда батша ғәскәренә ярҙамға ебәрелгән язалаусылар отряды тарафынан яндырылып, икенсе урынға күсерелгән Һаҡмарбаш (хәҙерге Әхмәт) ауылы тураһында бара. Был төпкөл ауылдың фажиғәле тарихы, халыҡтың аянысла яҙмышы мауыҡтырғыс итеп һүрәтләнә. Хикәйәләрҙә лә тыуған яҡҡа һөйөү, уның тарихына һаҡсыл ҡараш кәрәклеге бәйән ителә. Китапты тетрәнмәйенсә уҡып булмай", - тип яҙа Тәнзилә Ҡунафина исемле гәзит уҡыусы.

58. **Әмир Әминевтың "Ҡытайгород" повесы.** "Мин Әмир Әминевтың "Ҡытайгород" повесын "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы исемлегенә индерергә тәҡдим итәм. Һәр ижадсының - шағир булһынмы, яҙыусы йә йырсы булһынмы - үҙенең аудиторияһы була. Әмир Әминевтың иһә, повесть-хикәйәләрен барыһы ла яратып уҡый, сөнки уның яҙған әҫәрҙәре бөгөнгө замандаштарҙың проблемаһын сағылдыра. Әҫәр Тыуған илебеҙҙе, тыуған еребеҙҙе ҡурсалау, рухыбыҙҙы һаҡлау, ата-бабалар васыятына тоғро булыу, айыҡ тормош алып барыу, ауыл йәшәйеше менән ҡала араһындағы айырмалыҡтар, йәштәргә эш табыу, халыҡты ҡайғырта белеүсе етәкселәр мәсьәләһе кеүек ҡырҡыу проблемаларҙы күтәргән. Был әҫәр бер кемде лә битараф ҡалдырмай. Повесть фантасмагорик жанрҙа ижад ителгән, повестың сюжеты: "Кешем, абай бул! Халҡым, уяу бул!" - тигән кеүек", - тип яҙа Өфө ҡалаһынан Гөлсөм Монасипова.

**"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһына ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иңиңдәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған **"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы"** тип аталған фекер алышыу битендә **"#башкитап"** хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

**Рубриканы
Сәриә ҒАРИПОВА
алып бара.**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# ҠАРАМАЙ ҠАЛМАҒЫҘ!



**"Өфөнән һөйөү менән" фильмы прокатта, йәғни кинотеатрҙарҙа уңышлы бара һәм тамашасылар ағымы дауам итә.**

Журналистар менән осрашыуҙа фильмдың режиссеры Айнур Асҡаров ошондай һандар килтерҙе: "Берҙәм автоматлаштырылған система мәғлүмәттәре буйынса беҙ тәүге 12 фильм исемлегенә индек һәм тамашасыларҙың сеансҡа килеүе буйынса әлеге ваҡытта прокатта барған Рәсәй һәм Голливуд фильмдарын уҙып киттек. Был беҙҙең өсөн ҙур уңыш", - тип белдерҙе Айнур Асҡаров. Билдәләнеүенсә, бөгөнгә "Өфөнән һөйөү менән" кинոһы прокатта 2 миллион 317 мең һум йыйған. Фильм Бәләбәйҙә, Октябрьскийҙа, Баймаҡта, Иглиндә, Аҡъярҙа күрһәтелгән дә инде. Ҡараған тамашасыларҙың һаны буйынса Өфөләге "Родина" кинотеатры рекорд ҡуйған. Унда ошо фильмға 6 мең кеше килгән, йыйылған аҡсаның суммаһы 1 миллион һум самаһы тәшкил иткән. "Ультра" кинокомплексында прокат 2714 тамашасы һәм 462 мең һум аҡса йыйған. "Йыл аҙағына килемде 10 миллион һумға еткерербеҙ, тигән ышаныстабыҙ", - ти Айнур Асҡаров.

"Родина" кинотеатрында прокат 17 майға тиклем дауам итә, көнөнә 4-5 сеанс күрһәтелә. "Ультра" кинокомплексында 11 майға тиклем барасаҡ, тип асыҡлыҡ индерҙе пиар-директор Ростислав Размахнин. Әлеге ваҡытта фильмды федераль кимәлдәге прокатҡа сығарыу буйынса һөйләшеүҙәр алып барыла. Кинотаҫмаға ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу өсөн сувенир продукцияға заказ бирелгән. Шулай уҡ тиҙҙән кинотеатрҙарҙа махсус почта йәшниктәре аша Өфө күренештәре төшөрөлгән открыткаларҙы донъяның теләһә ҡайһы төбәгенә ебәрергә мөмкин буласаҡ. Бынан тыш, фильмдың фестиваль тарихы башлана. 20 майҙа "Өфөнән һөйөү менән" таҫмаһы Чебоксар халыҡ-ара фестивалендә ҡатнаша. Әле башҡа халыҡ-ара фестивалдәр өсөн инглиз телендә субтитрҙар әҙерләнә. Фильмдың дөйөм бюджеты 5,2 миллион һум тәшкил итте, шуның 4,5 миллионы - республика Башлығы гранты аҡсаһы.

# ҠЫТАЙҘАРҘЫ ХАЙРАН ИТЕП...



**Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының "Кружева" халыҡ бейеүҙәре ансамбле Ҡытайҙың Тяньцзинь ҡалаһында барған Халыҡ-ара фестивалдә башҡорт, рус, татар, ҡаҙаҡ һәм ҡытай бейеүҙәре менән сығыш яһаны. Халыҡ башҡорт һылыуҙарын хайран ҡалып тамаша ҡылды. Фестиваль көндәрендә яҡташтарыбыҙ сәхнәне Словакия ансамбле менән бүлеште.**

"Кружева" ансамбле сәхнәлә матурлыҡ өләшеп кенә ҡалманы, ошо ил, уның тарихы менән танышты. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә улар Бөйөк Ҡытай стенаһында булырға, үҫешкән инфраструктуралы ҙур һәм гүзәл Тяньцзинь ҡалаһын ҡарарға өлгөрҙө. "Беҙ илдең мәҙәниәте менән танышабыҙ һәм ҡытай халҡына Башҡортостандың йолаларын күрһәтәбеҙ, - тип һөйләй ансамблдең етәксеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Ольга Андреева. - Икенсе донъя, Көнсығыш иле - Ҡытай менән танышыу мөмкинлеген бүләк иткәне өсөн Башҡорт дәүләт педагогия университеты ректоры Р. М. Әсәҙуллинға ҙур рәхмәтлебеҙ".

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, март айында "Кружева" ансамбле Ҡаҙағстанда халыҡ-ара Науруз байрамында Башҡортостан исеменән сығыш яһағайны.

# ЕҢЕҮ ЯУЛАЙ БАЛАЛАР ҘА



**Нариман Сабитов исемендәге Балалар музыка мәктәбе уҡыусылары Абхазияның Пицунда ҡалаһында уҙған "Көньяҡ әкиәт" халыҡ-ара фестиваль-конкурсында наградалар яулап ҡайтты.**

"Дуҫлыҡ" башҡорт халыҡ музыка ҡоралдары ансамбле (етәксеһе Рөстәм Хәйрисламов) - Гран-при, Илсаф Бәҙретдинов - 1-се урын һәм "Башҡарыу оҫталығы өсөн" конкурстың махсус бүләген; Ангелина Ғафарова - 1-се урын; уҡытыусы Руслан Мөләков - 1-се урын; Арсений Казаков - 2-се урын; Айсулпан Фәйзуллина 3-сө урын алды һәм баянсылар дуэты Сыңғыҙ һәм Алсын Солтангәрәевтар конкурс дипломанттары булды.

"Көньяҡ әкиәт" халыҡ-ара фестиваль-конкурсы "Я могу!" мәҙәни-мәғариф проекты сиктәрендә уҙа. Проекттың маҡсаты - һәләтле балаларға үҙҙәрендә ышаныс тойғоһон уятырға һәм яратҡан ижади эштәрендә юғары дәрәжәләргә өлгәшергә ярҙам итеү. Бәйге Рәсәйҙең эре ҡалаларын (Санкт-Петербург, Мәскәү, Норильск, Краснодар, Ульяновск, Ҡаҙан, Өфө) һәм өлкәләрен уратып алды. "Уҡыусылар Кавказдың бай йолалары, ҡунаҡсыл халыҡтың мәҙәниәте менән танышты. Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән йыйылған коллегалар менән аралашыу беҙҙең өсөн бик файҙалы һәм күңелле булды", - тип һөйләне 1-се балалар музыка мәктәбе уҡытыусыһы Людмила Ғимранова.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠЫЛЫС КҮТӘРГӘН...

## ҡылыстан үлер

Ҡырҡҡа тиклем донъяны ҡырырмын, ҡырҡтан һуң бары менән торормон.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ата-әсәләрҙең алама ҡылыҡтарын үҙгәртеп өлгөрә алмайбыҙ шул, сөнки беҙ ошоно эшләр йәшкә еткәндә улар ҡартайған була.

**(Миньон Маклафлин).**

Үс алыу - ул үҙеңде тешләгән этте тешләү менән бер.

**(Остин О,Малли).**

Доға уҡығанда беҙ һәр ваҡыт Аллаһы Тәғәләнән донъяны үҙгәртеүҙе һорайбыҙ, ә үҙебеҙҙе үҙгәртеү тураһында һорарға онотабыҙ.

**(Франсуа Мориак).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер ҡарт вафаты алдынан улын саҡырып алған да былай тигән:"Улым, мин һинең бәхетле булыуыңды теләйем. Бәхетле булыу өсөн ил гиҙ, хыялыңды нисек тормошҡа ашырырға икәнен әйтерҙәр" , - тигән. Атаһы үлгәс, улы донъя гиҙеп сығып киткән. Бына ул бер йылғаға етә һәм яр буйында ябыҡ, ас, ҡарт ҡына бер ат йөрөгәнен күрә. "Һин ҡайҙа китеп бараһың, егет кеше?" тип һорай ат. "Бәхет эҙләп китеп барам, - ти егет. - Бәлки, һин уның ҡайҙалығын беләһеңдер?" "Йәш сағымда мине барыһы ла иркәләне, ашатты, эсерҙе, эшләтмәне, башҡалар хаҡында уйлап та бирмәнем, - ти ат. - Бына хәҙер ҡартайҙым, башҡаларҙың миндә бер эше лә юҡ. Шуға ла һиңә кәңәшем шул: йәшлегеңде һаҡла. Бөтә эште лә эшлә. Башҡаларҙың шатлығы менән шатлан. Хәстәрлектәрҙән ҡурҡма. Шул саҡта бар бәхет тик һинең эргәңдә булыр". Егет артабан китә һәм юл буйында бер йыланды күрә. "Ҡайҙа киттең, егет?" тип һорай йылан. "Бәхет эҙләп китеп барам". "Бына мин дә үҙемдең ағыуым менән ғүмер буйы ғорурландым, - ти йылан. - Минән барыһы ла ҡурҡа, тип уйланым. Юҡ, ҡурҡмайҙар, ә күрә алмайҙар. Һәр береһе мине үлтерергә теләй. Шуға ла мин хәҙер барыһынан да ҡасам. Һиндә лә бар ундай ағыу - ул һинең телең. Ҡара, телең берәүҙе лә сәбәпһеҙгә саҡмаһын. Ул саҡта һиңә берәүҙән дә ҡасырға тура килмәҫ һәм һин бәхетле булырһың... "Егет артабан китә һәм ҙур ҡошҡа тап була. Ҡош уның ҡайҙа китеп барыуы менән ҡыҙыҡһына. Егеттең яуабына ҡаршы ул ҡош шулай ти:"Һин күптән ил гиҙәһеңдер. Йөҙөңдө саң баҫҡан, кейемдәрең һәләмәгә әйләнгән. Кешеләр һинән йөҙ бора. Бәхет тә һинең эргәңдә туҡтап торорға теләмәҫ. Шуның өсөн һинең тирәңдә бар нәмәнең матур булыуына өлгәш. Ул саҡта бәхетеңде лә күрерһең".**

**Шул һөйләшеүҙән һуң егет кеше өйөнә әйләнеп ҡайтҡан. Хәҙер инде ул бәхет эҙләп ҡайҙалыр ситтә йөрөргә түгел икәнен ныҡлап аңлаған".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 12 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5007
Заказ - 952/05